ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискэ Өфө

14-20 ноябрь (ҡырпағай) 2015

№46 (672)

Золотой фонд прессы 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Законлы талапмы, әллә кесәгә талаумы? 3

Рухи донъябыҙ мөһимерәк... беҙ рух менән йәшәгән халыҡ 8-9

Ваҡытыма хәҙер үҙем хужа... 10-11

Торатауға ҡағылмағыҙ! 15

ТВ-программа 14









***"Боронғо герман армияһында шундай принцип хөкөм һөргән: һалдат ниндәйҙер күңелһеҙ хәл-ваҡиғаға тарығандан һуң шунда уҡ ялыу яҙырға тейеш булмаған. Үҙенең үпкә тойғоһон еңергә өйрәнһен, ҡыҙыулығын ауыҙлыҡлаһын өсөн, һалдат бер төн йоҡлай һәм һыуынырға тейеш була. Әгәр ҙә ул ошо ҡағиҙәне күҙәтмәйенсә, шунда уҡ ялыу яҙһа, уны хөкөм иткәндәр".***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Әрмелә хеҙмәт итеү ир-азаматлыҡ билдәһеме?



***Вәсил БАЙРАМҒОЛОВ, шәхси эшҡыуар:*** Мин, армияла хеҙмәт итеү контракт системаһына ҡоролорға тейеш, тигән ныҡлы фекергә килгәнмен. Был ил һағына баҫырға теләмәгәндән йә патриот булмауҙан түгел. Тураһын ғына әйткәндә, был бөгөнгө армия "касафаттары" арҡаһында, унын сифат һәм абруй кимәленә бәйле килеп тыуған инаныу. Һәм бер мин генә шундай уйҙа түгелмен, хәҙер шулайыраҡ фекер йөрөтөүсе йәштәр бик күп. Үҙегеҙ ҙә күреп тораһығыҙ: армияға саҡырыуҙан "ҡасып" ҡалыу хәҙер ғәҙәти күренешкә әйләнде, ул хатта йәш кешенең үҙенә күрә булдыҡлылыҡ, йүнселлек күрһәткесе лә тип әйтергә мөмкин. Аҡсаң булһа, һине законлы рәүештә армиянан алып ҡалырға булышлыҡ итеүсе компания ла эшләй бит хатта. Мәҫәлән, хәрби хеҙмәткә саҡырылыусы үҫмерҙең сәләмәтлегендә ниндәйҙер кәмселек булыуын ул үҙе лә, ата-әсәһе лә белмәй йөрөүе ихтимал. Ә быңдай сәбәпте һәр үҫмерҙә лә табырға була, ентекләп тикшереү генә үткәр. Бөгөн хеҙмәткә саҡырылыусы егеттәрҙең яртыһынан күберәгенең сәләмәтлеге буйынса теге йәки был проблемалары бар. Әлеге мин әйткән ойошма ана шундай мәсьәләләрҙе асыҡларға ярҙам итә лә инде.

Мин үҙем армияла хеҙмәт итмәнем. Бөйөрҙәр эшмәкәрлегендә ниндәйҙер аномалия барлығын белә инем, ләкин медосмотрҙа мине хеҙмәткә яраҡлы, тип яҙып сығарҙылар. Бөтөн анализдарым менән хирургҡа мөрәжәғәт итергә тура килде. Шунан һуң ғына мине тыныслыҡта ҡалдырҙылар. Ә бына берәй ҡыйыуһыҙ ғына ауыл егете сире булһа ла өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрә. Унын ҡарауы, аҙаҡ бынын күңелһеҙ һөҙөмтәләре килеп сығыуына күп тапҡырҙар шаһит булдыҡ бит. Армияла бөгөнгө хеҙмәтте ир-азаматлыҡ мәктәбе тип әйтеп буламы икән? Бер таныш егет һөйләүенсә, армияла ул хеҙмәттәштәре менән йыл буйы иҙән йыуған, ер һепергән, башҡа шундай ваҡ-төйәк эштәр башҡарған һәм сәпкә ни бары 4 бөртөк пуля сәпәгән. "Шунын өсөн генә бер йылым әрәм китте", тип әрнене ул. Йүнле хеҙмәтте бөгөн десантта, диңгеҙ пехотаһында һәм флотта ғына үтәләр инде ул, ә унда бөтәһе лә эләкмәй. Мәгәр эләктең икән - үкенмә, брат, сөнки алда ундайҙарҙы берәй ҡыҙыу нөктәгә ырғытыу перспективаһы көтә. Һәр хәлдә, махсус частар шуға әҙер булырға тейештәр. Уларҙы ысын мәғәнәһендә һуғышсылар итеп өйрәтәләр.

Ҡыҫҡаһы, мин армиябыҙ - абруйлы, ә хәрби хеҙмәт түләүле булырға тейеш, тип иҫәпләйем, сөнки хәрби хеҙмәт һәр осраҡта ла кеше ғүмеренә хәүеф менән янай. Бигерәк тә халыҡ-ара сәйәси тотороҡлолоҡ булмаған бөгөнгө заманда.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ЕР БУЛҺА ҒЫНА... йәшәү була

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының көнүҙәк урынға ҡуйып хәл итә торған мәсьәләләре байтаҡ. Әммә улар араһында беҙҙең иғтибарыбыҙға айырыуса лайыҡ дүрт йүнәлеште атар инем. 21 ноябрҙә үтәсәк IV Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ла ошолар тураһында һүҙ йөрөтөү мөһим.**



Тәүге һүҙҙе ерҙән башларға кәрәк, сөнки ер булғанда ғына йәшәү ҙә була. Хатта шулай тип тә әйтер инем: ер мәсьәләһен хәл итһәң, бөтөн башҡа проблемалар сиселә лә ҡуя. Бөгөнгө көндә федератив дәүләт эсендәге үҙаллы дәүләт булараҡ, үҙебеҙҙең Конституциябыҙ, Хөкүмәтебеҙ, гимныбыҙ, гербыбыҙ һәм башҡа атрибутикабыҙ бар, әммә еребеҙ юҡ. Башҡортостандағы 14 млн 290 мең гектар ерҙең 80 меңе генә хосуси милек хоҡуғында рәсмиләштерелгән, дөйөм алғанда, был 1 процентты ла тәшкил итмәй. Элегерәк тарих китаптарында батша заманы тураһында һөйләгән бүлектә бер һүрәт була торғайны, унда крәҫтиән үҙенең ерендә һыңар аяғы менән генә баҫып тора. Бөгөнгө көндә беҙ һыңар аяҡта ла баҫып тормайбыҙ.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

*✓ Ауыл Советы аҡсаны эшләп алырға - ерен эшкәртергә, предприятиелары булырға тейеш. Ерҙә эшкәртһәләр, һалымы ла, мәктәп тә була. Ул саҡта ауылда бер генә бала булһа ла, уның өсөн мәктәп тоторға мөмкинлек асыла.*

ҠОРОЛТАЙҒА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ЕР БУЛҺА ҒЫНА...

## йәшәү була

**(Башы 1-се биттә).**

Республика Башлығы йәштәргә ҡала ситендә йорттар һаласаҡбыҙ, тигән инициатива күрһәткәйне, уны бар халыҡ күтәреп алғайны. Өфөнөң ситенә сығып, ерҙәрҙе бүлә башлағайнылар, ул ерҙәрҙең пайсылары ла, башҡа хужалары ла килеп сыҡты. Йәғни, ерҙәргә әллә кемдәр хужа, тик үҙебеҙ генә түгел. Муниципаль райондарҙа ла шул уҡ хәл, уларҙың да ерҙәренең 1 процент самаһы ғына рәсмиләштерелгән. Шул уҡ ваҡытта 46 процент ер федераль милектә, 40 процентының хужаһы юҡ. Ә ерҙең хужаһы юҡ икән, унан дәүләткә бер ниндәй ҙә килем килмәй. Бөгөнгө көндә ауыл биләмәләренең бюджеты шул тиклем бәләкәй, ул хатта юл түгел, һуҡмаҡ һалырға ла, зыяраттарҙы кәртәләргә лә етмәй. Сөнки был бюджет башлыса физик шәхестәрҙең килеменә һалым һәм ергә һалым менән тулылана. Ауылда эшһеҙлек хөкөм һөрә, эшләүсе булмағас, килемгә һалым түләүсе лә юҡ. Шәхси милеккә һалым түләүселәр ҙә күп түгел. Ерҙең эшкәртеүсеһе булмағас, тағы ла килем юҡ. Бына шуның өсөн дә районлар бюджетын яҡынса 40 процентҡа ғына тулыландыра, ҡалған 60 процентын республиканан һорарға мәжбүр.

Ә был улай булырға тейеш түгел. Ауыл Советы аҡсаны эшләп алырға - ерен эшкәртергә, ерҙә эшләгән предприятиелары булырға тейеш. Ерҙе эшкәртһәләр, һалымы ла, фельдшер пункты ла, мәктәп тә була. Ул саҡта ауылда бер генә бала булһа ла, уның өсөн мәктәп тоторға мөмкинлек асыла. Совет заманын кире тойғолар менән хәтерләргә күнекһәләр ҙә, ул заманда, мәҫәлән, мин эшләгән Архангел районында 60-ҡа яҡын мәктәп һәм уларҙың яртыһы башланғыс белем биреүсе мәктәп ине. 40 йортлоҡ ауылды бәләкәй ауыл тип атамай инек, сөнки уның мәктәбе лә, башҡа социаль объекттары ла булды.

Был бөтөн проблемаларҙы ер мәсьәләһенә бәйләй, тиеүселәр булыр. Әммә сағыштырып, анализ яһап ҡараһаң, бөтөн нәмәнең ергә бәйләнгәнлеген аңлайһың. Ерҙе кем һәйбәт итеп ҡуллана, уға хужа була, уларҙың тормоштары ла һәйбәт. Калуга өлкәһен, Татарстанды алып ҡарайыҡ. Ҡаҙандың 2011 йылда ерҙән алған һалым кимәле 12 млрд булды. Шуға ла бөгөн халыҡ Ҡаҙанға барып, уларҙың тормош кимәленә көнләшеп ҡайта. Шуға ер, уны файҙаланыу мәсьәләһен мотлаҡ күтәрергә кәрәк ҡоролтайҙа.

Икенсенән, иҡтисад алға барһын өсөн, был өлкәне яҡшы белгән кешеләр эшләргә тейеш. Йәғни, бөгөн беҙҙең иҡтисад эшләмәй икән, беҙҙең идара итеү аппараты эшләмәй. Ситтән килгәндәр эшләп ҡарай ҙа, килеп сыҡмаһа, ҡул һелтәп ҡайта ла китә. Ни өсөн урындағы кадрҙарҙы үҫтерә алмайбыҙ, ошонда тыуып үҫкән кеше үҙенең етәксеһе алдында ғына түгел, туғандары, яҡташтары, халҡы алдында ла яуаплылыҡ тоя бит. Насар эшләһә, ул ауылына, районына ҡайтырға ояласаҡ.

Өсөнсөнән, тағы ла бер дәүләтселек атрибуты - телгә иғтибар көсәйергә тейеш. Бер территорияла йәшәгән, бер телдә һөйләшкән, бер үк йолаларҙы тотоп йәшәгән халыҡтың теле һаҡланмаһа, ул юғалыу сигенә етә, ассимиляцияға бирелә башлаясаҡ. Халыҡты башҡа милләттәр араһында үҙ урынын тел генә билдәләй, тел генә уны һаҡлай. Ауыл мәктәптәрен ябып, мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡытыуҙы туҡтатып, телебеҙҙе үҫтерә алмаясаҡбыҙ.

Дүртенсе таған иһә - дин. Бөгөн ауылдарҙа мәктәп менән фельдшер пункты ябылған, магазин юҡ икән, кеше ҡайҙа барырға тейеш? Социаль объекттар булмағанда, ғибәҙәт ҡылыу объекты ла халыҡты ойоштороусы урынға әүерелә ала. Тик бының өсөн хәллерәк милләттәштәребеҙҙең мәсеттәр төҙөүҙә ярҙамы кәрәк. Бөгөн ауылдарҙа халыҡ былай ҙа ауыр йәшәй, уларҙан аҡса йыйып, мәсет төҙөп булмай. Шуға ла йылына биш тапҡыр сит илгә барып, ял итеп ҡайтмаһалар, күптәрҙең тыуған ауылдарына матди ярҙам күрһәтеү мөмкинлеге бар. Ислам дине таҙалыҡҡа, яҡшылыҡҡа, әхлаҡҡа ғына әйҙәй халыҡты.

Бына ошо проблемалар күтәрелергә тейеш, тип уйлайым ҡоролтайҙа. Беҙ быны, тегене эшләргә тейешбеҙ, тигән юҫыҡта ғына булмаһын ине һөйләшеү, аныҡ мәсьәлә буйынса аныҡ районда аныҡ ҡарарҙар ҡабул ителеп, уларҙы уртаға һалып һөйләшергә ине.

**Ғарифулла ЯПАРОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Әрмелә хеҙмәт итеү ир-азаматлыҡ билдәһеме?

***Тимерйән РӘЖӘПОВ, БР Хәрби бәрелештәр ветерандары союзының рәйесе:*** Әлбиттә, ир-азаматлыҡ, егетлек билдәһе! Улай ғына ла түгел, һәр йәш кешенең изге бурысы. Был бурысты бер кем дә юҡҡа сығармаған. Борон-борондан ир-егет Ватанын һаҡлаусы һәм яҡлаусы, ил терәге булған. Был ғәмәлде шик аҫтына алып, хеҙмәт итергәме бөгөн, юҡмы тигән бәхәстәр алып барыу бөтөнләй урынһыҙ. Егет кеше үҙенең халҡын, илен яҡларлыҡ кимәлдә булырға тейеш, физик әҙерлеге буйынса ла, рухи йәһәттән дә. Әгәр шулай түгел икән, уның ғүмер һөрөүенең мәғәнәһе ниҙә? Ирмен тигән ир-егеттең азаматлығы ил азатлығын, халҡы мәнфәғәтен яҡлап, йәшнәп йәшәүҙә һынала. Ә бындай әҙерлек һәм өлгөргәнлекте уға тик армия ғына бирә ала, тип уйлайым.

Хәрби хеҙмәттән ҡасыу факттарын армиялағы хәлдәргә, уның абруйы төшөүгә һылтаусылар ҙа бар. Шул уҡ ваҡытта күп нәмә командованиенан тора. РФ Оборона министры булып С. Шойгу килгәс, ил йәмәғәтселегендә армияға ҡарата ыңғай фекерҙәр арта төштө. Армияға барыуҙан ҡурҡырға кәрәкмәй, ул бит үҙе бер тормош мәктәбе. Ҡайһы берәүҙәр бабайлыҡ күренешенән ҡурҡа, ә бит күп нәмә йәш һалдаттың үҙенә бәйле: ҡыйыуыраҡ, үткерерәк күренергә, иптәштәре алында ихтирам яуларға, позитив булырға тырышырға кәрәк. Үҙ-үҙен дә яҡлай алмаһа, артабан ундай кеше нисек итеп илен, ғаиләһен яҡларға тейеш һуң?

***Әнисә ИШДӘУЛӘТОВА, өс ир бала әсәһе:*** Армияла хеҙмәт итеп, үҙгәреп, буйтым егет ҡорона инеп ҡайтҡан йәштәрҙе күрһәм, һоҡланыуымды йәшерә алмайым. Шундай еңелдән булмаған һынауҙы үтеп, иҫән-һау ҡайтыуҙарына ҡыуанам. Үҙемдең ирем дә, ҡустыларым да армияла хеҙмәт иттеләр. Ул саҡ әле нисек тә армияға бармай ҡалыу яйын ҡараусылар бөгөнгө кеүек үк улай күп түгелдәр ине. Хәҙер бит 10 егеттең өс-дүрте генә армияға ыңғай ҡарашта. Хеҙмәт итеү ваҡытын бер йылға ғына ҡалдырһалар ҙа хатта барырға теләктәре юҡ.

Быйыл 9 май Еңеү байрамы айҡанлы Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында булып үткән хәрби парадты ғаиләбеҙ менән ҡарап ултырҙыҡ. Заманса хәрби техника төрҙәренә ҡарап, иҫең китерлек бит! Малайҙарым әле бәләкәйҙәр, иң өлкәненә 12 йәш. Әленән үк, армияға барам, тип хыялланалар, баяғы шул ҡатмарлы техниканы йүгәнләү бөтөн маҡсаттары. Үҙем дә, аталары ла уларҙы, әгәр яҡшы уҡыһағыҙ, шундай машиналарҙы йөрөтөрһөгөҙ, тип дәртләндергән булабыҙ. Ә үҙемдең йөрәк һыҙа... Хеҙмәткә барыр йәштәре еткәнсә, бәлки, армиялағы тәртиптәр ҙә үҙгәрер, яҡшырыр, моғайын, тип йыуатам үҙемде. Улдарыбыҙҙы ул саҡ армияға оҙатыуы ул тиклем хәүефләндермәҫ ине. Тик донъялар ғына тыныс торһон инде.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Хаҡтар шулай: "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 545 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 575 һум 76 тин.**



**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

• Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.

• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Ноябрҙә 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына яҙылыу тураһындағы квитанцияларын ебәргән уҡыусыларыбыҙ **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", "Антология поэзии Башкортостана", Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар", Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы", башҡортса "Дини календарь", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ҡытай Халыҡ Республикаһы Ляонин провинцияһы делегацияһы менән осрашты. Яҡтар төбәк-ара хеҙмәттәшлекте нығытыу һәм иҡтисадтың төрлө өлкәләрендә берлектәге проекттарҙы бойомға ашырыу мөмкинлектәрен тикшерҙе. Осрашыу барышында "Башҡортостан Республикаһының үҫеш корпорацияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте менән "Хайчен Нефтемаш" компанияһы араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды.

✓Ҡытай Халыҡ Республикаһы Башҡортостандың сауҙа партнерҙары араһында бишенсе урынды биләй. 2014 йылда республиканың Ҡытай менән тышҡы сауҙа әйләнеше 685,1 миллион доллар тәшкил иткән, ошо сумманың 79 проценты (541,5 миллион доллар) экспорт тауарҙарына тура килә.Башҡортостандан Ҡытайға нефть һәм нефть продукттары, химия сәнәғәте продукцияһы, вертолеттар, көкөрт, баҡыр һәм башҡа тауарҙар оҙатыла. Ҡытайҙан беҙгә насостар, электр ҡорамалдары, аяҡ кейемдәре һәм башҡа продукция килтерелә.

✓Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов 18 ноябрҙә Өфөгә килә. Сәфәр программаһында М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында уҡыусыларҙың һәләтен үҫтереү үҙәгендә булыу ҡаралған. Урта махсус музыкаль колледжда йәш таланттар һәм уларҙың уҡытыусылары менән осрашасаҡ. Кисен иһә "Дмитрий Хворостовский һәм дуҫтары - балаларға" тип аталған хәйриә концертын ҡараясаҡ. Концерт Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында киске сәғәт 7-лә башлана.

✓Башҡортостанда һуғыш, хеҙмәт, Ҡораллы Көстәр һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары ветерандарының Башҡортостан республика йәмәғәт ойошмаһына яңы рәйес һайланды. Бығa тиклем Өфө ҡалаһы Совет районының ветерандар советын етәкләгән Валерий Шәриповҡа ышаныс күрһәтелде. 1997 йылдан ветерандар советына етәкселек иткән һәм ошо көндәрҙә үҙенең 85 йәшен билдәләгән Марат Муллағәләмов йәмәғәт ойошмаһы президиумы составында ҡалды.

✓Бөтә донъя сифат көнө уңайынан Башҡортостандың Сәнәғәт һәм инновацион сәйәсәт министрлығында республиканың иң яҡшы тауар етештереүселәрен бүләкләү тантанаһы уҙҙы. "Аҙыҡ-түлек тауарҙары" бүлегендә Мәләүез һәм "Почет билдәһе" орденлы Бәләбәй һөт комбинаты лауреат булды. Тәүгеһе үҙҙәре етештергән аҡ май, икенсеһе сырҙың дүрт сортын тәҡдим итте.

✓ *Операторҙан унынң үҙ ҡулдары менән квитанцияма "123 квт.сәғ. артыҡ яҙылған, 313 һум 65 тин кире ҡайтарып бирелде", тип яҙҙырып алырға тура килде. Әйҙә, мәғлүмәт туплана торһон, был өлкәлә ығы-зығы тынырға уйламай, буғай.*



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Быйыл апрель-май айҙарында Өфө халҡы электр энергияһы өсөн түләүгә яңы квитанция алып, ундағы арифметикаға хайран ҡалды. Кем ни сара ҡылғандыр, ә мин үҙемә түләү һалынған дүрт урынлы һанды күреп, күҙем дүрт булғас, әлеге шул квитанцияла күрһәтелгән телефон аша белешмә алырға уйланым. Ике көн буйы шылтыратыу һөҙөмтә бирмәне: трубканы алыусы юҡ. Яуап бирмәгәс, ниңә телефондарын яҙалар икән?**

# ЗАКОНЛЫ ТАЛАПМЫ,

## әллә кеҫәә талаумы?



Аптырағас, күрһәтелгән адрес буйынса киттем. ООО "ЭСКБ" тигән бер ойошма булып сыҡты унынһы. Ишекте астым да "О-о-о!" тип кире яптым: биткә тынсыу һауа бәрҙе, шығырым тулы кеше, аяҡ баҫыр урын юҡ. Иртәгәһенә мин аҡыллыраҡ инем инде: таңғы 6-нан тороп, 7-лә әлеге ЭСКБ-ның бикле ишеге янында егерме беренсе булып сиратҡа баҫтым. Сәғәт 8-ҙә ООО асылды, ләкин сират етеүен ике сәғәттән ашыу көтөргә тура килде. Таяғына таянып, ҡалтырай-ҡалтырай килеп ингән әбекәйҙе нисек сиратһыҙ үткәрмәйһең инде? Унан һуң, кисә йомошом бөтмәгәйне, тип бер ир юлды киҫте. Артабан - йәш балалы ҡатын... Шулай итеп, мең бәлә менән эләгәһең ЭСКБ-ның Сипайлово участкаһы операторҙарына. Унда юлығыҙ төшһә, мотлаҡ үҙегеҙ менән валидол йә эсәр һыу менән корвалол алырға онотмағыҙ. Юғиһә, Алла һаҡлаһын, ошондай сиратта 87 йәшлек бер ир йығылып ятып йән бирҙе, тип тә яҙған, имеш, "Уфимские ведомости" гәзите. Булыр, үҙем "ултырып" ҡайтҡас (сиратта, әлбиттә), мин был хәбәргә ышанам. Ниһайәт, оператор минең сират һанын ҡысҡырҙы. Миңә лә уның менән ярайһы ҡысҡырып һөйләшергә тура килде. Закон һанлаусы кеше булараҡ, бынан алда мин, квитанцияла яҙылғанса, көн алдын, йәғни айҙың 23-25-нә тиклем үк, электр счетчигы күрһәткән һанды операторға оператив рәүештә телефон аша хәбәр итеүгә ҡарамаҫтан, ЭСКБ хеҙмәткәре үҙ белдегенсә миңә бөтөнләй икенсе күрһәткес сәпәп ҡуйған. Түләйһе бурыс ана шуға күрә лә дүрт урынлы һанға әйләнеп киткән. Операторҙан уның үҙ ҡулдары менән квитанцияма "123 квт.сәғ. артыҡ яҙылған, 313 һум 65 тин кире ҡайтарып бирелде", тип яҙҙырып алырға тура килде. Әйҙә, мәғлүмәт туплана торһон, был өлкәлә ығы-зығы әле генә тынырға уйламай, буғай. Прокуратураға мөрәжәғәт итергә тура килмәгәйе, тим.

Ә бит былдай хәлгә дусар булғандар бер мин генә түгел, был көн сиратта ултырып сыҡҡан ике йөҙләп кешене лә шул уҡ түшәмдән алынған һандар килтергән ЭСКБ офисына. Ә кисә күпме кеше булған бында? Иртәгә, иртәнән һуң да тапаясаҡтар әле был юлды. Был хәл ҡасанға тиклем дауам итер һуң? Ниңә ярты йылдан ашыу инде был өлкәлә тәртип булдырырға тырышмай бер кем дә? Ҡайҙа беҙҙең надзорлыҡ итеүсе органдар? Монополияға ҡаршы комитет ниңә тыймай "Энергосбыт" аппетитын? Ошо йылдың майына тиклем ҡулланылған энергия өсөн хаҡ коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр квитанцияһына яҙыла килде һәм бер ниндәй аңлашылмаусылыҡтар булманы. Счетчиктағы реаль һандарҙы күрһәтәһең дә реаль хаҡты түләйһең. Ә хәҙер бухгалтерҙар ҙа осона сыға алмаҫлыҡ арифметика уйлап сығарҙылар. Кемгә һәм ни маҡсаттарҙа кәрәк булды был?

"Бөтөн ығы-зығы шунан килеп сыҡты,- тип аңлатма бирҙе ЭСКБ-ның Үҙәк участка начальнигы Андрей Фесенко,- хәҙер электр энергияһы тәьминәтсеһе Өфө халҡы менән туранан-тура иҫәпләшеүгә күсте, сөнки торлаҡ менән идара итеүсе компанияларҙың ЭСКБ яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте алдында бурысы күбәйеп китеү сәбәпле, ул беҙгә түләй алмай башланы". Квитанцияларҙағы халыҡтың башын бутаусы арифметика ОДН (дөйөм йорт буйынса иҫәпләүҙәр) арҡаһында килеп сыға, сөнки электр энергияһы менән тәьмин итеүсе ойошма дөйөм йорт ихтыяжы өсөн түләүҙе талап итеп, ҡулланыусы менән туранан-тура килешеү төҙөй алмай, был йорт менән идара итеүсе компанияларҙың компетенцияһында, тигән фекер ҙә яңғырай был бәхәстә. Һәм ысынлап та, "Рәсәйҙең ғәмәлдәге Торлаҡ кодексына ярашлы, күп фатирлы йорт биналары милекселәре тарафынан дөйөм файҙаланыуҙағы милек өсөн коммуналь хеҙмәттәргә хаҡты ресурс менән тәьмин итеүсе ойошмаларға туранан-тура түләү мәсьәләһе ҡаралмаған". Был Рәсәй Юғары судының "Ярославль тәьминәт компанияһы" йәмғиәтенең халыҡтан ОДН өсөн түләтеүҙәрен законһыҙ тип таныған ҡарарында (23 июнь, 2015) әйтелә. Күренеүенсә, был мәсьәлә бер беҙҙә генә түгел, ә бөтә ил буйынса шаушыу күтәрҙе. Интернет материалдарында "Энергосбыт" компанияларының былдай һөмһөҙ тәртибе ҡулланыусы кеҫәһен "рейдерҙарса баҫып алыу" тип тә баһаланды хатта. Шулай тип әйтерлек тә! Килеп тыуған хәлдә намыҫлы ҡулланыусы бөтәһе өсөн дә: түләргә теләмәгән яуыз уйлы күршеһе өсөн дә, аҫҡы ҡаттағы магазин йә эргәләге сауҙа киоскыһы өсөн дә, йортҡа йүнле-башлы иҫәп приборы ҡуя алмаған идарасы компания өсөн дә яуаплылыҡ йөкмәргә һәм квитанцияла икеләтә арттырып күрһәтелгән сумманы бер һүҙһеҙ түләргә тейеш булып сыға. Әлеге ваҡытта Өфөнөң Дим, Октябрь, Совет райондарындағы күп фатирлы йорттар комитеты рәйестәре һәм милекселәре менән "ЭСКБ" йәмғиәте һәм торлаҡ-коммуналь идаралыҡтары араһында суд процестары бара. Әүҙем граждандар һәм электр энергияһы өсөн хәҙер ике тапҡырға күберәк талап ителгән сумманы түләргә хәле булмағандар ил Президенты В. Путинға ла, прокуратура органдарына ла, Торлаҡ надзоры буйынса дәүләт комитетына ла туҡтауһыҙ хаттар яуҙыра. Урындағы судтар ҡулланыусылар дәғүәһен ҡәнәғәтләндерә, Арбитраж судтар уны юҡҡа сығара, ә прокуратура органдары өнһөҙ генә "үлемесле" алышты күҙәтә... Энергия менән тәьмин итеүсе йәмғиәттәр үҙ мәнфәғәттәрен яҡлаусы дәлил итеп, РФ Хөкүмәтенең 2011 йылдың 5 майындағы "Күп фатирлы һәм торлаҡ йорттар милекселәре һәм файҙаланыусыларға коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеү тураһында"ғы 354-се һанлы ҡарарын килтерә. Ләкин, белеүебеҙсә, тормош бер көйгә генә бармай. Әлегесә, ведомство-ара низағ һәм бурыстар арҡаһында теге йәки был ресурс хужаһы дибегәне үҙ ҡулына аласаҡ, тип кем уйлаған? Ә бына "Энергосбыт"компанияһы менән торлаҡ идарасылары араһында тап ана шундай мөнәсәбәт килеп тыуҙы ла. Бәхәскә ҡасан нөктә ҡуйылыр ҙа, ярһыған ҡулланыусы күңел тыныслығы табырмы - әйтеүе ҡыйын. Ә түшәмдән алынған түңәрәк кенә һандар һуғылған квитанциялар, бер нигә ҡарамай, беҙҙең почта йәшниктәренә көнө-сәғәте менән килеп ята тора...

Әйткәндәй, ҡулланыусының кеҫәһе таҡыр булһа ла, күңеле киң уның, сираттағы күңелһеҙ яңылыҡты ла ул өнһөҙ генә ҡабул итәсәк, әлбиттә, ҡайҙа барһын инде? 2016 йылдың июленән электр энергияһына тулайым хаҡ - 10-11 процентҡа һәм коммуналь хеҙмәттәргә тариф 6 процент самаһы тағы ла ҡиммәтләнәсәк, тип көтөлә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Ошо йылдың туғыҙ айында Өфөлә биналарҙы ҡуртымға биреүҙән табыш алыуҙың 2546 осрағы теркәлгән. 233 физик берәмек килемдәрҙе декларациялауға йәлеп ителгән. Бюджетҡа ингән физик берәмектәрҙең килеменә һалымдың суммаһы 3,2 миллион һум тәшкил иткән, тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенең финанс идаралығында.

✓ Өфөлә йәшелсәләр һиҙелерлек ҡиммәтләнде. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, аҡ күсәнле кәбеҫтәнең килограмы 7,4 процентҡа артҡан. Картуфҡа һәм кишергә хаҡтар 3,5 процентҡа үҫкән. Һыйыр һәм һарыҡ итенең хаҡы үҙгәрмәгән тиерлек, тауыҡ ите 0,8 процентҡа ҡыйбатланған. Көнбағыш майына, аҡ майға, сәйгә, балыҡҡа, арыш һәм "һоро" икмәккә хаҡтар элекке кимәлдә ҡалған. Шәкәр, тары, дөгө ярмаһы 2 процентҡа арзанайған. Һөт һәм йомортҡа 2,5 процентҡа ҡиммәтләнгән.

✓ Испанияның Бенидорм ҡалаһында көрәш сәнғәте буйынса сираттағы донъя чемпионаты уҙҙы. IAKSA Pro версияһы буйынса донъя рекордсмены Вил Ғабдуллин Рәсәй йыйылма командаһы составында был чемпионатта ла уңышлы сығыш яһаны. Дүрт ҡитғанан өс мендән ашыу спортсы үҙҙәренең оҫталығын күрһәтергә килгән. Вил Ғабдуллин каратэ бүлектәрендә өс алтын һәм дүрт көмөш миҙал яуланы. Шулай итеп, хәҙер Ғабдуллин 33 тапҡыр донъя чемпионы тигән титулға эйә.

✓ Өфөләге Төбәк үҫеш банкы ябыла. 10 ноябрҙә Рәсәй банкы Төбәк үҫеш банкының лицензияһын тартып алыуы тураһында хәбәр итте. Банк Үҙәк банктың норматив акттарын һәм банк эшмәкәрлеге тураһында закондарҙы үтәмәгән. Уның отчеттарында дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр асыҡланған. Банк кредиторҙарға бурысын түләй алмай. Шулай уҡ Төбәк үҫеш банкы түбән сифатлы активтарға аҡса һалған һәм резерв булдырмаған. Төбәк үҫеш банкы 1994 йылдың 6 апрелендә теркәлгән, активтар күләме буйынса Рәсәй банктары араһында 280-се урын биләгән.

✓ Йыл башынан Башҡортостанда ВИЧ инфекциялы әсәләрҙән 319 бала тыуған. 1997 йылдан республикала шундай 2938 сабый донъяға килгән, 2132 бала иҫәптән алынған (тимәк, сабый сирле түгел). Ҡалғандары иһә күҙәтеү аҫтында. Хәҙерге ваҡытта 17 093 ВИЧ инфекциялы иҫәптә тора, шуларҙың 62,7 проценты - ирҙәр. Быйыл 2547 кешелә ВИЧ инфекция асыҡланған: 1699 ир-егет һәм 848 ҡатын-ҡыҙ. Тәүге тапҡыр ВИЧ инфекция табылғандарҙың 498-е - Федераль яза башҡарыу хеҙмәте учреждениеларында.

*✓ Йөрәктау менән Торатау - һаҡлана торған тәбиғәт объекттары. 50 йыл элек Башҡортостан Хөкүмәте бер ҡарар менән тиерлек айырыуса һаҡланырға тейешле объекттарҙы билдәләгән.*



КӨНАУАЗ

# МЫСЫРҒА...
## юл ябыҡ



**Мысыр - Рәсәй халҡы күпләп ял иткән илдәрҙең береһе. Йылдың һәр миҙгелендә лә бөйөк пирамидалар илендә меңәрләгән рәсәйлене осратырға була ине. Ләкин октябрь айының һуңғы көнөндә булған ҙур фажиғә Мысырҙа ял итергә теләүселәргә юлды япты. 224 кешенең ғүмерен өҙгән авиаһәләкәттән һуң ил Президенты Владимир Путин Рәсәй авиакомпанияларына Мысырға осоуҙы ваҡытлыса тыйған указға ҡул ҡуйҙы.**

6 ноябрҙә үҙ көсөнә ингән ҡарарҙың күпмегә һуҙыласағы аныҡ ҡына билдәле түгел. Ләкин авиаһәләкәткә килтергән сәбәпте асыҡлағанға тиклем Рәсәй гражданларына үҙебеҙҙең ил аэропорттары аша Мысырға юл юҡ. Шулай уҡ бөтә туристик операторҙарға ла гражданларға бөйөк пирамидалар иленә юлламалар һатыуҙан тыйылып тороу кәңәш ителде. Ә әлеге ваҡытта Мысырҙа ял итеүсе Рәсәй туристарының имен-һау илгә ҡайтып етеүҙәрен тәьмин итеү бурысы ил хөкүмәтенә, Сит илдәр министрлығына һәм башҡа федераль органдарға йөкмәтелде. Бөгөнгө көнгә 40 меңдән ашыу Рәсәй турисы Мысырҙан ҡайтты ла инде, ләкин бер нисә тиҫтә мең кеше ялын дауам итә. Иң һуңғы ял итеүсе Рәсәйгә 20 ноябрҙә ҡайтып етәсәк, тип күҙаллана. Ҡайтыусылар белдереүенсә, Мысыр курорттарында ял итеү шарттары үҙгәрмәгән, тик самолетҡа ултыртыу барышы ғына тулыһынса Рәсәйҙән килгән техник персонал контроле аҫтына күскән. Шуныһы ла бар - Рәсәйгә юлланыусы туристарҙың багажы хәҙер махсус йөк самолеттарында пассажирҙарҙан айырым ҡайтарыла. Был пассажирҙар хәүефһеҙлеген тәьмин итеүҙең бер юлы, тип белдерә яуаплы органдар.

Шул уҡ ваҡытта кеҫәләрендә алдағы көндәргә Мысырға туристик путевкалар ятҡан граждандар ҙа бихисап. Уларҙың 30 процент тирәһе күтәрмә алған ял көндәрен Мысыр урынына Төркиәлә уҙғарырға ризалашҡан. Эҫе Мысырҙа ял итергә ниәт тотоп та һауа температураһы бер аҙ һыуығыраҡ булған Төркиәгә юлланырға мәжбүр туристар араһында хәлдең бар ҡатмарлығын аңлап, ризаһыҙлыҡ белдереүселәр юҡ. Шулай ҙа күпселек туристар ялдарын кисектереп тороуҙы хуп күргән. Шулай уҡ путевка өсөн аҡсаларын кире ҡайтарыусылар ҙа күп.

Мысырға юлдың ябылыуы нимәгә килтерәсәге тураһындағы фекерҙәр күп төрлөлөгө менән айырыла. Берәүҙәр, оҙаҡламай бөтәһе лә үҙ урынына ҡайтасаҡ һәм Рәсәй туристарына Мысырға юл асыласаҡ, тип бара. Шулай уҡ был аҙымдың ил эсендәге туризмды үҫтереүгә булышлыҡ итәсәгенә ышаныусылар ҙа күп. Был йәһәттән бигерәк тә Сочи, Ҡырым йүнәлештәре популярлашасаҡ, тип фаразлай улар. Төркиә һәм Израиль хөкүмәте лә был ситуациянан үҙ файҙаһын күреп ҡалырға тырыша. Тәүгеһе ял итеү шарттарын тағы ла яҡшыртыуҙы, сервис кимәлен күтәреүҙе күҙ уңында тотһа, Израиль хөкүмәте иһә хатта илгә килгән һәр бер Рәсәй турисы өсөн туристик компанияларға 45 евро күләмендә аҡса күсерергә әҙер булыуын белдерҙе.

Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер сығанаҡтар Рәсәй хөкүмәтендә башҡа Яҡын Көнсығыш илдәренә лә осоуҙы тыйыу тураһында һүҙ алып барылыуы тураһында хәбәр итә. Нисек кенә булмаһын, бынан һуң туристарҙың хәүефһеҙлеге тураһында ил етәкселеге лә, туристик операторҙар ҙа ныҡыраҡ хәстәрлек күрәсәк. Ләкин был ғына әҙ. Тәү сиратта, бындай аңлылыҡ, үҙенең һәм яҡындарының һаулығы, ғүмере өсөн хәүефһеҙлек тойғоһо ял итеүселәрҙең үҙҙәрендә уяныуы шарт. Тик хатта "Ғәрәп яҙы" осоронда барған ҡан ҡойоштар ваҡытында ла ул илдәргә сығыусыларҙың кәмемәүе бының нәҡ киреһен һөйләй шул.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

ҠЫУАНЫСЛЫ ХӘБӘР

**Республика шихандарҙы мотлаҡ һаҡлап ҡаласаҡ, был турала Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Ижтимағи-сәйәси журналистика медиафорумы сиктәрендә республика, ҡала һәм район киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән осрашыуҙа тәүге тапҡыр асыҡтан-асыҡ белдерҙе.**

# ШИХАНДАР ҺАҠЛАП ҠАЛЫНАСАҠ!



- Башҡортостан сода компанияһы" республика өсөн мөһим объект, - тине Рөстәм Зәки улы. - Ул әре һалым түләүсе булып тора, унда 2 меңдән ашыу кеше эшләй. "Каустик" менән "Сода"ны берләштергән предприятиела эшселәр һаны 10 меңгә яҡын. Шуға ла беҙ был предприятиеның яҙмышы өсөн яуаплыбыҙ. Был берләштерелгән компанияның 38 процент акцияларына республика хужа. Предприятие артабан да эшләргә тейеш. Уның сеймал менән тәьмин ителеүе - икенсе мәсьәлә. Барыһы ла беләһ, әле улар Шахтау тауының өҫкө өлөшөндәге сырьены эшкәртә, ул кәм тигәндә 5 йылға етәсәк. Ер аҫтында шулай уҡ эзбизташ ҡатламы бар, шулай итеп тағы ла 60 млн тонна эзбизташ балансҡа ҡуйылған. Йылына 4 млн тонна сеймал эшкәрткәндә лә был запастар 15-20 йылға етергә тейеш ине. Тик әлегә был урындағы гидрологик хәл аныҡ асыҡланмаған, төрлө баһалар буйынса, ҡаҙыныу эштәре башланғас, унда Ағиҙел менән Һәләүек йылғаларынан килгән ер аҫты һыуҙары менән дә "көрәшергә" тура киләсәк. Әлегә был мәсьәләнең хәл ителеше асыҡ ҡала, дөрөҫөндә, унда ҙур тикшеренеүҙәр үткәрелмәгән.

Торатау, Йөрәктау, Ҡуштау шихандары буйынса хәл түбәндәгесә. Йөрәктау менән Торатау - һаҡлана торған тәбиғәт объекттары. 50 йыл элек Башҡортостан Хөкүмәте бер ҡарар менән тиерлек айырыуса һаҡланырға тейешле объекттарҙы билдәләгән. Улар иҫәбенә Ҡандракүл, Асылыкүл, тағы ла бер нисә объект һәм Торатау менән Йөрәктау ҙа ингән. Бөгөнгө көндә уларҙың был статусын алып ташлау өсөн нигеҙ юҡ. Был тауҙарҙа "Ҡыҙыл китап"ҡа ингән үҫемлектәр күп. Тауҙың айырыуса һаҡланыусы тәбиғәт объекты тигән статусын алып булмағас, уларҙы эшкәртеүгә биреп тә булмай.

Быйылғы йылдың май, июнь, сентябрь, октябрендә үткәрелгән социологик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Ишембай халҡы ғына түгел, республикала йәшәүселәрҙең бөтәһе лә шихандарҙы эшкәртеүгә ҡәтғи ҡаршы. Халыҡтың тауышын иҫәпкә алып, "Башҡортостан сода компанияһы"н сеймал менән тәьмин итеүҙең юлдары эҙләнде. Бөгөн Торатауҙан башҡа сеймал итеп ҡулланырлыҡ башҡа сығанаҡ юҡ, тигән фекер бар. Был дөрөҫ түгел. Ярты йыл буйына министрлыҡтар был хәлде ентекле өйрәнә.

Билдәле булыуынса, эзбизташ республикала киң таралған минерал. Стәрлетамаҡ, Ишембайға яҡын урынлашҡан территорияларҙа ла бар ул. Ҡасандыр Ҡаран, Ғүмәр ятҡылыҡтарында тикшеренеүҙәр ҙә үткәрелгән. Шулай уҡ эзбизташ Архангел, Баймаҡ, Әбйәлил районҙарында, Сибай ҡалаһында бар. Тик химик сәнәғәт өсөн таҙа эзбизташ кәрәк, ҡушылмалар аҙыраҡ булған һайын яҡшыраҡ. Күп булһа иһә, эзбизташты яндырған мәлдә төрлө стационар булмаған процестар барлыҡҡа килә. Тик бөгөнгө көндә "Башҡортостан сода компанияһы" ҡулланған сеймал да юғары класлы түгел. Был үҙенсәлек күптән түгел генә асыҡланды. Шуға ла яңы сеймал сығанағы эҙләү күпкә еңелләште. Йәғни, Торатауҙан башҡа сеймал сығанағы юҡ, тигән гипотеза үҙенән-үҙе юҡҡа сыға. Хәҙер иҡтисади яҡтан файҙалыраҡ булған урынды һайлау ғына тороп ҡала. Сибайҙың Төйәләҫе, Әбйәлилдең Әлмөхәмәт эзбизташ ятҡылығына ҡарағанда, Шахтауҙан 35 саҡрымда ятҡан Ғүмәр ятҡылығы күпкә уңайлыраҡ. Хәҙер унда ҡабатлап разведкалар үткәрергә генә ҡала. Әлегә разведка эштәре һөҙөмтәһендә генә балансҡа ҡуйылған эзбизташ күләме - 180 млн тонна. Ул яҡынса 40 йылға етәсәк. Ҡаран, Ғафури районының ташлы ятҡылыҡтары ла күҙ уңында тотола. Әлегә Ғүмәр, Ташлы ятҡылыҡтарына разведка үткәреп, химик сәнәғәт өсөн сеймал булараҡ балансҡа ҡуйырға, 2017 йылдан яңы карьерҙарға транспорт, сәнәғәт инфраструктураһы менән тәьмин итә башларға һәм шул рәүешле "Башҡортостан сода компанияһы"н сеймал менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итергә. Был юл - конфликтһыҙ. Был юл перспективалы, компанияны оҙайлы йылдарға сеймал менән дә тәьмин итә, шихандарҙы эшкәртеү мәсьәләһен дә юҡҡа сығара.

**Әйткәндәй, Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика, ҡала һәм район киң мәғлүмәт саралары журналистары менән осрашыу барышында "Башҡортостан сода компания"һы өсөн икенсе сеймал сығанағы сифатында ҡаралған Ғүмәр ятҡылығын эшкәртә башлағас, Ишембай районының Ғүмәр ауылы халҡы өсөн яңы эш урындары булдырыласаҡ, тип тә белдерҙе. "Ғүмәр ауылы ҙур түгел, 300-ләп кеше йәшәй, - тине Рөстәм Зәки улы. - Ятҡылыҡты эшкәртеү урындағы халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуҙырмай ҡалманы. Мин уларҙы аңлайым. Бында, ысынлап та, бик матур: Егән йылғаһы, көтөүлектәр, эзбизташлы тау итәгендәге сабынлыҡтар. Әммә ошо ятҡылыҡты эшкәртеүҙе ауылдан 4 саҡрым алыҫлыҡта башлау күҙ уңында тотола. Шуға күрә халыҡҡа бер ниндәй ҙә техноген баҫым яһалмаясаҡ. Бынан тыш, кешеләргә эш буласаҡ. Бөгөн ауылда хеҙмәткә һәләтле 86 эшһеҙ бар. Хәҙер уларҙың бер өлөшө геология-разведкалау эштәренә йәлеп ителәсәк. Ҡалғандары карьерҙа эшләйәсәк..."**

**(Теманың дауамын 15-се биттә уҡығыҙ).**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡорт дәүләт медицина университетының стоматология факультеты деканы, профессор Сергей Чуйкин илебеҙ ғалимдарынан тәүгеләрҙән булып Бөтә донъя фондының абруйлы гуманитар премияһын алды. Ул яңаҡ-йөҙ кәмселектәре булған балаларҙы дауалауға һәм ошо сирҙәрҙе иҫкәртеүгә ҙур өлөш индергән өсөн билдәләнде. Бөгөнгө көндә Башҡортостанда ирендәре кителгән һәм аңҡауҙары ярылған өс мең самаһы бала йәшәй. Әммә үҙ ваҡытында яһалған операция кескәй пациенттарға ярҙам итә ала.

✓Башҡортостанда "Илһөйәрлек һәр ғаиләлә. Минең шәжәрәм" интернет-конкурсы иғлан ителде. Бәйгене Башҡортостан Башлығы ярҙамында "Мин Илһөйәр" гражданлыҡ-патриотик тәрбиә төбәк йәмәғәт ойошмаһы уҙғара. Белем биреү учреждениелары уҡыусылары, студенттар, уҡытыусылар, ғалимдар, шулай уҡ теләгән һәр кем үҙенең ғаиләһенең тарихы менән таныштыра ала. Ғаризалар 2015 йылдың 10 декабренә тиклем "Конкурсҡа" тигән билдә менән yapatri-otrb-shejere@yandex.ru электрон почтаһына ҡабул ителә.

✓Ҡарҙың иртә яуыуы сәбәпле, Башҡортостандың һигеҙ районында уңыш юҡҡа сыҡҡан. Республика Башлығы бойороғо менән Баҡалы, Бүздәк, Дәүләкән, Ҡырмыҫҡалы, Нуриман, Туймазы, Саҡмағош һәм Шаран районҙарында ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелде. Юҡҡа сыҡҡан сәсеүлектәрҙең дөйөм майҙаны - 34800 мең гектар. Шәкәр сөгөлдөрө, рапс, көнбағыш һәм йәшелсәләр һәләк булған. Зыян күргән хужалыҡтар дәүләт ярҙамына һәм республика бюджетынан компенсацияға иҫәп тота ала.

✓Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, төбәк - 2015 йылдың ғинуарынан сентябренә тиклем тыуған сабыйҙар һаны буйынса Волга буйы федераль округында беренсе урында. Волга буйы федераль округында бөтәһе 296453 бала тыуған. Башҡортостанда - 44040 сабый, Татарстанда - 42262, Һамар өлкәһендә - 30764, Нижегородка өлкәһендә - 29953, Пермь крайында - 29168. Башҡортостанда тыуыусылар һаны үлеүселәр һанынан 6,9 процентҡа артҡан (2014 йылдың ошо уҡ осоронда - 13,1 процент).

✓Карьял кубогы өсөн турнирҙан һуң "Салауат Юлаев"тар тәүге осрашыуҙы Ҡаҙандың "Аҡ Барс"ы менән уҙғарҙы. Матч хужалар файҙаһына 3:2 иҫәбе менән тамамланды. Ситтә уҙғарған икенсе уйын да юлаевсыларға мәрәй килтермәне. Өфө командаһы Тольяттиның "Лада"һынан 3:0 иҫәбенә еңелде.

✓ *Йылына 20-25 тонна уңыш алабыҙ, әммә һатыу нөктәләренә сығармайбыҙ, тик үҙебеҙҙә генә һатабыҙ. Сөнки беҙҙең лимондар бер ниндәй ҙә химик ашламалар менән эшкәртелмәй, парафинланмай.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЛИМОН ҠАЙҘА ҮҪӘ?



## Үҙебеҙҙә!

**"Банан, банан, килдең ҡайҙан?" тип башланған балалар шиғырын беләһегеҙҙер. Был емештең алыҫ Африканан булыуы мәғлүм, ә республикабыҙ халҡы хатта уның нисек үҫеүе, емеш биреүен үҙ күҙҙәре менән күреү бәхетенә лә эйә. Бының өсөн әллә ҡайҙа алыҫҡа ла йөрөйһө түгел, ни бары Өфөләге "Лимонарий" уҡытыу-тәжрибә хужалығына экскурсияға барыу ҙа етә. Ваҡытында үзбәк лимонарийынан алып киленгән 1500 төп лимон үҫентеһе ултыртыуҙан башланған хужалыҡта бөгөн банандарҙан тыш, төрлө сортлы лимон һәм цитрондар, тағы ла 500-ҙән ашыу культура үҫтерелә.**

"Лимонарий" уҡытыу-тәжрибә хужалығы быйыл үҙенең күркәм юбилейын - егерме биш йыллығын билдәләй. Ошо көндәрҙә Өфө лимонарийына ҡотлау һүҙҙәре еткерергә Рәсәйҙең һәм республиканың төрлө төбәктәренән, Үзбәкстан Республикаһынан ҡунаҡтар йыйылды. Улар араһында БР урман хужалығы министры Динир Әхмәтйәнов, Өфө ҡалаһы Совет районы хакимиәте башлығы Урал Килсенбаев, БР Мосолмандары диниә назараты рәйесе мөфтөй Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин, Өфө урман хужалығы техникумы директоры Дамир Асҡаров һәм башҡа мәртәбәле ҡунаҡтар, ғалимдар һәм ошо өлкәлә эшләүсе белгестәр булды. Улар лимонарийҙың сирек быуатлыҡ тарихы менән танышты һәм Өфө урман хужалығы техникумы студенттары әҙерләгән матур концертты тамаша ҡылды. Шул арала Өфө лимонарийы менән күптән хеҙмәттәшлек итеүсе Ташкент дәүләт аграр университеты доценты Нуретдин Фәхретдинов менән әңгәмәләшеп алдыҡ.

- Өфө лимонарийының 20 йыллыҡ юбилейына килгәйнем, - тине ҡунаҡ. - Лимонарий тағы ла йәшәреп киткән төҫлө, экзотик үҫемлектәр һаны артҡан, улар шаулап үҫеп ултыра. Әлбиттә, был Фәриҙә Вәли ҡыҙының һәм уның хеҙмәттәштәренең фиҙаҡәр эшенән килә. Үзбәкстан тупрағында субтропик һәм тропик үҫемлектәрҙе, цитрустарҙы үҫтереү буйынса белгес булараҡ, Өфө лимонарийында мине ҡыҙыҡһындырған нәмәләр бик күп. Бөгөн, мәҫәлән, бында "карика папайя" йәки "ҡауын ағасы"н күрҙем. Беҙҙә үҫкән ағасҡа ҡарағанда йәшерәк үҫенте булһа ла, 4-5 тапҡырға күберәк емеш биреп ултыра. Шуға күрә, артабан да лимонарий менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итергә, тәжрибә уртаҡлашырға һәм, ниһайәт, ошо ағасты тәрбиәләү серҙәрен өйрәнергә теләгем ҙур. Әйткәндәй, әле мин Ташкент дәүләт аграр университеты менән Өфө урман хужалығы техникумы араһында цитрус үҫемлектәре үҫтереү өлкәһендә хеҙмәттәшлек итеү буйынса биш йылға килешеү төҙөргә ниәтләнеп килдем...

Рәсәй Фәндәр академияһының Комаров исемендәге ботаника институтының Ботаника баҡсаһы оранжереялары етәксеһе Елена Арнаутова әйтеүенсә, баш ҡала лимонарийы Рәсәйҙә иң ҙур хужалыҡ булыуы менән генә түгел, ә беҙҙең климат шарттарына яраҡлашмаған культуралар үҫтергән хужалыҡ булараҡ та юғары баһаға лайыҡ. Әйткәндәй, Елена Арнаутова күркәм байрамға Израилдең милли үҫемлеге - этрогты алып килгән. Был үҫемлек лимондың "тәүсығанағы", лимон тап этрог һәм лаймды һеркәләндереүҙән килеп сыҡҡан культура. Был турала һәм башҡа бик күп мәғлүмәттәрҙе лимонарийға экскурсияға килеүселәр яҡшы белә. Ә унда аҙна һайын практика үткән Өфө урман хужалығы техникумы студенттары үҙ ҡулдары менән үҫтергән үҫентеләре булыуы менән дә ғорур. БДАУ, БДУ, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ һәм Санкт-Петербург урман-техник академияһы студенттары тикшеренеүҙәр үткәрә һәм йыл да диплом эштәре яҡлай.

- 1981 йылда урман хужалығы министры булып эшләгән Марсель Абдулов тәҡдиме буйынса лимонарий төҙөргә әҙерлек башланғанда беҙ бындай уңышҡа өлгәшербеҙ, тип уйламағайныҡ. Зәйнетдин Фәхретдиновтың Үзбәкстандың Ленин исемендәге колхозынан алып килгән "Ташкент" һәм "Юбилейный" сортлы лимондарынан тыш, хәҙер беҙ үҙебеҙ сығарған башҡорт сорттары "Салауат", "Урман", "Ләйсән" лимондары һәм "Уралтау", "Зилә" цитрондары бар. Был лимондар 2008 һәм 2011 йылдарҙа "Башҡортостандың иң яҡшы тауарҙары" дипломы, 2012 йылда "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары" лауреаты, 2013 йылда "Волга буйының иң яҡшы тауарҙары һәм хеҙмәттәре - ГЕММА" төбәк-ара конкурсының алтын миҙалына һәм лауреат исеменә лайыҡ булды. Йылына 20-25 тонна уңыш алабыҙ, әммә һатыу нөктәләренә сығармайбыҙ, тик үҙебеҙҙә генә һатабыҙ. Сөнки беҙҙең лимондар бер ниндәй ҙә химик ашламалар менән эшкәртелмәй, парафинланмай. Әлеге көндә лимонарийға ремонт һәм яңыртыу эштәре башҡарыу талап ителә, ярҙам булыр, тип өмөт итәбеҙ. Сөнки таш ҡала уртаһындағы бер оазисҡа тиң йәшел утрауыбыҙҙы юғалтырға ярамай. Шуға күрә, махсус һаҡланған тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын алыуға дәғүәбеҙҙе белдерҙек. Бөгөнгө конференцияға килгән ғалимдар, юғары власть әһелдәре беҙҙең эшкә баһа бирер, фекерҙәрен әйтер, тип көтәбеҙ, - тине "Лимонарий" уҡытыу-тәжрибә хужалығы етәксеһе Фәриҙә Садиҡова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡалалағы "Лимонарий" уҡытыу-тәжрибә хужалығының ҡаҙаныштары күҙ алдында. Хатта ябылыу ҡурҡынысын еңеп, бөтә ҡыйынлыҡтарҙы үтеп сыҡҡан хужалыҡ бөгөн республиканың брендына әүерелгән. Был тырышып эшләп, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағырлыҡ хеҙмәткәрҙәрҙең эш һөҙөмтәһе.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ӘЙТӘГҮР!

# БЫЛ БАЙРАМ ДА ОНОТОЛА ТОРҒАНЫМЫ?



**XX быуаттың иҫтәлекле хәл-ваҡиғаларын, бөйөк шәхестәрен, быға тиклем мөһим һаналған даталарҙы, уларға бәйле эштәрҙе "тарихҡа яңы ҡараш" һылтауы менән онота барабыҙ хәҙер. Элек 7 ноябрҙә билдәләнә килгән Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы көнө лә шундай онотолған даталарҙың береһеме, уны иҫләүселәр бармы әле?**

**Гөлдәр ҠАҘАҠАЕВА, хаҡлы ялда:** Был көндө бала саҡтан оло байрам булараҡ ҡабул иттек. Тап ошо көндә комсомол сафына ала торғайнылар. Байрам алдынан уҡыуҙағы уңыштарҙы барлап, йыл дауамында атҡарған эштәребеҙгә йомғаҡ яһайбыҙ, һәр кем үҙенә йөкләмәләр ала, иптәштәре алдында вәғәҙә бирә. Мәҫәлән, мин бына шул китаптарҙы уҡыйым, шундай ярыштарҙа ҡатнашам, үҙемде камиллаштырам, ололарға ярҙам итәм, тип яҙып ҡуябыҙ. Студент йылдарында мотлаҡ демонстрацияға сыға инек. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы беҙгә бик күп өҫтөнлөктәр биргән, ябай колхозсыларҙың балалары булһаҡ та, юғары уҡыу йортонда белем алабыҙ, яҡшы йәшәйбеҙ, тип ғорурлана торғайныҡ. Нимә эшләһәк тә, тәү сиратта, иптәштәр нимә әйтер, партия нисек ҡарар, илгә ниндәй файҙа булыр - бына шул мәсьәләне ҡайғырттыҡ. Сәйәси пропаганда бик көслө булған шул ул ваҡытта. Бер генә байрам көнө кешене ҡалай берләштергән, дисциплинаға өйрәткән, рухын тәрбиәләгән. Бала саҡтан кешеләр бер маҡсат менән янып йәшәгән. Ололар йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашыусыларҙы һәм юғары уңыштарға өлгәшеүселәрҙе күреп ҡалһа, һәр яҡлап ярҙамлаша, артабан үҫешергә, һәләттәрен арттырырға ярҙам итә ине. Кәрәкле кадрҙарҙы шулай йылдар дауамында әҙерләгәндәр. Бөгөнгө йәштәргә шул ярҙам, ололарҙың шефлығы, маҡсаттарға ынтылыш тәрбиәһе етмәй, минеңсә. Кешеләр тарҡаулана, насар ғәҙәттәре күбәйә, битарафлығы арта, ялҡаулыҡ еңә бара. Элек саҡ ҡына яңылыш эш эшләһәң дә, комсомол комитеты, партком, дуҫтарың алдында яуап бирә инек. Ғөмүмән, мин был байрамды ошондай фәһемле, яҡшы иҫтәлектәре менән генә хәтерләйем.

**Сынбулат САБИТОВ, студент:** Яңыраҡ Рәсәй тарихы буйынса зачет бирергә кәрәк булды. Уҡытыусыбыҙҙың яратҡан темаһы социалистик революция осоро тарихы икәнен алдан белә инем, шуға ла был теманы тотош ятлап тигәндәй өйрәнергә тура килде. Быға тиклем 7 ноябрь байрамы тураһында бер аҙ белһәм дә, бөтә нескәлектәрен аңлап етмәй инем. Беҙ үҫкәндә совет осоро тураһында тик тәнҡит һүҙҙәре генә ишетергә тура килде бит. Хәҙер ул йылдарҙағы хәл-ваҡиғаларҙың ыңғай яҡтарын да баһалай башланылар. Байрам көнө итеп билдәләмәһәк тә, Октябрь революцияһы беҙҙең ил өсөн бик әһәмиәтле ваҡиға. Нәҡ ул выждан иреклеге индерә, теләгән һәр кешегә бушлай юғары белем алыу мөмкинлеге бирелә, бушлай медицина хеҙмәте күрһәтелә башлай. Шуға күрә, ошо ваҡиға айҡанлы Рәсәй кимәлендә оло байрам үткәрелмәүе ҡыҙғаныс. Тиҫтерҙәремдән, 7 ноябрь ниндәй байрам, тип һораһаң, күптәр баҙап ҡала, "Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы булған көн ул", тиһәң, "Ни өсөн ноябрь айында билдәләнгән байрамдың атамаһы тап килмәй?" тигән ахмаҡ һорау бирәләр. Тарих менән күберәк ҡыҙыҡһынырға, анализларға һәм барыһын да сағыштырыуҙар аша өйрәнергә кәрәк шул.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йәшәреү өсөн...

❖ 100-әр грамм ҡайын бөрөһө, аҡ сәскә, шиңмәҫгөл (бессмертник) үләне, һары мәтрүшкә алып, өс литрлы банкаға һалырға, банка тулғансы һыу ҡойорға, һуңынан эмалле һауытҡа ҡойоп, ҡайнау хәленә еткерергә, талғын утта 5 минут ҡайнатырға. Бер сәғәт төнәткәс, һөҙөргә һәм ашарҙан 20 минут алда 1-әр стакан эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Дауаланыу курсы - 2-3 ай. Йылына 2-3 тапҡыр курсты ҡабатларға.

### Арпа

❖ Күҙгә арпа сыҡһа, ҡара быяланан яһалған буш шешәгә ҡарарға кәрәк. Оҙаҡ та тормай, арпа шиңеп, юҡҡа сыға. Ҡайын ботағын яндырып, уның көлөн көнөнә бер-ике тапҡыр арпаға һөртөргә лә була. Бармаҡ менән тирләгән тәҙрәнең һыуын һөртөп алып, арпаны шуның менән сылаттыра ине ололар. 2-3 тапҡыр эшләһәң, арпа бөтә.

### Түбән ҡан баҫымы

❖ Кем был сирҙән яфалана, тартылған имбир менән сәй эсергә һәм йөҙөм ашарға кәрәк. Шул саҡта ҡан баҫымы нормаға килер.

❖ Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ сәнскәк үләне (татарник колючий) төнәтмәһе эсергә. Төнәтмә шулай әҙерләнә: 20 грамм үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә, талғын утта 10 минут ҡайнатырға, 30 минут төнәтергә.

### Үпкә туберкулезы

❖ 0,5 литр араҡы менән 0,5 литр балды болғатып, шешәгә ҡойоп, ағас бөкө менән яҡшылап ябырға. Шешәне ҡамырға урап, мейестә ҡамыр бешкәнсе тоторға. Дарыуҙы ашарҙан алда көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Күҙҙәргә дауа

❖ 1 балғалаҡ цикорий үләне һәм тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә. Иртәле-кисле ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АППАҠ ҠОШ ҠЫНА

**Башҡорттарҙың мәҙәни йолаларында аҡҡошҡа бағышланған башҡа тотемик байрамдар ҙа осрай. Аныҡлап әйткәндә, ҡайһы бер башҡорт халыҡ йырҙары, бейеүҙәре һәм ҡыҙҙарҙың уйындарының нигеҙе ошо байрамдан тороп ҡалған һәм бөгөнгә көндә үҙ-аллы йәшәй.**

1894 йылда С. Рыбаков Баймаҡ районы Тәмәс ауылында аҡҡош йырына оҡшатып башҡарылған көй яҙып ала. "Был көйҙө башҡарыусы танау аша үҙенсәлекле тауыштар сығарҙы, шул уҡ ваҡытта, көйҙөң моңо яҡшы ишетелә ине", - тип яҙып ҡалдыра Рыбаков.

Л. Нагаева башҡорттарҙың уйындарын тикшереп, ҡыҙҙар уйнаған күп уйындарҙың боронғо йола бейеүе менән бәйле икәнен асыҡлай. Мәҫәлән, "Аҡҡош" уйыны. XX быуат башында ҡыҙҙар ғына уйнаған был уйын түбәндәгесә башҡарылған. Ҡатнашыусылар бер-береһенең биленә тотоношоп торалар. Беренсе ҡыҙ әсә була, ҡалғандары - уның бәпкәләре. Уйын башланыр алдынан "бәпкәләрҙең" "әсәһе" түңәрәк һыҙа һәм ҡыҙҙарҙы уға индерә. Ҡыҙҙарҙың береһе - Мәскәй ролен уйнағаны һорай:

- Инә ҡош, ни ҡылаһың?
- Кәртә.
- Нимә?
- Балаларымды һинән һаҡлар өсөн.

Шулай тип әйткәндән һуң, ул ҡул-ҡанаттарын йәйеп, бәпкәләр алдына баҫа. Мәскәй тағы һорай:

- Артыңдағы ни генә?

Әсә яуап бирә:

- Аппаҡ-аппаҡ ҡош ҡына.
- Берәүкәйен бир миңә.
- Ник бирәйем мин һиңә.

Ошо һүҙҙәрҙән һуң бейеү хәрәкәттәре башлана. Бәпкәләр инә ҡошта тотоноп, уның менән йә һулға, йә уңға һикерә. Мәскәй уларҙың иң аҙаҡта торғанын, һыҙылған түңәрәк эсенән сыҡҡанын эләктерергә тырыша. Инә ҡош ҡанаттары менән уға ҡамасаулай. Бейеү бәпкәләр һәм мәскәй араһындағы диалогтар, шулай уҡ ҡошҡа оҡшатып тауыш сығарыуҙар менән оҙатыла.

Л. Нагаеваның быҙдай уйындар төрлө тотемик байрамдарҙың ярсығы булыуы ихтимал тигәне менән килешмәйенсә лә булмай. Көй, әйтештәр, бейеү менән оҙатылғанға күрә, улар халыҡ хәтерендә һаҡланып, быуын-быуынға тапшырылған булһа кәрәк.

Этнограф П. Белков билдәләүенсә, тотемик йәнлектең ҡыланыштарын ҡабатлау, ишәйеү йолаларының барыһының да нигеҙендә ята. Ҡайһы бер халыҡтарҙа был йолалар тотемдарға арналған йырҙар, бейеүҙәр, уйындар менән башҡарыла. Ҡайһыларында тотемдың холоҡ-ҡылығын ҡабатлаған бейеүҙәр менән генә оҙатыла.

Тимәк, аҡҡоштоң йырына оҡшатып башҡарылған көй ҙә, "Аҡҡош" бейеү-уйыны ла тотем ҡош - аҡҡошҡа арналған тотемик байрамдан тороп ҡалған.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

**Көндәлек өйкәгән мәсьәләләр, хәл ителмәҫтәй тойолған проблемалар менән, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләү маҡсатында һәм башҡа сәбәпле психологҡа мөрәжәғәт итеү әле булһа беҙҙең йәмғиәткә ситкүренеш. Ә шул уҡ ваҡытта ошо юҫыҡта махсус белемгә эйә белгестәрҙең теге йәки был осраҡта ярҙам итеп ебәреү мөмкинлеге юғары. Психологтар үҙҙәре билдәләүенсә, айырыуса көҙ айҙарында ошондай ярҙамға мохтаждарҙың һаны бермә-бер арта. Тәҙрә артындағы моңһоу көҙгө көндәрҙә күңел төшөнкөлөгөнә, сараһыҙлыҡҡа бирелеү, дәртһеҙлек, һүлпәнлек кеүек тойғолар өҫтөнлөк итә. Был осраҡта үҙеңде нисек тоторға, был тойғоларҙан арыныу өсөн нимә эшләргә? Иғтибарығыҙға психолог Регина ҒИЗӘТУЛЛИНАның кәңәштәрен еткерәбеҙ.**



# ҮТКӘНДӘР МЕНӘН ЙӘШӘМӘ ҺӘМ...

## үпкә тойғоларын һаҡлама

- Ҡайһы бер көтөлмәгән ваҡиғалар күңел төшөнкөлөгөнә алып килә. Бындай осраҡта, ғәҙәттә, кешене күңелһеҙлеккә бирелеү, үҙ-үҙен йәлләү, бошоноу кеүек тойғолар ҡармап ала. Был - нормаль күренеш һәм ниндәйҙер кимәлдә кеше өсөн файҙалы ла, сөнки ул организмға өйрәнелгән бер темптан ситләшеп, ял итергә мөмкинлек бирә, йәшәү өсөн көс йыйырға ярҙам итә. Ләкин бындай ваҡытта иң мөһиме ошо хәлдән тиҙерәк сығырға, күңел төшөнкөлөгөнөң ауыр психологик сиргә - депрессияға - әйләнеүенә ҡул ҡуймау өсөн тырышырға кәрәк. Депрессия стадияһына етеүселәргә, төшөнкөлөккә бирелеүселәргә ҡарағанда, яңынан тормош йәмен күрә башлау, йәшәү мәғәнәһен табыу күпкә ауырға төшә. Ә ҡайһы саҡта тик белгес ярҙамы менән генә депрессия упҡынынан сығырға мөмкин. Шуға күрә, ниндәй күңелһеҙлеккә лә аң менән идара итергә ирек бирмәйенсә, төшөнкөлөк ауынан ысҡыныу өҫтөндә эшләргә тырышыу мөһим. Бының өсөн әллә ни ҙур көс түгергә лә кәрәкмәй, ә ни бары тойғоларҙы ҡулға алып, иртәгәһе көндөң мотлаҡ яҡты булыуына ышаныу ҙа тәүге аҙым булып тора. Әгәр ҙә күңел төшөнкөлөгөнә йыш бирелеү күҙәтелһә, йәшәү рәүешенә бер аҙ үҙгәртеү индереп ҡарау ҙа ярҙам итәсәк. Ҡалыплашҡан тормош ағышын үҙгәртеү уй-фекерҙәрҙең дә икенсе юҫыҡта аға башлауына килтерә.

Шулай уҡ ял етешмәү һәм йоҡоһоҙлоҡ та ауыр уйҙарға, ярашлы рәүештә, психологик хәлдең мөшкөлләнеүенә алып барыусы юл. Шуға күрә ошо йүнәлештә лә ыңғай үҙгәрештәр индерергә - йоҡо туйғансы йоҡларға, ваҡытында ял итергә кәрәк.

Яңғыҙлыҡты ауыр кисереүселәргә бер үҙҙәре генә ҡалмаҫҡа кәңәш итер инем. Туғандар, дуҫтар араһында йышыраҡ булыу, тирә-яҡтағыларҙың ыңғай тойғоларынан көс алыу, борсоған мәсьәләләр менән уртаҡлашыу болоҡһоуҙан арынырға ярҙам итәсәк. Ғөмүмән, бындай мәлдәрҙә бар донъянан "ҡасырға", йәшеренергә тырышыу, өйҙә бикләнеп ауыр уйҙарға бирелеп ятыу бер нисек тә ярҙам итмәйәсәк. Иң яҡшыһы - саф һауала күберәк булыу, күптән күрешмәгән дуҫтар менән осрашыу, мөмкинлек булһа, театрға барып, берәй комедия ҡарап ҡайтыу.

Физик эш тә бошоноуҙан һәм көйәфһеҙләнеүҙән арындырыусы бик шәп сара. Өйҙә күптән ҡул теймәгән эш булһа, кисекмәҫтән уға тотоноу өсөн иң ҡулай мәл. Арыу менән бергә рухи көсөргәнешлек тә таралыр, эш тә эшләнеп ҡалыр. Шулай уҡ велосипедта йөрөү, бассейнға барыу, рәхәтләнеп сабынып мунса инеү йә булмаһа оҙайлы юлды йәйәү үтеү ҙә күңел торошона ыңғай тәьҫир итәсәк.

Көҙгө болоҡһоуҙы тәмле-татлы ризыҡ менән "баҫырға" тырышыу тик ваҡытлыса ғына ярҙам итергә мөмкин. Иң яҡшыһы - ашау рационын яңынан ҡарап сығып, файҙалы ашамлыҡтарға өҫтөнлөк биреү, күберәк һуттар эсеү.

Һәм иң мөһиме: үткәндәр менән йәшәмәҫкә, йөрәктә кемгәлер булған үпкә тойғоларын һаҡламаҫҡа, ниндәйҙер аҙым өсөн үҙ-үҙеңдә "ашамаҫҡа" һәм киләсәк тураһында артыҡ борсолмаҫҡа. Үткәндәрҙе үҙгәртеп булмай, ә алдағы тормоштон үҙ яйы — хәүефле тойғолар уны тик йәмһеҙләйәсәк кенә. Шулай уҡ бындай мәлдә мөһим ҡарарҙар ҡабул итергә, ҡыҙыу баштан ниндәйҙер аҙымдар эшләргә ярамай, сөнки ҡасан да булһа төшөнкөлөктө күңел күтәренкелеге алмаштырасаҡ, ә ҡылған эштәрҙе, әйткән һүҙҙәрҙе кире ҡайтарып булмаясаҡ. Бындай аҙымдар менән кемдәндер күңелен ҡыйып, уны төшөнкөлөккә этәреү бер кемгә лә еңеллек килтермәйәсәк.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

УЙҘАРЫМДАН УЙЫЛАМ...

# РӘНЙЕШ ЕБӘРМӘЙМЕ?..



**Кешенең күрәсәге маңлайына яҙыла, тиҙәр. Әммә Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһына һәр ваҡыт һайлау хоҡуғы бирәләр. Шуны онотмаҫҡа тейешбеҙ: кемгәлер насарлыҡ эшләһәк, йәки нахаҡҡа рәнйетһәк, был бөгөнмө-иртәгәме барыбер үҙебеҙгә әйләнеп ҡайтасаҡ. Бер танышымдың һөйләгәндәрен үҙенең рөхсәте менән түкмәй-сәсмәй ҡағыҙға төшөрөргә булдым. Бәлки, кемгәлер фәһем, кемгәлер ғибрәт булыр...**

"Әрменән ҡайтҡас, бер ҡыҙ менән дуҫлашып киттек. Төҫкә лә ныҡ һылыу ине ул. Мөхәббәттән күҙем томаланғайны. Бер аҙ ваҡыт үткәс, Рәмиләмдең әсәһе беҙҙең мөнәсәбәттәргә ҡаршы төштө. Йәнәһе, мин әскесе балаһы, киләсәктә мин дә эскегә һабышып китәсәкмен. Атаәсәйемдең "йәшел йылан" менән дуҫ булыуы мине ошондай сетерекле, уңайһыҙ хәлгә ҡалдырҙы. Шуға күрә атаәсәләргә, рюмка тотор алдынан иң тәүҙә балаларығыҙ яҙмышын уйлаһағыҙ ине, тип әйтеп ҡуйғым килә.

Шулай итеп, һөйгәнемдең әсәһе күҙемә тура ҡарап: "Ҡыҙымды алкаш балаһына бирмәйем!" - тип әйтте. Шулай ҙа мин Рәмиләгә был хаҡта бер нәмә лә өндәшмәнем, бер ни булмағандай, көн һайын килеүемде дауам иттем. Әммә Рәмиләм берҙән-бер көндө: "Бөгөн килмә, әсәйем сығармай", - тине, артабан да осрашыуҙарыбыҙҙы кисектереү өсөн төрлө сәбәптәр уйлап сығарҙы. О?аҡ та үтмәне, әсәһенең был "тәртипле" ҡыҙы ҡатынлы бер ир менән йөрөй тигән хәбәр килеп етте. Минең мөхәббәт һүрелде, Рәмиләне яйлап оноттом. Тыныс холоҡло, баҫалҡы ғына бер ҡыҙ менән танышып, оҙаҡҡа һуҙмай өйләнешеп тә ҡуйҙыҡ. Аллаға шөкөр, хәҙер ике бала үҫтерәбеҙ.

Рәмилә, йәнәһе, миңә үс итеп (аҙаҡтан ишетелеүе буйынса) бер егеткә ҡабалан ғына кейәүгә сыҡҡан. Һап-һары, күк күҙле ҡыҙы тыуғас (Рәмилә лә, уның ире лә ҡара сәсле, ҡуңыр йөҙлө), ире ташлап сығып киткән. Күп тә үтмәй, Рәмилә тағы бер бәпес тапты. Хәҙерге көндә ике балаһын әсәһенә ҡалдырып, үҙе кафелар буйлап эсеп, аҙып-туҙып йөрөй...

Бының менән ни әйтергә теләйем: кешегә бер ҡасан да нахаҡ бәлә ягырға ярамай, сөнки күпмелер ваҡыттан ошо уҡ бәлә үҙеңә кире әйләнеп ҡайтыуы ихтимал. Мин, улар әйткәнсә, "эскесе балаһы" булһам да, Аллаға шөкөр, эсмәйәсәкмен", - тип һүҙ бирґәндән килә. Ә Рәмиләнең әсәһе сәмләндергәне өсөн түгел, ә бала саҡтан уҡ ата-әсәйемдең эсеүе үҙәккә үткәндә, үҙ-үҙемә: "Бер ваҡытта ла эсмәйәсәкмен", - тип һүҙ биргәндән килә. Ә Рәмилә, арыу ата-әсә балаһы, ана ҡайһылайтып эскелеккә бирелеп китте. Уның әсәһе бер көндө мине осратып: "Янылышҡанмын, улым, ғәфү ит, теге ваҡыт ҡаршы төшмәһәм, бәлки, барыһы ла яҡшы булыр ине", - тине. Йәл булып китте. "Бөтәһе лә яҡшы булыр", - тип йыуатҡан булдым.

...Ә мин үҙемдең ғаиләмдә бәхетлемен. Теге саҡта, бәлки, Рәмиләнең әсәһе шулай эшләргә тейеш тә булғандыр. Нимә генә тимә, әсә кеше бит, борсолғандыр. Һәр хәлдә, мин уны шулай итеп аҡлап маташам хәҙер. Әммә Рәмиләне онота алмай ғазапланған тәүге мәлдә эскән атаәсәйемә лә, уларҙың эсмәгән улына нахаҡ бәлә яҡҡан Рәмиләнең әсәһенә лә рәнйемәйенсә булдыра алманым. Рәнйеш ебәрмәй, тиҙәр бит..."

**Айгизә АСҠАРОВА яҙып алды.**

✓ Тик башҡорттарҙың йылҡы өйөрҙәре генә ошо тоҙло һыуҙы шул тиклем яратып эсә, хатта ки үҙҙәре өсөн нектарға тиң эсемлек менән һыуһындарын ҡандырыр өсөн ҡайны саҡта тәүлектәр буйы ошонда тиклем сабып килә...



МӨҺИМ ВАҠИҒА

# БЫУАТТАРҒА ҺУҘЫЛҒАН ТАРИХ



**Илдең ауыл хужалығы торошо тураһындағы тулы мәғлүмәтте земство иҫәп алыуҙары бирә. Земство статистикаһы үҙенең барлыҡҡа килеүе менән 1864 йылда уҙған земство реформаһына бурыслы. Земстволарҙың төп килеме булып һалымдар тора. Уларҙың күләме һалым һалынған милектең "киммәтлелеге һәм килемлелеге" менән билдәләнә, шулай итеп ҡиммәтлелекте һәм килемлелекте билдәләү зарурлығы тыуа. Был бурыс дәүләт тарафынан үҙидараның земство органына йөкмәтелә, был земство статистикаһы барлыҡҡа килеүгә этәргес була. Артабан уның маҡсаттары киңәйә, статистиктар крәҫтиән хужалығының һәм крәҫтиәндәр тормошон ентекле өйрәнеүгә тотона.**

Земство статистикаһы дәүләт статистикаһына мөмкин булмаған ентекле тикшеренеүҙәр уҙғарып, тотош материал бирергә һәләтле була. Иҫәп алыуҙар барышында йорттағы кешеләр иҫәбе (дөйөм йән башы), ир һәм ҡатын енесенән эшселәр һаны, йорттоң ер күләме, сәсеү майҙаны күләме, ат һәм мал һаны өйрәнелә. Хужалыҡҡа кешенең ниндәй эштәр башҡарғанын асыҡлауға ла мөһим иғтибар бирелә. Тикшереү программаһына ауыл хужалығы ҡоралдары (тере булмаған инвентарь) һәм мал-тыуар (тере инвентарь), ер биләмәләре, һөрөнтө ер, бесәнлек майҙандары һ.б. инә.

XX быуатта өс ауыл хужалығы иҫәбен алыу үтә. Аграр секторҙа беренсе контроль-иҫәп сараһы 1916 йылда уҙғарыла. Батша хөкүмәте тәҡдим иткән ауыл хужалығы иҫәбен алыу аҙыҡ-түлек һәләкәтен бөтөрөүҙә төүге аҙымдарҙың береһе була. Эшселәре булған һәм булмаған (үҙ ғаиләһенән йәки ялланып эшләүселәр) йорттар, бер ниндәй мал тотмаған хужалыҡтар, халыҡтың һәм үҙенең ерен эшкәртеүҙән тыш, кәсепселек менән шөғөлләнеүсе сәнәғәтселәрҙең хужалыҡтары, шулай уҡ шәхси ере булмаған хужалыҡтар теркәлә. Ғаиләнең айырым ағзаларының йәки тотош ғаиләнең ауыл хужалығынан тыш килем килтереү сығанағы булып торған башҡа шөғөлө кәсепселек тип һанала.

Өфө губерна идараһы нәшриәте тарафынан земство статистикаһы барлыҡҡа килгәндән алып даими рәүештә "Статистика мәғлүмәттәре" һәм "Хужалыҡ-статистика яҙмалары" йыйынтыҡтары сыға һәм улар ҙур фәнни ҡиммәткә эйә. Йыйынтыҡтарға һандар ғына түгел, губернаның барлыҡ улыстарының, һәр ауылдың географик урыны, милли составы, хужалыҡ ысулдары һәм башҡа мәғлүмәттәр анығ бирелә.

Революцияға тиклемге Башҡортостанда ауыл хужалығы ерҙәренең 55 проценты ҡаҙна, батша ғаиләһе һәм алпауыттар ҡулында була. 1917 йылдың һуңында алпауыттарҙың ерҙәрен тартып алыу башлана. Крәҫтиәндәргә ер биреү тигеҙләү принцибында тормошҡа ашырыла, бында бөтөн ерҙәр ҙә таратып бирелә - бүлемдәр, купчий ерҙәре, иректе, аҫаба башҡорт ерҙәре, банк ерҙәре, монастырь ерҙәре, ҡаҙна ерҙәре һ.б. Ауыл хужалығына империалистик һәм граждандар һуғышы ҙур зыян килтерә. Кесе Башҡортостандың өс кантонында ғына 650 ауыл юҡҡа сыға, 7 мең крәҫтиән хужалығы бөлгөнлөккә төшә.

1918 йылда совет хөкүмәте декреты менән земство учреждениелары бөтөрөлә. Улар менән бергә ғәмәлдәге земство статистикаһы ла үҙ эшен туҡтата. Әммә статистика тикшеренеүҙәре тәжрибәһе яңы власҡа ла кәрәк була. Иҡтисади ҡоролош үҙгәреүгә бәйле, РСФСР халҡы иҫәбенең, уның эшлекле торошоноң һәм илдең иҡтисади ресурстарының анығ мәғлүмәтләрен алыу зарурлығы тыуа. Халыҡ Комиссарҙары советы 1920 йылдың 28 августында 1916-1917 йылдарҙағы иҫәп алыу программалары кеүек үк демографик, профессиональ һәм ауыл хужалығы иҫәбен үткәрергә ҡарар сығара. Ауыл хужалығы иҫәбен алыуҙар РСФСР һәм совет республикалары территорияһында: Украина, Ҡырғыҙстан, Башҡортостан, Төркөстан һәм Татарстанда уҙғарыла. Ул тулыһынса крәҫтиән йәмғиәттәрен, артелдәрҙе, совхоздарҙы һәм барлыҡ айырым хужалыҡтарҙы теркәй. Шул уҡ ваҡытта иҫәп алыусылар биләмәләр ерҙәрендә сәсеүлек майҙандары булған хужалыҡтарҙы ғына иҫәпкә ала.

20-се йылдар башында, тотош Рәсәйҙәге кеүек үк, Башҡортостанда ла анархия һәм тәртипһеҙлек хөкөм һөрә. Хәрби хәрәкәттәр бара, документтар ылауына һөжүм артынан һөжүм яһала. Бынан тыш, иҫәп алыуға бары тик Башҡорт автономияһы сиктәрендәге Кесе Башҡортостан ғына эләгә. Шулай итеп, быға тиклем иҫәп алынған территорияларҙың бер өлөшө 1920 йылда иҫәпкә алынмай ҡала. Иҫәп алыу төрлө территорияла төрлө ваҡытта уҙғарыла. Уның губерналар буйынса һөҙөмтәләре айырым-айырым донъя күрә. Дөйөм йомғаҡтарҙы, территориялар тап килмәгәнлектән, 1917 йылғы иҫәп алыу һөҙөмтәләре менән сағыштырыу ҙа мөмкин булмай.

Иҫәп алыуҙан һуң килгән йыл ҙур һынауҙар йылы була. Бөтөн көс быға са булмаған аслыҡ һәм уның эҙемтәләре менән көрәшкә йүнәлтелә. Әммә шундай ауыр ваҡытта ла статистика туҡтап ҡалмай. Барлыҡ ауылыҡтарға ҡарамаҫтан, Бюроға (1918 йылдың 15 сентябрендә Халыҡ комиссарҙары советы ҡарары менән губерналарҙа статистика алып барыу губерна статистика бюроларына йөкмәтелә) ағымдағы статистиканы юлға һалыу һәм 10 процент ауыл хужалығы иҫәбен алыуҙы үткәреү мөмкин була. Ирекмән корреспонденттарҙың киң селтәре аша ауыл хужалығы буйынса мәғлүмәт йыйыу ойошторола (мәҙәлән, сәсеүлек майҙандары, малсылыҡ, ҡортсолоҡ, уңыш һәм иген йыйыу торошо).

1925-1926 йылдарҙа алда торған ауыл хужалығы иҫәп алыуҙарына әҙерләнеү маҡсатында ер менән файҙаланыусыларҙы асыҡлау эше алып барыла. Крәҫтиән хужалығының төп элементтарының иҫәбе һәм халыҡ араһында ла, хужалыҡтарҙа ла булған барлыҡ үҙгәрештәр теркәлә. Барлығы 13484 хужалыҡ, йәғни барлыҡ хужалыҡтарҙың 2,8 проценты иҫәпкә алына. Ауыл хужалығының ағымдағы йыл дауамындағы мәғлүмәттәре (метеорологик мәғлүмәттәр, эш башҡарыу урыны, эшселәрҙе яллау, мал тотоу шарттары, ҡуртымға ер алыу, ауыл хужалығы продукттары хаҡы һ.б.) тулыһынса башҡарыла. Күҙәтеүҙәр 117 улыс иҫәпсеһе һәм 1033 корреспондент тарафынан алып барыла.

Граждандар һуғышы тамамланғандан һуң Башҡортостан республикаһы һәм Өфө губернаһы халҡы 22 процентҡа кәмей, 82,9 мең крәҫтиән хужалығы, сәсеүлек майҙандарының яртыһынан күберәге тиерлек юҡҡа сыға. Яңы иҡтисади сәйәсәт принциптары ауылда тулы үҫеш алмай, был уның иҡтисадының һәм ауыл хужалығы производствоһының алға барыуын тотҡарлай. 1927 йылдың декабрендә ауыл хужалығын коллективлаштырыуҙы башлау тураһында тарихи ҡарар ҡабул ителә. 1928-1930 йылдарҙа 16 эре иген һәм малсылыҡ совхозы ойошторола. 1934 йылға республикала крәҫтиән хужалыҡтарының 75,2 проценты колхоздарға берләшә.

30-сы йылдарҙа ил иҡтисадының ауыл хужалығын планлы алып барыуға күсеүе менән ауыл хужалығы производствоһын статистика күҙәтеүе ысулдары ла һәм иҫәп алыу системаһы ла үҙгәрә. 1926 йылдан 1930 йылға тиклем колхоз һәм совхоздарҙың статистика анализы методологияһы формалаша башлай. Тикшереү һәм иҫәп алыуҙан тыш, ағымдағы хужалыҡ иҫәбе статистика мәғлүмәттәре сығанағы булып тора.

Йәмәғәт хужалығы секторы үҫеүгә ҡарамаҫтан, халыҡтың шәхси ярҙамсы хужалығы ауыл хужалығы продукцияһын етештереүҙә мөһим роль уйнауын иҫәпкә алып, был секторҙа ла мәғлүмәттәр йыйыу дауам итә. Мәғлүмәт сығанағы булып һорауҙарға яуап биреү, һайланмыш тикшереүҙәр һәм иҫәп алыу тора. Ауыл хужалығы статистикаһы буйынса алып барылған иң ҙур эшмәкәрлектең береһе - 1936 йылда уҙғарылған һәм һуңынан йыл һайын дауам иткән мал һанын алыу.

1992 йылдан колхоз һәм совхоздарҙың күпселеге таркала, улар базаһында ауыл хужалығы кооперативтары, крәҫтиән хужалыҡтары ассоциациялары, акционерҙар йәмғиәттәре ойошторола. Реформа йылдарында бигерәк тә ауыл хужалығында тамырынан үҙгәрештәр була. 2006 йылда Бөтөн Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу үткәрелә. Ул яңы иҡтисади, яңы мәғлүмәт технологиялары, Ватан статистикаһы туплаған барлыҡ тәжрибәне ҡулланып уҙғарыла. Унда ер милекселәре, ҡулланыусылар, ер хужалары йәки уны ауыл хужалығы продукцияһын етештереү өсөн ҡуртымға алыусылар, мал тотоусылар - дача хужаларынан алып эре агросәнәғәт комплекстарына тиклем ҡатнаша. 2016 йылда Ауыл хужалығы иҫәбен алыу 1 июлдән 15 август арауығында үтәсәк.

Әлфиә ИШМОРАТОВА.
(Аҙағы. Башы 45-се һанда).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Иван ЛЕПЕХИН

## XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Табын янындағы урмандарҙа һәм, ғөмүмән, Уралда йәнлектәрҙән ҡуян, үрғуян, айыу, бүре, төлкө бик күп, яҡын-тирәләге далаларҙа көҙән, аҫ, йәтсә осрай; тауҙарҙа ябай һәм ҡара ҡарабыштар, йәғни йомрандар күп. Уларҙың ап-аҡ булғандары ла осрай, тип һөйләйҙәр, әммә миңә уларын күрергә тура килмәне; киреһенсә, сыбар төҫтәгеләре икәү булды, уларҙың аҡ йөнлө урындары ҡаралары менән төрлөсә сиратлашып килә: мороно, тәпәйҙәре, ҡойроҡ осо, ҡорһаҡ аҫты, муйыны һәм алғы ҡалаҡ һөйәге тирәһе, шулай уҡ һигеҙгүҙе аҡ йөн менән ҡапланған булһа, ҡалған ерҙәре ҡара була. Уларҙың берәһенең тиреһе бөләкәй таптар менән сыбарланып, аҡ төҫкә яҡынырак ине.

Һирәгерәк булһа ла, Уралдан ағып сыҡҡан йылғаларҙа ҡондоҙ осрай. Бейек тауҙарҙа болан күп, ә урмандарҙа мышылар ҙа йөшәй. Был яҡтарға осоп килеүсе ҡыр ҡаҙҙары, аҡҡош, торна һәм өйрәктәрҙең төрлө төрҙәре, ҡырағай әтәс һәм көйөлдө кеүек ҡоштарҙан башҡа, бөркөт, ыласын, ҡарсыға, өкөләрҙең төрлө төрҙәре байтаҡ, араларында аҡ төҫлөләре лә осрай; ҡор, һуйыр, мышар турғайы, ҡарабаш турғайының төрлөләре, Европа тумыртҡаларының бар төрҙәре, үрмәлсек турғай, суҡ турғай, йәғни бараба, кедр турғайы, әйләнсек күгәрсен һәм башҡа бар ерҙә лә була торған ҡәҙимге ҡоштар бар. Табын ҡаласығын уратып алған тауҙар, башлыса ябай таштарҙан тороп, Урал армыттарына хас булғанса, бик гүзәл үҫемлектәр менән ҡапланған. Бар тауҙар таштарҙың иң яҡшыларынан һаналған гипс менән тулы. Шул йомшаҡ таштың яҙғы һыуҙар менән йыуылыуы һөҙөмтәһендә Табын тирәһендә төрлө мәмерйәләр хасил булған...

Табын ҡаласығынан ун ике саҡырым ерҙә урынлашҡан тоҙло сығанаҡтар шулай уҡ иғтибарға лайыҡ. Көнсығыштан һәм көнбайыштан бейек тау һырттары менән уратып алынған үҙәндә ошондай шишмәләр бик күп. Уның уртаһынан Усолка исемле бигүк бөләкәй булмаған йылғасыҡ ағып ята, ул, ҡайны берәүҙәр яҙғанса, тоҙло шишмәләрҙән түгел, 30 саҡырымлап алыҫлыҡтағы тауҙарҙан башлана. Шишмәләргә яҡын ерҙә Усолкаға төшкөлөк яғынан Йырмыш тип аталған бөләкәй ҡушылдыҡ ҡоя. Ә тоҙло шишмәләр күбеһенсә көнбайыш һырттан ағып сыға. Улар хәҙер утыҙҙан ашыу, ә элегерәк өсәү генә булһа ла, ҙур сығанаҡтарҙан һаналған: белмәйем, ниндәйҙер "аҡыллы" баш уларҙы үҙе өсөн хәүефле, тип иҫәпләп, мөмкин булғанса ҡаплап, басырып ҡараған; һөҙөмтәлә өс сығанаҡ урынына байтаҡҡа күберәк яңы шишмәләр барлыҡҡа килгән. Шул тоҙло шишмәләр ҡасандыр файҙа алыу өсөн ҡулланылған... Әммә Утятниковтан һуң башҡа бер кем дә уларҙы файҙаланыу тураһында уйламаған һәм шишмәләр бөтөнләйгә иғтибарҙан ситтә ҡалдырылған. Тик башҡорттарҙың йылҡы өйөрҙәре генә ошо тоҙло һыуҙы шул тиклем яратып эсә, хатта ки үҙҙәре өсөн нектарға тиң эсемлек менән һыуһындарын ҡандырыр өсөн ҡайны саҡта тәүлектәр буйы ошонда тиклем сабып килә...

(Дауамы бар).

**✓ Күптән һөйләй торғас, быйыл, ниһайәт, ҙур теманы башланыҡ, ул - 7 томдан торасаҡ "Башҡорт халҡының мәҙәниәте". Әлегә мәғлүмәттәр туплана, ҡайны бер томдар яҙыла, бындай хеҙмәтте эшләргә коллективтың көсө бар.**



**Исеме Рәсәйҙә генә түгел, бөтә төрки донъяһына билдәле был ғалимә үҙенең иҫ киткес ябайлығы һәм кешелеклеге менән күптәрҙе хайран итәлер, моғайын. Ҡайны ғына осорҙа, кем булып ҡына эшләмәһен, уны тәү сиратта халҡыбыҙҙың мәнфәғәттәрен яҡлай белеүсе шәхес итеп беләбеҙ. IV Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы сиктәрендә үтәсәк "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының актуаль проблемалары" тип аталған XV Бөтә Рәсәй ғилми конференцияһы быйыл уның күркәм юбилейына арналасаҡ.**
**Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы ХИСАМИТДИНОВА гәзит биттәрендә төрлө темаларға йыш сығыш яһап тора, был юлы уның менән үҙе һәм үҙе өсөн мөһим тип һанаған эштәре, уларҙың әһәмиәте тураһында күберәк һөйләшәсәкбеҙ.**

## Тәбиғәтем менән ғалим

Тәбиғәтем, булмышым менән ғалим мин, бала саҡтан уҡ һәр нәмәне өйрәнергә тырыша, ни өсөн тегеләй, ни өсөн былай, тиғән һорауҙарҙы үҙемә йыш бирә инем. Тикшеренеүсе рухы тынғылыҡ бирмәгән инде күңелемә. Шулай булмаһа, ауыл уҡытыусыһы булып эшләп йөрөгән еремдән Мәскәүгә аспирантураға уҡырға инер инемме? Шул ваҡ-

менттарҙан торған өлөшөн артабан дауам итербеҙ, шул рәүешле был баҫманы тағы ла тулыландырырбыҙ, тибеҙ.

Тел өлкәһендә 10 томлыҡ академик һүҙлек тә абруйлы эштәрҙең береһе. Уның 6 томы бар, был айҙа 7-се томы баҫылып сығасаҡ. Бына ошондай ҙур хеҙмәттәр институттың да, шул иҫәптән халҡыбыҙҙың да бәсен күтәрә. Ҡайҙа ғына барһам да был хеҙмәттәр тураһында һөйләһәм, йәки бүләк итеп алып барһам,

Күптән һөйләй торғас, быйыл, ниһайәт, тағы ла ҙур теманы башланыҡ, ул - 7 томдан торасаҡ "Башҡорт халҡының мәҙәниәте". Әлегә мәғлүмәттәр туплана, ҡайны бер томдар яҙыла, бындай хеҙмәтте эшләргә коллективтың көсө бар.

## Үҙебеҙгә үҙебеҙ ярҙам итһәк ине…

Бер осрашыу мәлендә Республика Башлығы шәхестәребеҙҙең - Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдинов һәм башҡаларҙ-

XV Бөтөн Рәсәй ғилми конференцияһында мин презентация үткәреп, яҙыусы Мәүлит Ямалетдиновтың Ҡөрьән сүрәләренә шиғри тәржемәләре китабын һәм уны сығарыуҙа ярҙам иткән Минҙәлә һәм Ҡадурий Фазлетдиновтарҙы башҡаларға ла күрһәткем килә. Бөгөн ошондай белемдең ни тиклем ҡиммәт икәнен аңлағандар күберәк булһа, рухиәтебеҙ байыраҡ булыр ине. Беҙ рух менән йәшәгән халыҡ, беҙгә матди байлыҡҡа ҡарағанда, рух бөтөнлөгө мөһимерәк булып торған элек-электән.

## Бурысым шулдыр

Ҡайҙа ғына етәксе булып эшләһәм дә, һәр ваҡыт йөрәгем ҡушыуы буйынса башҡарҙым эшемдә. Башҡорт дәүләт педагогия институтында (хәҙерге БДПУ) эшләгәндә илдә үҙгәртеп ҡороуҙар башланып китте, студенттар менән гөрләп йөрөйбөҙ. Республиканың

Демократия йылдарында беҙҙең студенттар аслыҡ итеүселәр рәтендә булды. Барып хәлдәрен белеп йөрөүем дә бушҡа булмағандыр.

Әгәр шул йылдарҙа мин студенттар менән бергә булмаһам, деканлыҡтан алырҙар, тип, ҡайҙалыр ситтә боҫоп ултырһам, мин ул осором өсөн бөгөн оялыр инем. Ул шундай иҫ киткес ваҡыт булды, милли күтәрелеш кисереп, ҡанатланып йөрөнөк, көс тә, ваҡыт та табылды - өр-яңы факультет асып ебәрҙек. Ул асылғанда кафедра мөдире инем, уҡыу планы, программалар төҙөү эшен иплəп белмәйем дә, студенттар ҙа ваҡытты күп ала. Әммә был мәсьәләләрҙә еңеп сыҡтыҡ, шул осорҙа мин докторлыҡ диссертацияһын да яҡланым. Башҡорт-инглиз, башҡорт-немец, башҡорт-төрөк бүлектәрен астыҡ, шуның менән студенттарҙың донъяһын киңәйттек, бөгөн был белгестәр телде белгәс, сит ил

# РУХИ ДОНЪЯБЫҘ

## беҙ рух менән

ытта ирем уҡып бөтөп, Өфөлә эшкә ҡалды ла, мин ауылдан баш ҡалаға күсеп килдем. Уҡырға барып ҡайтам Мәскәүгә, кандидатлыҡ диссертацияһы яҙам. Яратып эшләйем темамды. Башҡорт теленең тарихы менән бер рәттән, башҡорт ауылдарының исемдәрен өйрәнә башланым. Унда ауылдарҙың тарихына ла ныҡлап инәһең. "Материалы по истории БАССР" тигән XVII - XVIII быуаттар документтары йыйынтыҡтарын уҡып, меңәрләгән ауылдарыбыҙҙың яндырылыуын белеп, күҙҙәргә йәштәр тығыла торғайны. Тап шул мәлдә, мин был мәғлүмәттәрҙе халыҡҡа ла еткерергә, аңлатырға кәрәк, тигән фекер нығынды.

Шуға ла әле мин үҙемдең стихиямда, тип иҫәпләйем. Бер мәҡәләне тамамлайһың, икенсеһен башларға кәрәк, хәбәр һөйләшеп ултырырға ла ваҡытым юҡ. Юбилейым уңайынан библиографик күрһәткес әҙерләгәндә шуға иғтибар иттем: Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә күскәс, китаптар, мәҡәләләр күберәк яҙылған.

Хеҙмәт юлымдың был осорондағы иң мөһим эшем тип 7 том монографиянан, 8 том документтарҙан торған "Башҡорт халҡының тарихы"н сығарыуҙы һанайым. Тарихҡа мәңгелеккә инеп ҡала торған эш булды ул. Әлеге мәлдә коллективтың өстән бер өлөшө архивтарҙа эҙләнә. Гранттар, гәҙиттә, йыл аҙағында килә лә, хеҙмәткәрҙәр Мәскәүгә, Санкт-Петербургҡа, Ҡаҙанға, Силәбегә һәм башҡа урындарға командировкаға сығып китә. Шул рәүешле өр-яңы материалдар туплана. "Башҡорт халҡының тарихы"ның доку-

бөтә халыҡ хайран ҡала. Нисек һеҙ шундай монументаль әйберҙәр баҫтыра алаһығыҙ, тип аптырайҙар. Әлбиттә, заманы шундай, беҙҙә бер ерҙә лә ҡолас йәйеп көтөп тормайҙар. Ҡайҙа һоранып, ҡайҙалыр аңлатып, талап итеп матди саралар табырға тура килә. Етәксе урындарға йәштәр килде, мин уларға инеп, китап баҫтырайыҡ әле, тиһәм, миңә бөгөнгө көнгә үткән быуаттан килеп эләккән кешегә ҡараған кеүек сәйерһенеп ҡараусылар ҙа бар. Йәки был нимәгә ул, тиҙәр. Уларға был баҫмаларҙың әһәмиәтен аңлатам. Автор

ың иҫке төркисәнән башҡортсаға һәм урыҫсаға тәржемә ителгән ҡулъяҙмаларын китап итеп баҫтырып сығарыу тураһында һүҙ ҡуҙғатҡайны. Беҙ уның планын тулыһынса төҙөгәнбеҙ, сама менән 20 том килеп сығырға тейеш. Орхон-Йәнәсәй яҙмаларынан башлау дөрөҫ булыр, сөнки улар уҡығанда аңлашылып ҡына тора, шуға ла уны телебеҙҙең дә, әҙәбиәтебеҙҙең дә сығанағы тип һанарға кәрәк. Хөкүмәт китап сығарыу өсөн матди сығымды ҡапларға әҙер, тик уны әҙерләү өсөн дә аҡса кәрәк, сөнки текстарҙың копияһын

үҙаллылығы өсөн митингыларға сығабыҙ. Улар менән бергә мин дә йөрөйөм, сөнки, беренсенән, күңелем ҡуша, халҡыбыҙҙың тарихын уҡып, гел үҙаллылыҡ, аҫабалыҡ, ирек өсөн көрәшкән ата-бабаларыбыҙҙың рухы күңелемә күскәйне. Икенсенән, декан булараҡ, балалар артығын ҡыланмаһын өсөн дә, кәрәк саҡта уларҙа яҡлай алыу өсөн дә, һис юғы, етәкселәр саҡырып, студенттарығыҙ ҡайҙа, тип һорағында, эйе, улар митингыла

***Бер осрашыу мәлендә Республика Башлығы шәхестәребеҙҙең - Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдинов һәм башҡаларҙың иҫке төркисәнән башҡортсаға һәм урыҫсаға тәржемә ителгән ҡулъяҙмаларын китап итеп баҫтырып сығарыу тураһында һүҙ ҡуҙғатҡайны. Беҙ уның планын тулыһынса төҙөгәнбеҙ, сама менән 20 том килеп сығырға тейеш. Орхон-Йәнәсәй яҙмаларынан башлау дөрөҫ булыр, сөнки улар уҡығанда аңлашылып ҡына тора, шуға ла уны телебеҙҙең дә, әҙәбиәтебеҙҙең дә сығанағы тип һанарға кәрәк. Хөкүмәт китап сығарыу өсөн матди сығымды ҡапларға әҙер, тик уны әҙерләү өсөн дә аҡса кәрәк, сөнки текстарҙың копияһын заманса итеп эшләү ҙа байтаҡҡа төшә. Был йәһәттән эш башланған, тик әлегә тулыһынса уға тотоноп китә алмай торабыҙ.***

булараҡ, китабым сыҡҡанда бала тапҡан ҡатын кеүек ҡыуанһам, институтта ла ниндәйҙер ҙур эш эшләһәк, йәки берәй конференция үткәрһәк, шундай уҡ ҡәнәғәтлек тойғолары кисерәм. Яңы ғына үткән көнсығышты өйрәнеүселәр съезын үткәреү өсөн дә башта аҡса юҡ ине, тик кәрәкле урындарға мөрәжәғәт итә торғас табылды, рәхмәт аңлағандары өсөн. Беҙҙең генә түгел, республикабыҙҙың йөҙө ҡыҙармаҫлыҡ итеп үткәрҙек.

заманса итеп эшләү ҙа байтаҡҡа төшә. Был йәһәттән эш башланған, тик әлегә тулыһынса уға тотоноп китә алмай торабыҙ.

Мин быларҙы зарланғандан әйтмәйем, сәйәсәт, иҡтисад милли рух тирмәненә һыу ҡоя һалып бармай, быныһы аңлашыла. Бәлки, хәлле милләттәштәребеҙ ярҙам күрһәтә, һоранып та йөрөмәҫ инек. IV Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы сиктәрендә уҙасаҡ "Рәсәй халыҡтары телдәре диалектологияһының актуаль проблемалары" тип аталған

булды, тип әйтә алыр өсөн дә кәрәк ине был. Республикам, тип янып йөрөгән саҡта уларҙың милли үҙаны үҫте, был ваҡиғалар студенттар өсөн дә һәйбәт булды, мин дә уларға яҡынланым. Туғаным, балаларым кеүек яҡын күргәс, минең тойғоларым уларға ла күсте. Шуға бөгөн элекке студенттарымдың мине ихтирам итеүе миңә дәрт өҫтәй. Төрөктәр уҡыны беҙҙә, уларҙы ла ҡаты тота торғайным. Әммә бөгөн Төркиәгә килгәнемде берәүһе генә белеп ҡалһа ла, бөтәһе лә шылтырата башлай.

фирмаларында эшләй, сит илдәргә йөрөй.

Улдарымды ла ылыҡтырҙым бындағы тормошҡа. 9-сы класта уҡыйҙар ине, улар урам балаһы булмаһын, насар ғәҙәттәргә өйрәнмәһен, аҙып китмәһен өсөн нимәләр эшләргә тейеш инем бит. Икегеҙҙе бер ставкаға лаборант итеп алам, эш хаҡы түләйем, тиғән булдым. Ҡулдарына сүкеш тотторған булам, йәнәһе, эш эшләйҙәр. Бик булмаһа, был беҙгә бик кәрәк, тип, текстарҙы күсереп яҙҙырам. Ай тамамланғас, секретарь ҡыҙға аҡса бирәм дә, ул ведомость төҙөп тороп, тегеләргә эш хаҡы "түләй". Башҡорт кластарында уҡыһалар ҙа, пединститутка килеп йөрөүҙәре файҙаға булды, йәштәр менән аралаштылар. Әсәй булараҡ, улдарымды юғалтмаҫ өсөн дә быларҙы уйлап тапҡанмындыр инде. Көнө буйы эштәмен, баламды тәрбиәләргә ваҡытым юҡ, тиғән һәр ҡатын-ҡыҙға ошолай нимәләр эшләргә кәңәш бирәм бөгөн дә.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында йәштәргә ярҙам итергә тырышам. Уларға үҙҙәрен күрһәтергә кәрәк, конкурстарҙа ҡатнашыуҙы сикләмәйем, унан һуң, гранттар алыу бик маҡтала бөгөнгө көндә. Мәҫәләң, быйыл республика буйынса гуманитар өлкәлә 20-нән ашыу грант отолған икән, уның яртыһынан күбе беҙҙең институт хеҙмәткәрҙәренеке. Һәр хәлдә, эшләү өсөн шарттар булдырырға тырышам. Яңыраҡ 132 фатирлы йорт тапшырҙыҡ, унан күп кенә фатир алдыҡ. Беҙҙең халыҡ эскерһеҙ бит ул, күңеле кителеп бара. Әрләүҙе лә, үҙенә

✓ ***Ул "Башҡорттар китте һуғышҡа" тип үҙенсә йырлап, башҡортса һөйләшеп йөрөй икән, ата-әсәһенә лә, миңә лә рәхәт. Үҙ теленең мөхитендә үҫкәндән бер нәмәһе лә кәмемәй уның.***



файҙаһы булһа, ҡабул итә башҡорт кешеһе, ә зитыңа тейеп бушҡа әрләһәләр, уны беҙҙең халыҡ ҡыйын кисерә. Башлыса башҡорттарҙан торған коллектив менән идара иткәндә быларҙы ла иҫәпкә алып эшләргә тырышам. Әлеге мәлдә институтты үҙенә күрә яңынан ойоштороу бара, был мәсьәләләргә улар ҡыҫылмай ҙа, аңларға ла маташмайҙар. Миңә ышаналар. Етәксе булараҡ, икмәк табыу сысынында ла минең бурысым.

## Тәүәккәллек тә кәрәк ине

Минең холҡомдоң ыңғай яғы шунда - мин тәүәккәл кеше. Студенттар менән күңелле генә итеп эшләп йөрөгән еремдән мәғариф министры итеп ҡуйғастар, был сифатым бигерәк ярап ҡалды. Заманы ла шулай ине, әлбиттә, был минең бәхетем, тип һанайым, бөгөн ул осорҙа эшләнгән эш-

## Тел халыҡты һаҡлай

Телсе ғалим булараҡ, башҡорт теленең бөгөнгө хәле мине бер аҙ борсоуға һала. Халыҡтың теле йәшәһен өсөн биш шарт кәрәк. Башҡорт теле өсөн был шарттарҙың барыһы ла бар. Йәғни, уның дәүләт статусы теркәлгән, был телдә һөйләшкән кешеләр һаны ла ярайһы ғына, телебеҙ фәнни яҡтан өйрәнелгән, һүҙлектәр, дәреслектәр, башҡорт мәктәптәре - барыһы ла бар. Шул уҡ ваҡытта, ЮНЕСКО телебеҙҙе хәүеф янаған тел, тип билдәләй. Ысынлап та, урамда ата-әсәнең балаһы менән урыҫ телендә һөйләшеүен күреп йөрөйбөҙ, телмәребеҙгә сит һүҙҙәрҙе күп ҡушабыҙ, шунлыҡтан уның функцияһы йәйлап кәмей һәм бында үҙебеҙҙең дә ғәйеп бар. Мәктәптә балаһының туған телен өйрәнеүен теләмәгән атай менән

Шуға, ҡайһы саҡта етәкселәрҙең дә был мәсьәләлә ҡаты тороуы шарт.

Минең балам башҡорт телен белә икән, ул донъя өсөн дә ҡыҙыҡлы кеше була бит. Яңыраҡ: "Башҡорт телен үҙ аллы өйрәнеү өсөн материалдар ебәрегеҙ әле", - тип, Америкала йәшәгән, туған телен бөтөнләй белмәгән башҡорт ҡыҙы хат яҙған миңә. Америкала Рәсәйҙе белеүселәр күп, урыҫ телендә һөйләшеп, кешене аптыратып булмай. Башҡорт икәнен белеп ҡалғастар, башҡортса берәй һүҙ әйт әле, тиҙәр икән ҡыҙға. Баланың башҡортса белеүе инглиз, урыҫ телен өйрәнеүгә һис ҡамасауламай. Киреһенсә, ул телдәрҙе сағыштыра, тимәк, донъяға ҡарашы киңәйә. Шул уҡ ваҡытта, 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы һөҙөмтәләре буйынса, бөгөн Башҡортостанда 20 меңдән ашыу урыҫ, 130 меңдән ашыу татар, 6 меңдән ашыу сыуаш

Килдейәр бармы?" - тип һорайым юрамал. "Бар, бар", - тип яуаплай. Ул "Башҡорттар китте һуғышҡа" тип үҙенсә йырлап, башҡортса һөйләшеп йөрөй икән, ата-әсәһенә лә, миңә лә рәхәт. Үҙ теленең мөхитендә үҫкәндән бер нәмәһе лә кәмемәй уның. Һәр башҡорт атайы, әсәйе балаларынан быны талап итергә тейеш. Әлбиттә, беҙ хөкүмәткә һалым түләйбеҙ, ошо аҡсаға үҙемдең милли ихтыяждарымды ҡәнәғәтләндереүҙе - туған телемдә һөйләшеү өсөн шарттар булдырыуҙы, башҡорт класын, телевидениеһын, китап, гәзит-журналдарҙы талап итә алам. Беҙ был хоҡуҡтарыбыҙҙы ла белергә тейешбеҙ. Шулай ҙа өйҙә нимәне өҫтөн ҡуйһың, ул баланың аңына һеңеп үҫә. Башҡорт балаларының үҙ-ара башҡортса һөйләшеүе, үҙен башҡорт тип таныуы мөһим.

ханаға, йәй диңгеҙгә бергәләп барабыҙ. Һөйөү тойғолары тураһында ла һөйләшәбеҙ, ниндәй ҡыҙҙар оҡшай, нимәһе менән оҡшай - быларҙы улар минән йәшермәй. Кисен әкиәттәр һөйләшәбеҙ, мин традицион халыҡ әкиәттәре һөйләһәм, улар миңә заманса йәнһүрәттәрҙе башҡортсаға тәржемә итә. Йәғни, төп маҡсатым уларҙы башҡортса уйларға өйрәтеү, һөйләтеү. Ике туғандарҙың үҙ-ара аралашыуы, дуҫ булыуы ла яҡшы. Уларға бит аҙаҡтан да аралашып йәшәүе күңеллерәк буласаҡ, туғанлыҡ хистәрен дә тәрбиәләй белергә кәрәктер.

Һәр йәштең үҙенең үҙенсәлектәре бар, әммә мин йәш саҡтағы энергиямды юғалттым, тип әйтә алмайым. Әлбиттә, ҡайһы бер сифаттар кире ҡайтмай, йәшлек менән китә. Мәҫәлән, бер мәл ике баламды балалар баҡсаһынан алып, эштән ҡайтып инһәм, йәшәгән йортомдо һүтеп ташлағандар. Фатир хужаһы әбейгә тиҙерәк яңы йортло булғыһы килә, унда минең ҡайғым юҡ. Айырым торған верандаһы бар ине, август айында шунда йоҡлап йөрөнөк. Сентябрҙә ямғырҙар башланды. Бөгөн мин шул ауырлыҡҡа түҙмәй, йөрөгөм шартлаған булыр ине. Ул ваҡытта йәшлек менән, киләсәккә яҡты хыялдар менән ошо ваҡиғаны ла үткәреп ебәрә алғанмын. Шул өйһөҙ йөрөгән мәлдә кандидатлыҡ диссертацияһын яҡланым әле мин. Шулай, һәр осорҙоң ауырлығы ла, еңеллеге лә була. Юлымда гел яҡшы кешеләр осраны, улар кешелекле ине, эшләһәм, эшемде лә күрҙеләр. Йәштәргә лә гел әйтәм, кешегә нимәләр күрһәтәм, тип эшләмәгеҙ, әммә эшләһәгеҙ, ул үҙе күренә. Пединститутта тәүлегенә 24 сәғәт эшләмәһәм, министр итеп ҡуймаҫтар ине, был институтҡа ла башта директор урынбаҫары булып килдем, директор булып түгел. Былтыр көтмәгәндә Халыҡтар дуҫлығы ордены менән бүләкләнеләр. Ғалим булараҡ, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән исемем булғас, еткән тип уйлай инем. Наградә өсөн эшләмәйем, тик эшемде күрһәләр, бала кеүек мин дә ҡыуанам.

# МӨҺИМЕРӘК...

## йәшәгән халыҡ



тәрҙе һәр кем, бәлки, мин үҙем дә эшләй алмаҫ инем. Ошо осорҙа республикала 20-нән артыҡ интернат тибындағы һәм муниципаль башҡорт гимназиялары, лицейҙары асылды. Республика ҡарамағындағы белем усаҡтары ла беҙҙең өсөн бик кәрәк ине, беренсенән, төпкөл ауылдан килгән башҡорт балаһы ҡала шарттарында уҡып, сит телдәр, компьютер технологияларын үҙләштереп, вуҙдарға уҡырға инде. Дөрөҫөн әйткәндә, шул рәүешле башҡорт телендә яҡшы һөйләшкән элита формалашты. Күмертауҙағы политехник лицейҙы аҫҡан мәлдә булған бер ваҡиғаны һаман онотмайым. "Халҡыбыҙға яҡшы яҙыусылар, уҡытыусылар менән бер рәттән, завод директорҙары, төп инженерҙар кәрәк, был уҡыу йортон шуның өсөн асабыҙ", тип ялҡынлы сығыш яһаным. Шунан балалар янынан үтеп барғанда күҙе бызлап ҡына торған бер бәләкәй малай янында туҡтап: "Шунан, улым, киләсәктә кем буласаҡһың", - тип һорайым. "Завод директоры", - тигән була теге. Тимәк, 6-сы класс балаһының аңына һалынғас был һүҙҙәр, насар эш эшләнмәгән, тип уйлайым. Иҡтисад лицейын тамамлағандар, мәҫәлән аҙаҡтан иҡтисадсы булып китте, үҙенә күрә иҡтисадсылар ҡатламы барлыҡҡа килде. Башҡорт гимназиялары өсөн биналар мәсьәләһен хәл итеүҙәрҙе, уның өсөн Мәскәү юлын тапауҙарҙы, шулай ҙа күберәк үҙендәң тәүәккәллегенә таянырға тура килгәнен бөгөн генә хәтерләүе еңел.

әсәй үҙ ҡулдары менән теленә ҡабер ҡаҙа.

Халыҡты бар итеүҙә телдең мөһимлеген аңларға кәрәк. Беҙ телебеҙҙе һаҡлаһаҡ, миллләтебеҙ үҙенән-үҙе һаҡланасаҡ. Һаҡламаһаҡ, себерҙәң бәләкәй халыҡтарының яҙмышы көтә. Һәр кем халҡы өсөн яуаплы булыуын белһә икән. Һәр кем үҙе бөгөн телен, халҡын һаҡлауҙы бурыс итеп алырға тейеш, быһың өсөн балалар баҡсаһында, мәктәптәрҙә башҡорт төркөмдәрен, кластарын һаҡлау кәрәк. БДПУ-

***Телсе ғалим булараҡ, башҡорт теленең бөгөнгө хәле мине бер аҙ борсоуға һала. Халыҡтың теле йәшәһен өсөн биш шарт кәрәк. Башҡорт теле өсөн был шарттарҙың барыһы ла бар. Йәғни, уның дәүләт статусы теркәлгән, был телдә һөйләшкән кешеләр һаны ла ярайһы ғына, телебеҙ фәнни яҡтан өйрәнелгән, һүҙлектәр, дәреслектәр, башҡорт мәктәптәре - барыһы ла бар. Шул уҡ ваҡытта, ЮНЕСКО телебеҙҙе хәүеф янаған тел, тип билдәләй. Ысынлап та, урамда ата-әсәнең балаһы менән урыҫ телендә һөйләшеүен күреп йөрөйбөҙ, телмәребеҙгә сит һүҙҙәрҙе күп ҡушабыҙ, шунлыҡтан уның функцияһы йәйлап кәмей һәм бында үҙебеҙҙең дә ғәйеп бар. Мәктәптә балаһының туған телен өйрәнеүен теләмәгән атай менән әсәй үҙ ҡулдары менән теленә ҡабер ҡаҙа. Халыҡты бар итеүҙә телдең мөһимлеген аңларға кәрәк. Беҙ телебеҙҙе һаҡлаһаҡ, милләтебеҙ үҙенән-үҙе һаҡланасаҡ.***

ның башҡорт филологияһы факультеты деканы булғанда, 1992 йылда әле закон ҡабул ителмәгән ваҡытта, үҙебеҙ өсөн факультетта башҡорт теле - дәүләт теле, тип иғлан иткәйнек. Мәғариф министры булып килгәс милли мәғариф өҫтөнлөклө йүнәлеш, тип, мәктәптәрҙә төбәк компоненттын үҙебеҙ һайлау хоҡуғын файҙаланып, башҡорт телен уҡытырға тигән хаттар ебәрҙек. Ул ваҡытта ла шауланылар, ҡаршылар булды, әммә төп масса барыбер ҡабул итте.

һ.б башҡорт телен туған теле тип һанай. Йәғни, милләттәр башҡорт телен белә, был ыңғай күренеш. Был ситуацияла башҡорт балаһы башҡорт телен белмәүе аяныс.

Балаң менән бәләкәйҙән туған телендә һөйләш, шул да етә. Мәҫәлән, минең иң бәләкәй ейәнемә 2 йәш тулмаған. Миңә килеп, ишеккә шылтыратһалар: "Кем?" - тип һорайым. "Беҙ", - ти ағаһы. Шул бәләкәй бала ла ағаһына эйәреп: "Беҙ, беҙ!" - тип ҡысҡыра. "Ә

## Ейәндәрем менән дуҫмын

Минең өс ейәнем бар, беренһенә - 11, икенсеһенә - 9, өсөнсөһөнә 2 йәш тә тулмаған әле. Ике ҙуры аҙна һайын ял көндәре миңә килә, йома иртән шылтыратып, был турала әйтеп ҡуялар. Беҙ улар менән ҡайҙа ғына бармайбыҙ. Кафеларға ла, магазиндарға ла инеп сығабыҙ. Аҙаҡтан ошондай урындарға ылығып китмәһендәр, күреп үҫһендәр өсөн эшләйем быны. Ҡыш шифа-

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Төрөктәр менән эшләгәндә уларҙың бөтөн проблемалары менән миңә килеүенә асылаһып киткәйнем бер мәл. Апай, ул һеҙгә вазифа, ти был миңә. Вазифа һүҙенең икенсе мәғәнәһен уйлапмай, төбөнә төшмәй генә, вазифа өсөн йөрөй тиһеңме әллә, тип тағы көйәм. Юҡ, апай, ул мәғәнәлә әйтмәйем, был Хоҙай Тәғәләнең һеҙгә биргән вазифаһы, ти. Ахыры, ҡуктәр тарафынан бирелгән вазифам шулдыр", - тигәйне һөйләшеп ултырғанда Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы. Ошо бер генә һүҙ уның йәшәү мәғәнәһен аса ла ҡуя - Хоҙай уға үҙенең халҡының рухын күтәреп, уның данын бөтөн донъяға таратыуҙы, ахыры, вазифа итеп һалған.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

***✓ Ләкин мәктәптәребеҙҙең ауыр хәле, күп урында туған телде һәм әҙәбиәтте уҡытыуҙың юҡҡа сыға барыуы рухи ресурстарыбыҙҙы нығ ярлыландырмаҫмы, әҙәбиәткә килеүселәр киләсәктә һирәгәймәҫме?***



*ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ*

# ВАҠЫТЫМА ХӘҘЕР ҮҘЕМ ХУЖА...



**Был юлы әҙиптәребеҙгә төбәй торған традицион өс һорауыбыҙҙы Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхвәт улы Бикбаевҡа юлланыҡ. Һүҙ - ил ағаһына.**

**➔ Совет осоронда әҙәбиәт йәшәйештең идеологияһын билдәләй ине. Хәҙер әҙәбиәткә милләттән айырылыу ҡурҡынысы янамаймы? Ни өсөн тигәндә, милли интеллигенцияның ҡайһы бер вәкилдәре хатта билдәле яҙыусыларҙың да яңы әҫәрҙәрен уҡып бармай...**

- Беҙ үҫкән ваҡытта әҙәбиәттең халыҡ араһындағы абруйы айырыуса ҙур булды. Күп кенә әҙиптәр тере көйө легендаға әйләнгәйне. Берәй шағирҙың йәки яҙыусының берәй ауылға осрашыуға килеүе бик һирәк була торған ваҡиғаға әйләнә торғайны. Ул замандарҙа телевидение юҡ, радио ла күп ерҙәргә барып етмәгән. Донъя менән берҙән-бер бәйләнеш, төп рухи көс - матбуғат, китап. Һәр яңы әҫәрҙе тиерлек кешеләр ябырылып уҡый, китап йәки журнал ҡулдан-ҡулға йөрөй, китапханаларҙа үҙенсә сират була торғайны. Хәҙерге йәштәргә был хәлдәрҙе күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Берәй яңы әҫәр буйынса уҡыусылар конференциялары үткәреү, уларҙағы фекер алышыуҙар, талаптар ҡуйыу, һорауҙар биреү - былар барыһы ла, моғайын, тарихта ғына тороп ҡалғандыр.

Әлбиттә, совет осоронда әҙәбиәт йәшәйештең идеологияһын билдәләй ине. Әммә уның коммунистик идеология булғанлығын да онотторға ярамай. Халыҡтың тарихи яҙмышындағы бик күп үҙенсәлектәр был идеология ҡалыптарына һыйып бөтмәй торғайны. Күп ваҡиғалар һәм шәхестәр тураһында яҙыу бөтөнләй тыйылды, уҙғандағы ижтимағи үҫеш һәм яңы заман тик синфи күҙлектән сығып баһаланды. Бындай сикләүҙәр әҙәбиәттең халыҡ тормошо менән бәйләнешен тарайтмай ҡалманы.

Элеккесә барыһына ла тиҙ генә ышанып барыусы, әҙип һүҙен изгеләштереүсе ябай уҡыусылар күптән юҡ. Халыҡ заман менән бергә тиҙ һәм нығ үҙгәрҙе. Белем кимәле һәм эстетик зауыҡтар, әҙәбиәткә, мәҙәниәткә талаптар хәҙер бөтөнләй башҡаса.

**Бөгөнгө башҡорт уҡыусыларының, әҙәбиәт һөйөүселәрҙең иң нығ алға киткәндәре, хәҙерге рус һүҙе менән әйткәндә, иң "продвинутыйҙары" донъя әҙәбиәтендәге яңылыҡтарҙы туған телебеҙгә, хатта руссаға тәржемәләр аша ғына түгел, сит телдәр, бигерәк тә инглиз теле аша туранан-тура уҡый ала. Бәғзе яҙыусыларыбыҙ бындай йәштәрҙең белем кимәле менән, ҡараштар киңлеге менән сағыштырғанда, күпкә ҡалыша. Уларҙың яҙғандары бындай йәштәргә ҡыҙыҡ түгел. Әҙәбиәт уҡыусыны яңы юғарылыҡҡа күтәрергә, алға әйҙәргә тейеш. Ә беҙҙең ҡайһы бер авторҙарыбыҙ үҙҙәре уҡыусыларҙан артта ҡалған. Шулай булғас, матбуғатҡа яҙылыусыларҙың, китап алыусыларҙың һаны нисек кәмемәһен? Әҙәбиәт милләттән айырылырға теләмәһә лә, милләттең бер өлөшө милли әҙәбиәттән ситләшә бара.**

Әҙәбиәттең тормош менән бәйләнеше тураһында һүҙ сыҡҡас, донъяла иң алдынғы һаналған совет мәғариф системаһының емерелеүе, уҡытыу эшендәге ҙур юғалтыуҙар, ил кимәлендә алып барылған кире үҙгәрештәр тураһында ла әйтергә кәрәк. Шуларҙың иң ҡурҡыныстарының береһе - туған телгә һәм әҙәбиәткә мөнәсәбәт. Уларҙы өйрәнер дәрестәр бөтөр сиккә етеп ҡыҫҡартыла, милли мәктәптәр юҡҡа сыға. Башҡорттар йәшәгән күрше өлкәләрҙә улар бөтөнләй ҡалманы тиерлек.

1989 йылда "Халҡыма хат" исемле поэмамда "Телле көйө телһеҙ башҡорттар бар" тип яҙғайным. Унан һуң сирек быуат үтте, шул арала телһеҙ башҡорттарҙың һаны бик нығ артты. Милли рух тәрбиәләрлек халыҡсан ерлек тарайғандан-тарая. Шундай шарттарҙа милләттең бер өлөшө нисек милли әҙәбиәттән ситләшмәһен? Һорауҙа "Милли интеллигенцияның ҡайһы бер вәкилдәре билдәле яҙыусыларҙың яңы әҫәрҙәрен уҡып та бармай", тигән һүҙҙәр бар. Милли зыялыларыбыҙҙың барыһы тураһында әйтмәйем. Әммә уларҙың эсендә, бигерәк тә йәштәр араһында, милли мәктәптәрҙе бөтөргәндәре лә байтаҡ бит. Башҡорт яҙыусыларының яңы әҫәрҙәрен, бәлки, уҡырҙар ҙа ине, башҡортса уҡый белмәйҙәр бит. Шуныһы айырыуса аяныслы.

**➔ Заман ниндәй генә булмаһын, әҙәби процесс дауам итә. Хәҙерге замандың әҙәби йүнәлештәрен билдәләгәндә, нимәгә иғтибарҙы йүнәлтергә булыр ине? Хәҙерге әҙәбиәткә ҡарап, уның киләсәген билдәләп буламы?**

- Ысынлап та, әҙәби процесс һәр осорҙа ла дауам итә. Хатта ҙур-ҙур юғалтыуҙарға дусар булғанда ла, яңы тәжрибә туплана. Юғалтыуҙар ҙа, хаталар ҙа үҙҙәренсә һабаҡ бирә, мираҫты ҡәҙерләргә, көстәрҙе нығыраҡ тупларға өйрәтә бит. Милләттең ижад потенциалы һаҡланған икән, тимәк, әҙәби процесс туҡтамаясаҡ, яңы көстәр барыбер үҙенә юл ярасаҡ.

Әҙәбиәтебеҙ донъяһында бөгөн төрлө стиль-формаларҙың, төрлө йүнәлештәрҙең үҫешен күрәм. Ирекле шиғыр элек беҙгә бик үк хас булмаһа, хәҙер уның да ҡаҙаныштары бар, традициялары нығынып килә. Төрлө жанрҙа фәлсәфилек, символика, кинәйә, шартлылыҡ мөһим сифаттарға әйләнде. Проза һәм драматургияла әҫәрҙәр нығ ҡыҫылды, күләм ҡыҫҡарҙы. Эпопеялар заманы үтеп бара һымаҡ. Әлбиттә, улар ҙа булһын, әммә заманыбыҙҙың етеҙ ритмы әҙәбиәттә лә ҡыҫҡалыҡты талап итә.

Йәш һәләтле шағирҙарҙың килеүе ҡыуандыра. Башҡа тармаҡтарҙа - прозала , драматургияла ла яңы исемдәр юҡ түгел, әммә хәлдәр барыбер хәүефлерәк. Тәнҡиттең юҡлығына инде нисәмә йылдар зарланабыҙ, ләкин ғәҙел баһалаусылар, талапсан байҡауҙар һаман да юҡ. Күпселек яҙыусылар кәмендә классик дәрәжәһенә дәғүә итә. Ҡәләмдәштәр яңы әҫәрҙәрҙең ниндәй сифатта булғанлығын яҡшы белһә лә, байтаҡ уҡыусыларҙың насар менән һәйбәтте айырырлыҡ тәжрибәһе етмәй. Шуға бигерәк тә йәштәрҙең эстетик зауыҡтары боҙола.

Әҙәби процесты өҫтә ҡайнаған күбек йәки төрлөсә һүҙ көрәштереүҙәр түгел, тәрәндәге ағым билдәләй. Әҙәби үҫештә ижадсы һөйләгән һүҙе менән генә түгел, иң мөһиме, яҙған әҫәре менән ҡатнаша. Быйылғы төрлө шау-шыулы сараларҙың да әҙәби мөхиткә, бәлки, үҙенсә йоғонтоһо булыр. Ләкин ижадтың асылы өсөн тышҡы ағыш түгел, эске һағыш, моңло фекер мөһим. Һуңғы ваҡыта шау-шыулы эффект менән мауығыу, һан артынан ҡыуыу, төрлө ығы-зығыны ысын ижади процесс итеп күрһәтергә тырышыу көсәйҙе. Яҙыусылар союзында сафтар оҙайыр, әммә тығыҙланмаҫ, нығынмаҫ. Киләсәктәге үҫешкә өмөт-ышаныс ҡалмаҫ.

Әҙәбиәттең үҫеше өсөн әҙәби бәйләнештәрҙең ни тиклем әһәмиәтле булғанлығын быға тиклем өлгәшелгән уңыштар бик асыҡ күрһәтте. Әле лә үҙебеҙгә бикләнеп кенә йәшәмәйбеҙ. Тәржемә өлкәһендә йәнләнеү бар, әммә был эш матди яҡтан нығытылмаған. Үҙәк баҫмалар менән бәйләнештәр һуңғы ваҡытта бөтөнләй юҡ дәрәжәһендә. Бик арҙаҡлы "Литературная газета" хәҙер милли әҙәбиәтебеҙгә ҙур урын бирә. Был шатлыҡлы боролош хөрмәтле баҫманың абруйын тағы ла нығыраҡ күтәрҙе. Был үҙгәреш гәзиттә башҡорт әҙәбиәтенә урын биреүҙән башланғайны. Хәҙер беҙҙең ҡәләмдәштәр унда бөтөнләй күренмәҫ булды. Заманында башҡорт әҙәбиәте үрнәктәре ҡат-ҡат баҫылған "Наш современник", "Дружба народов" һымаҡ үҙәк журналдар менән бәйләнеште дауам итеү тураһында ла хәстәрлек күренмәй.

Киләсәгебеҙ тураһында тағы ла бер нисә һүҙ. Бөгөнгө башҡорт йәштәренә минең өмөтөм бик ҙур. Тормоштоң төрлө тармаҡтарында халҡыбыҙға хеҙмәт итеү маҡсаты менән йәшәүсе тырыш, аңлы, белемле йәштәребеҙ күбәйә. Улар араһында зирәк лидерҙар бар. Юл башлап йөрөүсе ундай шәхестәрҙең булыуы бик һәйбәт. Һүҙемде дауам итеп, шуны әйткем килә: йәш быуын милләттең лидеры, йәштәребеҙ - халҡыбыҙҙың юлбашсылары булырға тейеш. Шул саҡта ғына тормошобоҙға тарихи яңырыуҙар киләсәк. 1917 йылда Яңы Башҡортостан өсөн көрәште хәтерләйек. Зәки Вәлиди үҙе генә түгел, уның күпме арҡадаштары, тотош ҡатлам милләтебеҙҙең йәш юлбашсылары булған бит.

**Бөгөнгө йәш ижади көстәргә лә шундай өмөт-ышаныс менән ҡарайым. Телебеҙҙең киләсәген яңы әҫәрҙәребеҙҙең, тотош әҙәбиәтебеҙҙең сифаты билдәләйәсәк. Ләкин мәктәптәребеҙҙең ауыр хәле, күп урында туған телде һәм әҙәбиәтте уҡытыуҙың юҡҡа сыға барыуы рухи ресурстарыбыҙҙы нығ ярлыландырмаҫмы, әҙәбиәткә килеүселәр киләсәктә һирәгәймәҫме?**
**Былай хафаланыуҙың сәбәптәре бик етди һәм ул айырыуса башҡорт мәктәптәренең иртәгәһе яҙмышына бәйләнгән. Заманында башҡорттоң рухи донъяһына Ырымбур яҡтарынан Мөхәмәтша Буранғоловтар, Юлтыйҙар, Амантайҙар, Агиштар, Ырғыҙ буйҙарынан Ниғмәтиҙәр, Һәҙиә Дәүләтшиналар, Силәбе тарафтарынан Сәләмдәр, Хәй, Даяндар, Кәтибә Кинйәбулатовалар килгән. Уларҙан һуң килеүселәр һирәгәйҙе. Ул яҡтарҙа башҡорт мәктәптәре ҡалмаһа, яңы ижади көстәр унан бөтөнләй килмәйәсәк.**

**➔ Һеҙ бер шиғырығыҙҙа: "Йән серҙәшкә ҡайсаҡ шундай асмын, Антеннаға ҡунған һандуғасмын..." - тип яҙғайнығыҙ. Әле кәйефегеҙ нисек? Үҙгәрҙеме? Һаман асмы һеҙ йән серҙәшкә?**

- Эш кәйефе менән йәшәйем, күпселек ваҡытым ижад менән үтә. Хеҙмәт кенәгәм 75 йәшемдә генә ябылһа ла, яҙыр дәфтәрҙәрем әле ябылмаған. Бына ике йыл мин бер ниндәй эш урынына йөрөмәйем, тик профессиональ яҙыусылыҡ хеҙмәте менән булам. Бындай ритмда йәшәгәнем юҡ ине. Ваҡытыма хәҙер үҙем хужа. Бындай мөмкинлек ижад өсөн бик уңайлы икән, быны мин 75 йәшемдән һуң ғына белдем. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, минең быуын ҡәләмдәштәремә бындай шарттар хаҡлы ялға сыҡҡас ҡына тыуҙы. Олораҡ быуын башҡорт әҙиптәре араһында йәшерәк саҡтан уҡ тик яҙыусылыҡ эше менән генә профессиональ рәүештә шөғөлләнгәндәр ҙә байтаҡ ине. Ә беҙгә ижадты редакциялағы йәки башҡа урындағы рәсми хеҙмәттән бушаған арала, ял

***✓ Аҙна үтеүгә, 4-5 тоҡ йөк менән ҡайтып төштө. "Хызыр ағай китаптар алып ҡайтҡан, бөтә кешегә лә уҡырға бирә икән", - тигән хәбәр йәшен тиҙлегендә бөтә ауылды урап сыҡты.***

һәм йоҡо иҫәбенә генә алып барырға тура килде. Бының бик ҡатмарлы һәм ауыр икәнлеген үҙ башынан үткәндәр генә белә. Дөрөҫ, минең тиҫтерҙә лә профессиональ яҙыусылыҡ менән йәшәгән ике-өс кеше булды булыуын. Ләкин күпселек бөтә ваҡытын ижадҡа ғына бүлеп эшләй алманы. Хәҙерге йәштәребеҙ ҙә ошондай ҡыҫынҡы шарттарҙа ижад итергә мәжбүр. Сөнки беҙҙә башҡаса мөмкинлек юҡ.

Йән серҙәш мәсьәләһенә килгәндә, ысын дуҫтарымдың, кәңәшләшер остаздарымдың күбеһе был яҡты донъяларҙан китте. Улар менән уйҙарымда ғына аралашып йәшәйем. Фекерҙәштәр һирәгәйә, ихласлыҡ кәмей, көнсөллөк арта. Шуға, әлеге шиғырҙағы "йән серҙәшкә ҡай саҡ шундай асмын" тигән һүҙҙәремде бөгөн "Йән серҙәшкә һәр саҡ шундай асмын" тип үҙгәртһәм, былай тип әйтеү хәҙерге рухи халәтемә нығыраҡ тап килер һымаҡ. Аллаға шөкөр, ҡәләмдәштәрем араһында йән серҙәштәрем бөтөнләй ҡалманы түгел, аҙ булһалар ҙа барҙар, шуға ҡыуанам.

Икенсе яҡтан уйлап ҡараһаң, ижад бит ул яңғыҙ эшләнә торған эш. Әҙәбиәт менән, яҙышыу менән булған кешенең күпселек ғүмере уйҙары менән генә ҡалып, ҡәләм-ҡағыҙ менән үтә. Ижад кешеһе яңғыҙлыҡҡа дусар ителгән. Өлкәнәйә барған һайын ваҡыт лимиты ҡыҫыла, ижади уйҙарынды тормошҡа ашырып ҡалырға өлгөрөр өсөн күберәк бер яңғыҙың эш менән генә булырға тура килә. Бындай тығыҙ ваҡыттарҙа йән серҙәштәрҙе лә һирәгерәк иҫкә төшөрәһең.

Әлбиттә, ижтимағи эштәрҙән бөтөнләй ситләшеп тә йәшәп булмай. Осрашыуҙар, халыҡ менән аралашыуҙар, төрлө йыйындарҙа фекер алышыуҙарҙа ҡатнашыуҙар шулай уҡ ижадтың үҙенсә дауамы. Быйыл ғына йәйле-көҙлө дүрт тапҡыр тыуған яҡтарымда сәфәрҙә йөрөп ҡайттым, Ырымбур башҡорттары тормошондағы ҙур-ҙур саралар уртаһында булдым.

Өс һорауҙың һәр береһе тиерлек киләсәккә төбәп бирелгән. Иртәгә нимә булыры хаҡында фараз итеү, алдағыһын күҙаллау бик яуаплы эш һәм йыш ҡына алдан әйтеүҙәр тура килмәй. Әммә шуныһын яҡшы беләм: беҙ бөгөн ниндәйбеҙ, иртәгәбеҙ ҙә шулай дауам итәсәк. Һәйбәт икәнбеҙ, алдағы көндәр ҙә һәйбәт буласаҡ. Уҙғандарҙың хаталарынан бөгөн һеңгәҙәмәйбеҙме ни? Әгәр бөгөн хаталанһаҡ, килер быуын беҙгә бик ҡаты рәнйейәсәк. Бөгөн берҙәмбеҙ икән, киләсәктә лә һаҡланасаҡбыҙ, еңәсәкбеҙ. Тарҡау икәнбеҙ, таралып, юғалып бөтәсәкбеҙ. Тыуыр көндәребеҙ тураһында ла уйланайыҡ. Ләкин киләсәгебеҙ ышаныслы булһын өсөн барыбыҙ ҙа берҙәм булайыҡ, һәр беребеҙ эштәребеҙҙе ҙур яуаплылыҡ, тырышлыҡ менән урынына еткереп башҡарайыҡ.

ӘЙҘӘ, ҺӨЙЛӘШӘЙЕК!

# КИТАП УҠЫУ - ОЛО ҺӨНӘР УЛ



**Яңы ғына баҫылған китапты ҡулыма алған һайын бала саҡтың матур бер хәтирәһе иҫкә төшә. III-IV синыфтарҙа уҡығанмындыр. Беҙҙең Ишембай районы Яңы Һәйет ауылында Хызыр тигән бабай йәшәй торғайны. Урмансы булып эшләне. Ағастан күнәктәр яһай ине. Улар бик күбәйеп китте бер заман. Ишек алды, һарай тулды. "Ниңә кәрәк икән был тиклем күнәк?" тип, ҡапҡа ярығынан ҡарап үтәбеҙ.**

Берҙән-бер көндө биҙрәләрен үткенсе машинаға тейәп, ялан яғына - Петровскийға сығып китте бабайыбыҙ. Аҙна үтеүгә, 4-5 тоҡ йөк менән ҡайтып төштө. "Хызыр ағай китаптар алып ҡайтҡан, бөтә кешегә лә уҡырға бирә икән", - тигән хәбәр йәшен тиҙлегендә бөтә ауылды урап сыҡты.

Барып инһәм... Китаптар өйөлөп ята. Ә унан килгән типография, буяу еҫе өйгә тулған. Ә түрбашта бабайыбыҙ әбейе менән ҡояштай балҡып, һәр ингән кешене әйҙүкләп ултыра. Шатлыҡ эскә һыймай. Алған ике китабымды ҡыҫып ҡосаҡлап, ҡайтып киттем. Әйтерһең, бер ҡосаҡ хазина тотторғандар. Хызыр бабай китаптарҙы шундай шарт менән бирә: бысратмаҫҡа, йыртмаҫҡа һәм уҡып бөткәс, Фәрхиямал инәй менән Хызыр бабайға йөкмәткеһен түкмәй-сәсмәй матур итеп һөйләйһең. Улар ихлас тыңлай, һорауҙар бирә, үҙ-ара бәхәсләшеп тә китәләр. "Имтихан" бөткәс, йәнә үҙең теләгән китапты уҡыу бәхетенә эйә булаһың. Хызыр бабайҙың был изге эше - күнәктәр һатып, китап алып ҡайтыуы тағы ла бер-нисә мәртәбә ҡабатланды шулай.

Хәҙер ошоларҙы күҙ алдына килтерәм дә, уйлап ҡуям: телевизор ҙа, китапхана ла булмаған төпкөлдә йәшәүсе ауылдаштарым шул китаптарҙы уҡып, күпме рухи аҙыҡ алған? Мин дә Һ. Дәүләтшина, З. Биишева, Ә. Бикчәнтәев, Н. Мусин, Р. Ғабдрахманов, Д. Бүләков, С. Агиш, И. Ғиззәтуллин, Я. Вәлиев кеүек әҙәбиәтебеҙҙең ғорурлығы булған әҙиптәребеҙҙең әҫәрҙәрен уҡып үҫтем. Улар аша дөрөҫ йәшәүгә, төрлө ауырлыҡтарҙы еңергә, тәбиғәтебеҙҙе, тыуған еребеҙҙе, телемде, халҡымды яратырға өйрәндем. Бөгөн 32 йылдан ашыу башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһымын. Күпме генә, ниндәй генә китаптар уҡыһам да, бала саҡтағы, күңелгә һеңеп ҡалған әҫәрҙәр онотолмай.

Радионан тапшырылған спектаклдәрҙең береһен дә ҡалдырмай тыңлайбыҙ. Аҙнаһына бер тапҡыр почтальон Ҡолғананан почта алып ҡайта, уның атының тауҙан төшкәнен күреп, ҡаршы йүгерәбеҙ. Уҡырға яратҡан тиҫтерҙәремдең барыһы ла уҡытыусы булып китмәне, әммә китапты яратыуҙарына, уҡыуҙарына ғүмер буйы тоғро ҡалдылар.

Заман башҡа - заң башҡа, тиһәләр ҙә, китап уҡыуға, гәзит-журналдар алдырыуға телевизорҙағы күп төрлө тапшырыуҙар, компьютер, интернет кеүек замана саралары ҡамасауламай. Дөрөҫ, хәҙер гәзит-журналдарҙы, хатта ҡайһы бер әҫәрҙәрҙе төрлө сайттарға инеп тә уҡырға мөмкин. Шулай ҙа, китаптарҙы, гәзит-журналдарҙы әйләндереп-әйләндереп, кем әйтмешләй, ҡыштырлатып уҡыуға етмәй!

Китап уҡый белгән кеше борон-борондан иң аҡыллы булып һаналған, уны ихтирам иткәндәр, кәңәш һорап барғандар. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ғайса ағай Хөсәйенов әйткәнсә: "Китап - кешенең аҡыл һәм күңел донъяһын бүҫкәртмәйенсә быуаттарҙан-быуаттарға алып килеүсе һәм киләсәккә илтеүсе уңалмаҫ хазиналар ҡаҙанышы ул". Республикабыҙҙа Әҙәбиәт йылы ҙур башланғыс, ҡаҙаныштар менән башланып китте. Иң ҡыуаныслыһы - Өфө урамдарына ҡуйылған бөйөк яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың ҡанатлы һүҙҙәре. Был реклама таҡталары тирә-яҡҡа йәм биреп тора, "Уфа"ға түгел, ә күңел Өфөгә тартыла.

Әҙиптәребеҙ береһенән-береһе бай йөкмәткеле, зауыҡ менән биҙәлгән китаптар баҫтыра, арымай-талмай ижад итә. Китапханаларҙа китаптарҙың күплегенә хайран ҡалаһың. Нәшер ителә китап, оҙаҡ та тормай, таралып та бөтә.

Мин үҙем айырыуса яҡташым, оло әҙип, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман ағай Мусиндың ижадын яратам. Һәр әҫәрен нисәшәр ҡат уҡығанмындыр. Тыуған яҡтарымды һағынып, иҫкә төшөргән һайын, урмандарым, ҡырҙарым, тауҙарым һәм шулар араһында йәшәгән ауылдаштарым тураһында яҙылған әҫәрҙәрен ҡулыма алам. Уҡыусыларымда ла китапҡа ҡарата һөйөү, ҡыҙыҡһыныу уятырға тырышам. Китап уҡыу - оло һөнәр ул.

Йыш ҡына "Хәҙерге балалар китап уҡымай", тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Ҡыҙыҡһыныуҙы тыуҙырырға кәрәк. Әҙәбиәт уҡытыусыһы шуның өсөн бит: яҙыусыларыбыҙға, уларҙың ижадына һөйөү тәрбиәләүсе, әҫәрҙәр уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятып, Ватанға, республикаға, ил азаматтарына, ололарға, тыуған тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү. Ә бының өсөн уҡытыусы үҙе күп белергә, күп уҡырға, республика баҫмаларын алдырырға тейеш. "Аманат" журналы, "Йәншишмә" гәзите ниндәй генә конкурстар ойоштормай. Һәр районда урындағы телевидение, радио, гәзит редакциялары бар. Улар менән бәйләнештә булыу, китапханаларҙа әҙәби кисәләрҙә ҡатнашыу - барыһы ла китап уҡыуға ҙур этәргес. Китапты яратырға, яраттырырға өйрәтәйек йәш быуынды. Һәм гәзит уҡыусыларға ошо турала мөрәжәғәт итәм: әйҙәгеҙ, китап, гәзит-журналдар уҡыу ғәмәлегеҙ тураһында яҙып ебәрегеҙ һеҙ ҙә. Бергәләп фекер алышайыҡ әле ошо темаға.

**Көнһылыу НАСРЕТДИНОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы.**
**Илеш районы Үрге Йәркәй ауылы.**

УЙЛЫҒА - УЙ

## Китмәһендәр!

Яҡташтарым! Ситкә ебәрмәгеҙ,
Аҡыллынан тыуған баланы!
Алйото ла кәрәк үҙебеҙгә,-
Шунһыҙ донъя ҡыҙыҡ буламы?

Ебәрмәгеҙ ситкә матурҙарҙы -
Бала тапмаһындар сит-яттан.
Балалары үҙ телдәрен белмәй -
Нисек үлмәй икән ояттан?

Егәрлеләр кәрәк үҙебеҙгә,-
Ҡырылмаһа-ҡырҡ эш ята .
Ғибрәт алыу өсөн ялҡауы ла,
Яуызы ла кәрәк бит хатта!

**Буранбай ИСҠУЖИН.**

## Яҡтылыҡ эҙләп китәйем…

Юл сатында юл һораштым,
Һуҡыр башҡорт ҡартынан.
Ҡурай тарта ине ул ҡарт -
Ҡурайсылар затынан .
"Яҡтылыҡҡа юл эҙләһәң,
Улым, күктә ҡояш, - ти,-
Үҙеңә кәрәк һуҡмаҡты
Шул ҡояштан һораш", - ти.
Ҡояш миңә яуап бирҙе,
"Ерҙә үҫә ҡурай, - ти,-
Уның моңо күңелдәрҙе
Яҡтылыҡҡа сорнай", - ти .
Бына туғай. Күпме ҡурай!
Киҫеп ал да тарт, әйҙә!
Ҡурай уйнай белмәйем шул,
Юл күрһәткән ҡарт ҡайҙа?
Ҡайҙа теге аҡһаҡал ҡарт,
Ҡурайсылар затынан?
...Яҡтылыҡ эҙләп китәйем,
Ошо ҡарттың артынан...

**Рамай ҠАҺИР.**

## Батырҙар юлы

Ғәййәр булған ата-баба -
Хатта һыймаҫлыҡ башҡа:
Танк-самолет заманында
Атта киткән һуғышҡа.

Ҡанлы яуҙар мәхшәрендә
Фрицтың биреп кәрәген,
Күрһәткән атлы башҡорттар
Ҡаһарманлыҡ үрнәген.

Етмеш һигеҙ алтын йондоҙ...
Ундай ғәскәр бүтән юҡ.
Танкыларҙы үтә тишер
Беҙҙекеләр атҡан уҡ.

Ядро һуғышы башланһа,
Йә тағы берәй нәмә -
Башҡорт Ватанын һаҡларға
Атҡа ултырмаҫ тимә.

Әгәр бер саҡ машиналар,
Терминаторҙар ҡалҡһа,
Сит планета роботтары
Килеп баҫһа йыраҡтан,

Зомби, убыр, әүермәндән
Ғазап кисерһә ил-йорт,
Хәшәрәтте ҡылыс менән
Тураҡлар атлы башҡорт.

**Морат СОЛТАН.**

## Аҡмулла арбаһы

Быуаттарҙан быуаттарға табан
Һиҫкәндереп барса халыҡты,
Аҡмулланың сал арбаһы елә
Юлдар табып хатта юл юҡта!

Эҙләмәй ул таҡыр урындарҙы,
Юғарылыҡ - уның маҡсаты!
Һынау түгел шыҡһыҙ ҡаялар ҙа,
Һынау түгел уға юл саты.

Ах, был халҡы заман толпарына
Һалып өлгөргәнме йүгәнде?
Наҙанлыҡ - ул атһыҙ ҡалыуға тиң!
Әйттеңме һин, милләт, тәүбәнде?

Аҡмулланың сал арбаһы елә,
Байраҡ булып балҡый иманы.
Тик ғәҙеллек ерҙә еңһен тиеп,
Ерҙә йәшәгән ул инанып.

Китап тейәгән ул арбаһына,
Тейәлгәндәр унда шағирҙар.
Сәмде уятыусы ул маһирҙар
Шиғыр менән йәнгә шаҡырҙар.

Милләтенә тура ҡарап һөйләй,
Арбаһына әҙер алырға!
Эй, хаҡ мулла, һиндәй булыр өсөн
Йәнгә ниндәй тойғо һалырға?

Арбаһына мулла алмаһа ла,
Һәр башҡорттоң булһын арбаһы!
Аҡмулланың һүҙе иман булһын,
Аҡмулланың һүҙе арбаһын!

**Лариса АБДУЛЛИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ОПТИМИСТАР...
## оҙон ғүмерле була

■ Бер төркөм Америка ғалимдары 15 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр үткәреп, тормошҡа ыңғай ҡараштa булыу ғүмерҙе оҙайтыуын асыҡлаған. Кем йышыраҡ йылмая, уларҙың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ныҡыраҡ була икән. Тикшеренеүҙәрҙә 45-84 йәштәге 5100 кеше ҡатнашҡан. Тән массаһы индексы, ҡандағы холестерин һәм глюкоза кимәле, артериаль ҡан баҫымы кеүек факторҙары менән бер рәттән, уларҙың оптимист йәки пессимист булыуына ла иғтибар иткәндәр. Асыҡлауынса, оптимистарҙың сәләмәтлегe күпкә яҡшыраҡ икән.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан йяйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һеҙәмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйыҡайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыяллана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының үҙәклеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Йәйләп ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә ятраҡан кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, уның үҙәк нервы системаһы ла ныҡ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, арауыҡты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә ялан аяҡ йөрөү файҙалы, ул организмды ныҡыта.

■ Америка ғалимдары кешенең киләсәк портретын төҙөп ҡараған. Вашингтон университеты хеҙмәткәрҙәре - тикшеренеүсе һәм рәссам Николай Ламм менән генетик Алан Кван 100 мең йылдан һуң йәшәйәсәк кешеләрҙе һүрәтләргә тырышҡан. Уларҙың күҙаллауы буйынса, эволюция, ген инженерияһы һәм космосты үҙләштереү кешенең тышҡы ҡиәфәтен нигеҙҙән үҙгәртәсәк. Тикшеренеүселәр фекеренсә, эволюция һөҙөмтәһендә баш меңйеһе ҙураясаҡ, һөҙөмтәлә, маңлай ҙа киңәйәсәк. Бөгөнгө көн өсөн нормаға әүерелгән ген инженерияһы киләсәктә кешенең ҡиәфәтен үҙгәртеүҙә үҙ ролен уйнаясаҡ. Мәҫәлән, атаәсәләр үҙҙәренең балаларының "генетик составы"н, шул иҫәптән, күҙҙәр, сәс төҫөн һайлай аласаҡ. Дөйөм алғанда, кешенең тышҡы йөҙө уның ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүе менән бәйле буласаҡ. Тикшеренеүселәр фаразлауынса, йөҙҙәр артыҡ симметрик һәм бер-береһенә оҡшаш була барасаҡ.

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ
## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 8-се һабаҡ: "Ете сәбәп"

Бер кеше өс көн буйы эшенә бармаған, ти. Дүртенсе көндә эшенә килгәс, хужаһы саҡыртып алып, келәмгә баҫтырған.

- Өс көн буйына эшкә сыҡмай ҡайҙа йөрөнөң, ниңә хәбәр итмәнең? - тип ябырылған уға талапсан хужа.

- Ней бит әле, Фәлән Фәләнович! Эсеүҙе ташлағайным, шул шатлыҡтан эсеп ташлағанмын, - тигән, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә, аҡланырға теләгән хеҙмәткәр.

- Шәп булған! Ярай, ташланың, ти, шатлығыңдан байрам да иттең, ти, ә иртәгәһен һуң, эшкә килергә була ине бит, - тип тороро ярһыған төрә, хеҙмәткәренә тишә ҡарап.

- Килә алманым шул, иртәгәһенә баш төҙәттем, - тип яуаплаған тегеһе.

- Ә өсөнсө көн, кисә ниңә килмәнең? - тип ябырылған булмә хужаһы.

- Ней бит әле, Фәлән Фәләнович! Бахмурҙан ауырыным... - тигән булған келәмдә баҫып тороусы.

Был лаҡапты ниңә һөйләйемме? Бер нисә тапҡыр үкталып, эсеүҙән туҡталып, аҙаҡ кире башлап, тағы ташлап, иң һуңынан бөтөнләй туҡтаған кеше булараҡ, кешене араҡы эсеүҙе ташларға, аҙаҡтан кире эсеп китергә мәжбүр итеүсе сәбәптәргә туҡталмаҡсымын.

Наркологтар кеше өс осраҡта, өс сәбәп арҡаһында үҙенән-үҙе, тик ихтыяр көсө ярҙамында эсеүҙән ҡотола ала, тип иҫәпләй. Бына улар:

1. Кеше самаһыҙ күп һәм оҙайлы ваҡыт эсеп, йәшәү менән үлем араһында тороп ҡалғанда, әгәр ҙә йәшәүҙе һайлаһа, тәүбәгә килә һәм эсеүенән туҡтай.

2. Тормош иптәшенең йәки башҡа ғаилә ағзаларының: " Йә - беҙ, йә - араҡы!"- тип ҡуйған "ультиматум"ын тыңлағандан һуң, әгәр ҙә ғаиләһен юғалтҡыһы килмәһә, эсеүенән баш тарта.

3. Эшләгән ерендәге хужаһының йәки коллектив ағзаларының уның эсеүенә ҡарата белдергән дәғүәһенән һуң, әгәр ҙә эш урынын юғалтҡыһы килмәһә, араҡынан ваз кисә.

Былар кешене эсеүҙән үҙе теләп баш сөйөргә мәжбүр итеүсе сәбәптәр. Ошо осраҡтарҙа ғына эсеүҙән яфаланыусы кеше, үҙе теләмәһә лә, ғүмерен, ғаиләһен йәки эш урынын һаҡлап ҡалыр өсөн был аҙымға бара.

Ауырыуға дусар булғанда табибҡа әүерелгән, тигән һымаҡ, мин үҙемсә башҡа сәбәптәр тураһында ла уйландым. Наркологтар өс сәбәп тураһында белмәй әйтмәйҙер, был, ысынлап та, шулай. Әммә кеше тота килеп ошо өс сәбәпкә бәйле өс ҡурҡыныс янамаған хәлдә лә, эсеүенән туҡтай алмаймы ни? Туҡтай ала!

Беренсенән, ғүмер бер генә, нисек йәшәһәң дә, барыбер үтә. Спиртлы эсемлектәрҙән бөтөнләй азат булып, емертеп донъя көтөп, бәхетле йәшәүселәргә ҡарап һоҡланыусы һәм көнләшеүсе кеше, сәмләнеп һәм намыҫланып китеп, үҙе туҡтай ала. Мин бындай миҫалдарҙы күп беләм.

Икенсенән, кеше күңеленең иң мөҡәддәс тойғоһо - мөхәббәт. Ошо тойғо хаҡына кеше нимә генә эшләмәй, утҡа ла, һыуға ла инә. Төптән уйлағанда, донъялағы бар нәмә мөхәббәт өсөн яратылған, уйлап сығарылған, төҙөлгән. Аллаһы Тәғәлә тәүҙә Әҙәм менән Һауаны яралтҡан һәм яратҡан. Әҙәм менән Һауа үҙҙәренең мөхәббәт емеше итеп кешелекте тыуҙырған. Уларҙың мөхәббәт емештәре өсөн торабара йорт, ауылдар, ҡалалар, машина, сәнғәт кәрәк булған. Һәр тереклектең нигеҙендә лә мөхәббәт ята. Шул уҡ тойғо кешене иң ауыр саҡта барлыҡ һәләкәттәрҙән ҡотҡара ала.

Өсөнсөнән, ислам дине, "Ҡөрьән" китабы. Араҡы эскән кешенең күңеленә Иблис шайтанды индереп ултырта, тинек. Донъяла диндән дә, беҙҙең өсөн Ислам диненән дә йәшәйеш өсөн ҡулайлы һәм изге булған мәктәпте бер кем дә уйлап сығармаған әле. Динле булыу, намаҙ уҡыу үҙе үк шайтан ризығынан азат булыуҙы аңлата. Дингә бәйле уйҙарымды алдараҡ һөйләрмен.

Дүртенсенән, кешене һисҡәндәргә мәжбүр иткән ваҡиға, ғибрәтле хәл. Аллам һаҡлаһын, әммә эсеү арҡаһында кемдәрҙер һаулығын юғалта, янып үлә, үҙ-үҙенә ҡул һала. Был хәлдәрҙе теләмәһәк тә, тормошобоҙҙа улар көн һайын тиерлек осрап тора. Ғибрәтме? Ғибрәттең дә ниндәйе бит әле! Был хәлдәрҙең шаһиты булған кеше киләсәк хаҡына ошо юлдарҙы уҡығас та эсеүенән ваз кисергә бурыслы.

Өс сәбәп янына тағы ла дүртәү өҫтәлгәс, улар барлығы етәү булып китте. Иң мөһиме - теләк һәм ихтыяр ғына булһын. Үҙемдән сығып, шуны беләм: был сәбәптәрҙең береһе тәүге аҙымды яһағанда ғына кәрәк, ҡалған алтауһы киренән эсеп китмәҫ өсөн берҙәм таяныс булһын.

Бер тапҡыр ташлап, киренән эсеп китеү өсөн сәбәп юҡ, сөнки ете сәбәп бер-береһенә ныҡ бәйләнгән, улар бер-береһен тулыландыра, береһен генә алып ташлаһаң, башҡалары ла әйәрә. Киренән эсеп китеү өсөн һылтау ғына булыуы ихтимал. "Һыныҡҡа - һылтау" тигәндәй, ҡулыңды рюмкаға үрелергә мәжбүр итеүсе хәлваҡиға һинең хужаңа әүерелә. Ә нисек итеп уны еңергә була? Әлеге лә баяғы, ихтыярға килеп еттек. Алдағы һанда Ихтыяр хаҡында һөйләшербеҙ.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...



# ЙӘШ ҒҮМЕРЕМ...
## эскелектә үткән дә киткән

**Әхмәр Үтәбайҙың "Мин эсеүемде ташланым" тигән ошо яҙмаларын уҡып, ғибрәт алғандар мотлаҡ барҙыр. Шулай уҡ үҙенең дә тәүбә һүҙен ишеттеререргә теләгәндәр булыр, моғайын. Шундайҙарҙың береһе - "йәшел йылан" арҡаһында йәшлеген, һаулығын, бынамын тигән ғаиләһен юғалтҡан элекке эскесенең һөйләгәндәрен "Киске Өфө"нө уҡыусыларға тәҡдим итергә булдым.**

–Минән йыш ҡына, эсеүҙе нисек ташланың, тип һорайҙар, - тип һөйләп китте ул. - Был дөрөҫ һорау түгел. "Ни өсөн эсә башланың?" тип һораһалар, дөрөҫөрәк булыр ине. Элек бит байрамдар күп булды: Октябрь байрамы, Яңы йыл, 8 Март, 1 Май, тыуған көндәр, туйҙар, ҡоҙалашыуҙар һ.б. Ҡунаҡлашыуҙар, мәжлес ҡороуҙар йыш үткәрелде. Бындай саралар өсөн һәр өйҙә мискә-мискә бал ҡойолдо. Беренсе тапҡыр, 8 класта уҡығанда, 1 Май байрамын билдәләргә урманға сыҡҡанда эсеп ҡараныҡ. Тәмен бер татығас, ҡуймаlыҡ. Бынан һуң һәр кемдең тыуған көндәрен билдәләү, армияға оҙатыуҙар ҙа эскеһеҙ үтмәй башланы. Армиянан ҡайтҡас, эске мәжлестәре ғәҙәти күренешкә әйләнде. Утын, бесән алып килһәң дә, һуғым һуйһаң да, бесән сапһаң да, мотлаҡ бал менән һыйларҙар ине. Ә инде кәбән һалғас, уны "йыуып" ҡуймаһаң, ҙур яҙыҡ һанaлды. Бер ваҡыт һәр кемдең һөнәри байрамын да билдәләй башланыҡ. Йәштәр күп, араларында кемдәр генә юҡ: шахтерҙар, ауыл хужалығы эшсәндәре, төҙөүселәр, водителдәр, әрмелә моряк, десант, пограничник булып хеҙмәт иткәндәр. Һәр мәжлес шешәнән башлана. Берәүҙәр бер-ике рюмка эсә лә туҡтай, кемгәлер етмәй ҡала. Бына шул һуңғыларына, бер-береһенә шешә аша хөрмәт белдереп, ҡалыпҡа һалынған традицияны боҙмай, эсеүен дауам итеүселәр араһына мин дә инә башланым. Иртәгәһенә күп эсеүҙән сатнап килгән башты йүнәтеү ҙә йәйләп ғәҙәткә инеп китте. Эсеп алһаң, донъя тубыҡтан, эшең түгел, ниңә донъяң ҡыйралып ятмай икән. Рәхәт, бер хәсрәтең юҡ. Атым юҡ арандa, ҡайғым юҡ буранда, тип йырлау ҙа нәҡ беҙҙең турала ул. Минең өҙләкһеҙ эсеүем, йәғни "запой"ға китеүем ҡасан башланды һуң? Уйлана башлаһаң, әллә ҡасанғы хәлдәр иҫкә төшә.

Мин дә эскесе булып тыумағанмын. Ябай эшселәр ғаиләһендә тәрбиәләндем. Атай менән әсәй көнө-төнө совхоз эшендә булды. Беҙ, балалар, һәр кемебеҙ үҙ ҡарамағында. Кисен, бөтә ғаилә йыйылған арала ғына атай-әсәй үҙҙәренең өгөт-нәсихәтен биреп ҡалырға тырыша. Бигерәк тә уларҙың, кеше әйбеһенә ҡул һонмағыҙ, төймә урлаған да, дөйә урлаған да берҙәй ғәйепле, тигәне аңға ныҡ һеңеп ҡалған. Хәҙер шуныһы

үкендерә, нинә шунда эске менән мауығыу - бөлә, шешәгә үрелеһе булмағыҙ, барлыҡ бәләләрҙең башы шунда, "йәшел йылан" бәхетегеҙҙе, һаулығығыҙҙы ғына түгел, ғүмерегеҙҙе лә алып китер, тип ҡурҡытмағандар икән. Ул саҡта балаларын аяҡҡа баҫтырам тип эштән арынмаған атай-әсәйҙең башына ла инеп сыҡмағандыр инде ҙур өмөт бағлап үҫтергән улдарының киләсәктә баш эскенән сыҡмаҫы.

Ниндәйҙер көнгә тиклем ап-арыу егет инем. Мәктәпте тамамланым, хеҙмәт иттем. Бынамын тиган ҡыҙға өйләндем. Өр-яңы КамАЗ машинаһында эшләнем. Ул ваҡытта бындай машинала йөрөү егеттәрҙең иң көттәһенә генә эләгә ине. Клубта үткән уйын-кисәләрҙең дә уртаһында булдым. Аҡсаны көрәп эшләнем. Кеҫә ҡалын булғас, дуҫ-иштәр ҙә күбәйеп китте. Үҙем әллә ни эсмәһәм дә, тегеләрҙең маҡтауына бирелепмелер, барыһын да һыйлайым. Иғтибар үҙәгендә фыртауай егет булып йөрөй торғас, яйлап ҡына үҙемдең дә хәмер ҡоллоғона бирелеүемде һиҙмәй ҡалғанмын. Эскән иргә ниндәй ҡатын түҙеп торһон инде - яратып өйләнгән кәләшем дә ташлап ҡайтып китте. Бер көн эшләп, ике көн юғалып йөрөгән кешене эштә лә тоторға теләмәнеләр. Шулай эшһеҙ, аҡсаһыҙ ятам ауылда. Ул ваҡытта ауылдарҙа бензин бысҡыһы бик һирәк кешелә генә бар ине, булғандары ла үҙенән арттырманы. Аҡса күп саҡта мин дә һатып алғаным уны. Кеҫәлә елдәр уйнағанда бик ярап ҡалды шул нәмә. "Дружба"ны йөкмәп алам да, йөрөйөм өй беренсә утын бысып. Эш башлағанда үҙең генә тотонһаң да, утынды бысып бөтөр саҡта эргәңдә йөҙ грамм өмөт иткән әллә күпме "ярҙамсы" йыйылып китә. Ауылдаштарҙан хаҡ һорау унайһыҙландыра, сөнки эш хаҡын кейем һалым, аҙыҡ-түлеклөтә алған кешеләрҙең ниндәй аҡсаһы булһын. Ул ваҡытта минең дә һаҡлыҡ кассаһында ятҡан аҡсалырым янғайны. Әллә нисә йыл йыйған аҡсама ни бары бер литр араҡы алып эстем. Шуға күрә, заманына ҡарап, эшең өсөн араҡылата, спиртлата алыу бер ҙә гәжәп түгел ине. Исмаһам, алған араҡың сифатлы булһаҫ, уның да халыҡ телендә "самопал" тип танылғаны. Эскән саҡта шул араҡы яңылыштан ғына түгелеп китһә, иҙәндең буяуы ҡап-ҡара төҫкә инеп китә торғайны. Әҙ беҙ ул турала уйлап та тормайбыҙ. Етмәй ҡалһа, спирт йә самогон һатыусыларға тағы ла йүгерәбеҙ. Һатыусылары ла, ярамағанмы алкашҡа, типтер инде, спирттарын, самогондарын теләһә ниндәй бысраҡ һауытҡа ҡойоп бирә. Шешә төбөндә ятҡан төрлө бәжәк, бысраҡты алып ташлайбыҙ ҙа, көслө градуска микроб сыҙамай ул, тип, сәкәштереп эсеп ебәрәбеҙ...

Ҡалалағы бер әбейҙән йыш ҡына көмөшкә һатып ала торғайныҡ. Бер саҡ сираттағы эскенән һуң, етмәй ҡалғас, шунда йүгерҙек. Барһаҡ, әбей өйҙә юҡ. Өгөтләй торғас, ейәнсәрен көмөшкә һатырға таки күндерҙек. Ҡасан сығара һала инде, тип көтөп торһаҡ, килеп сыҡты был. "Мәгеҙ, бынынынһың күпме һалырға самаһын белмәйем, үҙегеҙ генә һиптереп алығыҙ", - тип, "дихлофос" бирә. "Рәхмәт, быныһын һиптереп тормайбыҙ. Шулай булғас, көмөшкәң дә осһоҙораҡ булырға тейеш", - тип, ярты хаҡын ғына бирҙек тә тиҙерәк ҡаса һалдыҡ. Йүнле кеше булһа, дихлофослы көмөшкә эсеп, күптән үлгән булыр ине. Күрәһең, иҫәпкә бар, һанға юҡ меҫкен бәндәләрҙе Хоҙай үҙе лә ҡул һелтәгән. Шундай теләһә нәмә эскәс, нисек кенә аҡылыңды юймаҫһың да, ауырымаҫһың инде.

Күп эсеп, минең дә күҙгә теләһә нәмә күренеп, илергән саҡтар күп булды. Бер ваҡыт шулай иҫереп өйҙә ятам. Шул саҡ мейестең аҡланған стенаһынан телевизор экранындағылай йөнле һүрәттәр күренә башланы. Шулар араһында үҙемде лә күрәм. Ҙур йөк машинаһында күпер эргәһенән китеп барам. Унда бик күп машиналар йыйылған. Туҡтап, эргәләренә барһам, йәп-йәш матур ғына ҡыҙҙы машина тапаған. Бөтәһе лә минә ябырылды. Иҫерек башың менән рулгә ултырып, һин үлтергәнһең, тиҙәр. Әле генә килеп туҡтаным бит, минең бер гәйеп тә юҡ, тиеп ҡарайым, ышанмайҙар. Үҙемде ҡапшап, семеткеләп тә алам, уяумын, йоҡламайым. Ошо һаташыуҙы бер түгел, әллә нисә тапҡыр кинолағылай аҫыҡ итеп күрҙем. Ғәҙәттә, ҡояш байығас башлана төрлө ғәләмәттәр, күҙгә теләһә нәмәләр күренеү. Элек күрше әбейҙең, кешенең ике яурынында ике фәрештә бар, береһе - яҡшы, икенсеһе яман эштәрҙе яҙып ултыра, тигәненә ышанмай көлә торғайным. Әле мейес стенаһында бына шул фәрештәләрҙе лә күрә башланым. Береһе бик ағымлы һөйләшә, эргәһендә күнелле итеп балалар уйнай, уның эргәһендәге төҫтәр ҙә бик сағыу, матур, ә икенсеһе иһә, һине шул уҡ минутта үлтереп ташларға теләгәндәй, усал ҡылана. Эргәһендә ҡап-ҡара төтөн сығып тора, үлгән мал һөйәктәре, эт, бесәй үләкһәләре ята. Ошо усалдары килеп сыҡһа, яҡшы фәрештәләр шунда уҡ юҡҡа сыға. Усалдар менән аралашыуы ҡурҡыта, ә изгеләренә үҙемдең һорауҙарымды бирәм. Мәрхүм атайым тураһында һорағас, улар мине үҙҙәре менән осороп алып китте. Күрәм, атайым тыныс ҡына йоҡлап ята. Күҙҙәрен асҡас, мине күреп ҡалды ла иҫе китте. "Бында килергә һинә иртә әле. Бар ҡайт, йөрәмә", тип, мине ҡыуа. Шунда уҡ фажиғәле рәүештә үлеп ҡалған ике кешене лә күрһәттеләр. Улар ниндәйҙер оҙон плащ кейеп алған, йөҙҙәре йәмрәйгән...

Теге донъяла йөрөп килеү миңә ҡыҙыҡ та, ҡурҡыныс та була торғайны. Шулай ике донъяла йөрөй торғас, өн менән төштә лә тамам бутап бөттөм. Яңылыш хәбәр һөйләүҙәр йышайҙы. Фәрештәләрҙән күпме йәшәүемде лә һорағайным. Усалдары килеп сыға һала ла 44 тип яҙып күрһәтә. Улар китһә, тегеләре, изгеләре килә. Улар эргәһендә матур итеп кейенгән әбейҙәр, күнелле итеп ҡурсаҡ уйнаған балалар күренә. Мине йыуаталар, ҡурҡма, тиҙәр һәм 70-те үтәһең, тип ымлайҙар. Шуныһы ҡыҙыҡ, бәлки, ҡыҙғаныстыр ҙа, тилереп ятҡан саҡта мал баҡырған, эт өргән тауыштар ҙа ағлашыла. Себендәрҙең быҙылдауы матур көй булып ишетелә. Уларға ҡушылып, һөйләшеп ятҡан саҡтар ҙа булды.

Усал фәрештәләр 44-те күрһәткәс, көн һайын үлемемде көттөм дә йөрөнөм. Миңә ул саҡта ни бары 42 генә йәш ине. Барыбер үләм, тинем дә донъяның бөтә араҡыһын эсеп бөтөрәрҙәй булып, туймай эстем дә эстем. 44 йәш тулғас, ике тапҡыр үлемдән ҡалдым. Береһендә, һаташып, әсәйемә барғанмын. Өйҙә әсәйемдән башҡа бер кем дә булмаһа ла, бөтә балаларыңды ла йыйғанһың, мине генә ситләткәнһең, яратмайһың мине, тип үпкәләгәнмен. Ябығып, ҡаҡ һөйәккә ҡалған улының күҙенә юҡ нәмә күренеүенән ҡурҡҡан әсәйем фельдшер саҡыртҡан. Ошо ятыуҙан 10 көн тора алмай яттым. 7 көн йоҡлай алманым, күҙҙе йомоуоң була, теләһә нәмә күренә, күптән мәрхүм булған кешеләр килә, һаташтыра башлай. Бер нәмә ашамайым, һыу эсәм дә ҡоҫам. Аллаға шөкөр, усал фәрештәләрҙең юрағаны юш килмәне. Хоҙай үлемдән һаҡланы. Шунан алып, Аллаһы Тәғәләнең барлығына тамам ышандым. Йүнәлгәс, бер ай иҫемә килә алмай, тамсы ла эсмәй йөрөнөм. Тик ай үтеү менән онотолдо барыһы ла. Элекке тормош яңынан башланды...

Һыуыҡ ҡышҡы көндә урам буйлап китеп барам. Эске килә, тик кеҫәлә һуҡыр тин дә юҡ. Күрәм, Сәлимә әбейҙең Силәбелә йәшәгән кейәүе машинаһы эргәһендә соҡсона. Эҙнә, тигән булып, киттем эргәһенә ҡылын тартҡыларға.

- Исмаһам, бер эҙнәлегенде күрһәт, тәҙәт ҡәйнешендең башын, - тием. Һөйләшкеһе килмәй тегенең.

- Мин ҡунаҡҡа килгәнмен, үҙең һыйла, - ти. Кемдәндер Силәбелә эскелектән дауалаған әбей барлығын ишетеп ҡалғайным, шуны иҫкә төшөрөп:

- Улай булғас, ултыртып алып ҡайт, әбейгә барып дауаланам, - тим. Үҙем эстән генә, мине барыбер бер ниндәй гипноз да, кодировка ла алмай, ултыртып алып ҡайтыуын ҡайтһа, унда йәшәгән ағай-эне буш ҡалдырмаҫ әле, тип уйлайым. Эҙнә кеше, бер-ике сәғәттән кил, тигәс, тиҙ генә ҡайтып, әсәйҙе күндерҙем.

- Әйҙә, йыйын, киттек Силәбегә, эскелектән дауаланам, - тигәс, әсәй ауырыҡһыныһ торһа ла, ҡыуанып, тиҙ генә йыйына башланы. Дауаланырға мин һеҙгә алкашмы әллә, теләһәм, былай ҙа эсмәйем, тип ҡаршылашҡан улының кире уйлап ҡуйыуынан ҡурҡҡандыр инде. Шулай итеп, дауаланам тигән һылтау менән Силәбегә баш төҙәтергә сығып киттек. Юлда әсәйҙе төрлөсә өгөтләп, бер шешә һыра алдырайым тиһәм, эҙнә туктамай. Саҡ түҙҙем 4-5 сәғәтте. Шулай ҙа барып еткәс, күстәнәсһеҙ уңайһыҙ, тип, барыбер ҙә бер сикүшкә алыуға күндерҙем. Силәбеләге ағай-эне етеш йәшәй. Үҙҙәренсә, туғандарына хөрмәт күрһәтәбеҙ, тип уйлайҙарҙыр инде, әле береһе, әле икенсеһе табын әҙерләп, саҡырып ала. Минә артыҡ һый-ниғмәт кәрәкмәй, эсергә булһа, еткән.

Шулай бер тәүлек ҡыл да ҡыбырлатмай ғына һыйландым. Шәмбе килгәйнек, дүшәмбе әбейгә барырға кәрәк. Әсәйҙе ышандырып алып килһәм дә, дауаланырға бер ҙә барғы килмәй, төрлө хәйлә уйлап ҡарайым. Бәхеттән әбей гриптан ауырып, беҙҙе ҡабул итмәне. Тик ҡыуаныс оҙаҡҡа барманы, апайым икенсеһен тапҡан. Эскеселәр күп, уларҙан да бигерәк дауалаусылары күп икән, тип, теләр-теләмәҫ кенә киттем әбейгә. Ҡытай ысулы менән эскегә ҡарамаҫлыҡ итеп сығарҙылар.

Электричка менән ҡайтырға юлландыҡ. Тамбурға тәмәке тартырға сыҡтым. Тышта ябалаҡлап ҡар яуа, һауа саф, тирә-яҡ матур. Күнелдә шундай еңеллек, баш та ауырымай, эске лә килмәй. Шул саҡ, эскелек менән үткән бөтә тормошомдо, күнелдәге бөтә бысраҡты аҡ ҡар менән күмеп ташлағы килде. Был 2004 йылдың март айы ине. 10 ай үткәс, тәмәкене лә ташлап, бөтөнләй сәләмәт тормошҡа күстем.

Бөгөн бигерәк тә эскән йәштәрҙе күреп, үҙәк өҙөлә. Бер көн килеп, минең кеүек айнып китерҙәр ҙә ул, тик бушҡа уҙған ғүмерҙәрен генә кире ҡайтара алмаҫтар. Эскелектән ҡотолоу кәрәклеген үҙе аңламайынса, унан тамам ваз кисмәйенсә, бер кемде лә был һаҙлыҡтан көсләп тартып сығарып булмай. Әбейҙәргә йөрөтһәләр ҙә, код менән дауалаһалар ҙа, көсләп астырған күҙҙең яҡтыһы күпкә етмәйәсәк. Иҫерек егеттәргә үҙемдең баштан үткәндәрҙе һөйләп, аҡылға килтерергә тырышам. Эйе, минән көләүселәр ҙә бар, нимә, хәҙер кеше булдыңмы, тиҙәр. Эйе, Аллаға шөкөр, кеше булдым. Һуңлап булһа ла тәүбәгә килеп, кешеләрсә йәшәй башланым. Өй һалдым, техника алдым. Тик ғүмер үткән дә киткән. Бик үкендәрә лә бит, кирегә генә юл юҡ.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА**
**яҙып алды.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Үҙ-үҙеңә абсолют ышаныуҙың төп серҙәре

### Икенсе сер: ҡоллоҡмо, азатлыҡмы?

Ныҡлы нигеҙ-үҙлегенән башҡа үҙ-үҙенә ышанған кешене күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Күптәр үҙе булып ҡалған кеше тәкәббер, үҙен урап алыусыларға ҡарата битараф һәм дуҫтарса мөнәсәбәттә түгел, тип уйлай. Был ҙур хата. Ғәмәлдә, бер кемгә лә буйһонмайынса, ул башҡаларҙың хәленә инә белә, шул уҡ ваҡытта үҙ-үҙенә ышанысы ла ҙур һәм үҙ-үҙен ҡулда тота ла белә.

Үҙең булып ҡалыу юлындағы иң ҙур ҡатмарлыҡ - башҡаларҙы аҡыллыраҡ, зирәгерәк, интеллекттары үҫешкәнерәк тип янылыш уйлауҙа. Һөҙөмтәлә бәхет һәм именлек үҙегеҙҙе урап алған кешеләргә бәйле тип уйлай башлайһығыҙ. Бындай бәйлелектә булған кеше һәр саҡ ниндәйҙер тышҡы сәбәпкә ынтыла. Кешеләрҙән, хәл-тороштан, шарттарҙан йәки Аллаһы Тәғәләнән үҙе өсөн үҙе эшләргә тейеш булған нәмәләрҙе таптыра башлай. Тап шуның һөҙөмтәһендә буйһоноусан булырға өйрәнә, уның менән идара итеп була, ул кемгәлер яраҡлаша, уға оҡшарға тырыша, ярыша.

**Үҙлек** - ул уңыш ҡаҙана алыуына инаныу ғына түгел, ә унан ҙурыраҡ мәғәнәгә эйә. Ул һеҙгә ниндәй уныш көҫәүегеҙҙе әйтеп тороусы эске тауыш. Үҙлекле булыу - башҡаларҙың кем булырға, нимә алырға, нимә эшләргә тип кәңәш биреүен көтөп ултырмайынса, бары тик үҙеңдең эске ынтылыштарың ҡушыуы буйынса йәшәү ул. Билдәләрҙе уҡырға, интуицияға ышаныға өйрәнгәс кенә үҙебеҙгә ышана башлаясаҡбыҙ һәм кемдәндер ҡурайына бейемәйәсәкбеҙ.

**Буйһоноу гәҙәтен таныу һәм уны емереү. Кемгәләр буйһоноу** - ике яҡлы килешеү буйынса барлыҡҡа килтерелгән ҡоллоҡ. Был буйһоноусы кеше өсөн дә, кемдер унан буйһоноулы булған кеше өсөн дә түбәнселек. Үҙлектән булмауы ике яҡҡа ла хас, сөнки бындай мөнәсәбәттәр килешеүле эксплуатация нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Кемдәндер бойондороҡло булыу насар тип уйлайһығыҙмы. Шулай шул! Сөнки кешенең үҙ проблемаларын хәл итеү өсөн кәрәк булған үҙлеген үҫтереү һәләте юғала. Буйһоноуҙың күрһәткесе булып башҡаларға аҫтан өскә - уларҙы үҙегеҙҙән яҡшыраҡ тип ҡарау тора. Үҙегеҙҙе кем менәндер сағыштырырға теләп, һеҙ психологик ҡоллоҡҡа инәһегеҙ.

Ҡайны бер кешеләрҙең анына тирә-яҡтағыларға таяныу һәм уларға бәйле булыу гәҙәте шул тиклем ныҡ һеңгән, улар башҡалар фәйҙаһына үҙҙәренән тулыһынса ваз кискән. Уларға, әгәр ҙә кешегә, ниндәйҙер ойошмаға тоғро булып йәбешеп алһаң, хәүеф янамаған кеүек тойола. Үҙҙәренең бәхете һәм үҙ-үҙен раҫлауы өсөн яуаплылыҡты улар башҡалар елкәһенә һала. Әлбиттә, был осраҡта, әгәр нимәлер килеп сыҡмаһа, яуаплылыҡты кемгәләр япһарырға мөмкин.

Буйһоноусандар үҙен урап алған кешеләр власында була. Уларҙың өҫтөнлөгөнә инанып, проблема менән күҙгә-күҙ осрашҡанда уны кемдең елкәһенә һалырға тип уйлай башлай. Бойондороҡло булараҡ, ул кәңәштәрҙе шул минутта уҡ эшләргә кәрәкле бойороҡ тип ҡабул итә. Ә "кәңәшселәр" күп булғанлыҡтан, һәр саҡ кемдең фекеренә ҡолаҡ һалырға ла белмәйенсә, ярҙан-ярға бәргеләнә.



## 16 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00"Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Влюбленные женщины". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.20, 03.05 "Оптом дешевле". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.
03.15 "Вегас". Сериал (16+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Любовь к деньгам с первого взгляда". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Людмила Гурченко". 9-я и 10-я серии. Биографический сериал (12+).
23.00 "Честный детектив" (16+).
24.00 "Частные армии. Бизнес на войне", "Следственный эксперимент. Смертельный автограф" Док. фильмы
01.30 "Дорога, ведущая к счастью". Худ. фильм (16+).
03.25 "Сын за отца". Сериал (16+).
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 Новости недели.**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (12+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+)**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**18.00 "Бай" (12+).**
**18.25 Хоккей. МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Чайка" (Нижний Новгород).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.).**
**23.00 "О людях и богах". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Падающая звезда".**

## 17 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Влюбленные женщины". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Давай поженимся!" (16+).
19.30 "Влюбленные женщины". 2-я серия (16+).
20.30 "Время".
21.00 Футбол. Товарищеский матч. Сборная России - сборная Хорватии. Прямой эфир.
23.00 "Влюбленные женщины". 3-я серия (16+).
24.00 "Вечерний Ургант" (16+).
00.35 Ночные новости.
00.50 "Структура момента" (16+).
01.55, 03.05 "Брубейкер". Криминальная драма (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Кто старое помянет". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Людмила Гурченко". 11-я и 12-я серии (12+).
23.00 "Вести.doc" (16+).
00.40 "Четвертое измерение", "За гранью. Напечатать мир". Док. фильмы
02.15 "Сын за отца". Сериал (16+).
03.15 "Диктор Иванович. Солдат телевидения".
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Полезные новости" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Будьте здоровы" (12+).**
**18.00 "Солнечная Фирдаус" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Я, ты, и все, кого мы знаем". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Наш одуванчик" (12+).**

## 18 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Влюбленные женщины". Сериал
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Влюбленные женщины". 5-я и 6-я серии (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Политика".
01.35, 03.05 "Огненные колесницы". Худ. фильм.
04.05 "Измена". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Гоп-стоп". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Людмила Гурченко". 13-я и 14-я серии (12+).
23.00 "Специальный корреспондент"
00.40 "Нюренбергский набат. Репортаж из прошлого" (12+).
02.40 "Сын за отца". Сериал (16+).
03.40 "Комната смеха".
0-4.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык"**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**16.00 "Байтус" (0+).**
**16.15 "Капитономика" (0+).**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Интервью".**
**20.45 "Полезные новости" (0+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (6+).**
**23.00 "Нью-Йорк, Нью-Йорк". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Кавардак" (12+).**

## 19 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Влюбленные женщины". Сериал
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Влюбленные". 7-я и 8-я серии
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "На ночь глядя" (16+).
01.20, 03.05 "Коллективный иск". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.40 "Измена". Сериал (16+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Не сидите на столе". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан" (на башк. яз.).
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек". Сериал (12+).
16.00 "Земский доктор". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Людмила Гурченко". 15-я и 16-я, заключительная, серии (16+).
23.00 "Поединок" (12+).
00.40 "Душ", "Трагедия Галицкой Руси". Док. фильмы (16+).
02.50 "Сын за отца". Сериал (16+).
03.45 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык"**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 22.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**18.00 "Историческая среда" (6+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Лада" (Тольятти).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Долгое прощание" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Любишь - не любишь?" (12+).**

## 20 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "Влюбленные женщины". Сериал
14.25, 15.15 "Время покажет". Ток-шоу
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.45 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Муз. конкурс (12+).
23.40 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.40 "Фарго". Детективный сериал
01.35 "Сэлинджер". Док. фильм (16+).
04.00 "Измена". Худ. фильм (12+).
04.50 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.44, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.00, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Золотое дело". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Наш человек" (12+).
16.00 "Земский доктор". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "70 лет уже не в обед". Юбилейная программа Евгения Петросяна. Вечер второй (16+).
23.00 "Одинокие сердца". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
03.00 "Горячая десятка" (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+)**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал**
**15.45 "Истории в табличках" (6+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.15 "Ал да гөл" (0+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Будьте здоровы!" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорт йыры" (12+).**
**20.45 "Точка зрения" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Посвященный". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Одолжи мне жеребца" (12+).**

## 21 НОЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Женщины".
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Майя. Великолепная". К юбилею Майи Плисецкой (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Теория заговора" (16+).
15.00 "Голос". Муз. конкурс (12+).
17.10 "Следствие покажет" с Владимиром Маркиным.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
17.05 "ДОстояние РЕспублики". "Александр Розенбаум".
21.05 "Время".
21.25 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Копы в юбках". Криминальная комедия (16+).
01.10 "Пляж". Худ. фильм (16+).
03.25 "Приятели из Беверли Хиллз"
05.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.45 "Срок давности". Худ. фильм
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа"
09.30 "Правила движения" (12+).
10.25 "Личное. Валентин Гафт" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Две жены" (12+).
12.20 "Слепое счастье". Мелодраматический сериал. 4 серии
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Слепое счастье". Продолжение сериала (16+).
16.45 "Знание - сила". Телевикторина.
17.35 "Сломанные судьбы". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Сломанные судьбы" (12+).
22.20 Большой праздничный концерт, посвященный Дню работника налоговых органов. Прямая трансляция из Государственного Кремлевского Дворца.
00.45 "Я подарю тебе любовь" (12+).
02.50 "Осенние заботы" (16+).
04.30 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00, 12.30, 19.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Гнездо дракона" (12+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**20.45 "Осрашыу" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Четвертый период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Карты, деньги, два ствола". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Два берега бытия" (12+).**

## 22 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Рататуй" (12+).
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Душа нараспашку". К юбилею Нонны Мордюковой (12+).
13.25 "Дело было в Пенькове" (12+).
15.20 "Три плюс два". "Версия курортного романа" (12+).
16.25 "Три плюс два". Комедия.
18.25 "КВН-2015" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
23.00 "Метод". Криминальный сериал
01.50 "Лучшее предложение". Мелодрама (16+).
03.20 "Келли от Джастина" (12+).

### РОССИЯ 1

05.50 "Тревожное воскресенье". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается".
12.10 "Кривое зеркало души" (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Кривое зеркало души". Продолжение сериала (12+).
16.00 "Синяя птица". Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов.
18.00 "Алла в поисках Аллы". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "Влюблен и безоружен". Мелодрама (12+).
02.30 "Шарль де Голль. Его Величество Президент" (12+).
03.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Осрашыу" (6+).**
**09.00 "Четвертый период" (6+).**
**09.30 Мультфильмы (0+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**15.00 "Золотой фонд Башкирского ТВ"**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Вестиник "Газпром трансгаз Уфа"**
**16.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**16.55 Волейбол. Чемпионат России. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Факел" (Новый Уренгой).**
**18.45 "Любимое дело" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Танцуют все!"**
**20.15 "Это мы!" (0+).**
**20.45 "Пятый угол" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байык-2015" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Влюбленные". Худ. фильм (18+).**
**02.00 "Свидание с джазом" (12+).**

*КӨН ҠАҘАҒЫНДА*

# ТОРАТАУҒА ҠАҒЫЛМАҒЫҘ!



**Башҡортостанда Торатау һәм Йөрәктауҙа эзбизташ табыу яҡлылар һәм уға ҡаршы сығыусылар араһында бәхәс тағы ла көн үҙәгенә сыҡты.**

"Башҡортостан химияһы" холдингына ингән һәм Рәсәйҙең яндырылған сода етештереүсе эре "Башҡортостан сода компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте сеймал запасы аҙ ҡалыуы һәм тап улар атаған тауҙарҙы киләсәктә төп эзбизташ сығарыу сығанағы тип күҙаллауҙары тураһында туҡтауһыҙ тамаҡ йырта, сеймалһыҙ ҡалыу предприятиеның эшмәкәрлеген туҡтатасаҡ һәм был иҡтисади, социаль проблемалар тыуҙырыуы ихтимал, тип раҫлай. Әммә республика Хөкүмәте, йәмәғәтселек иһә шихандарҙы дәүләт яҡлауында булған тәбиғәт һәйкәлдәре тип ҡарай. Социологик һорау алыуҙарҙа ҡатнашҡан халыҡтың 70 проценты уникаль тәбиғәт ҡомартҡыларын емерергә юл ҡуйырға ярамай, тип белдерә. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов сеймалдың альтернатив сығанаҡтарын табыу яғында. Әлеге ваҡытта ике яҡ та бирешергә уйламай. Ошо көндәрҙә булып үткән матбуғат конференцияһында БСК вәкилдәре тағы ла бер ҡат, Торатауға альтернатива юҡ, тип белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта БР-ҙың тау-геологик ойошмаларының коммерция булмаған партнерлығы - ассоциацияһы (КбП-А) сода етештереү өсөн икенсе сеймал сығанаҡтарын өйрәнеп, уларға баһалама бирә. Аныҡлап әйткәндә, "Башнедра" КбП-А президенты Рәсих Хәмитовтың Башҡортостан Башлығы Хакимиәтенә адресланған хатындағы һығымтала сода етештереү өсөн яраҡлы булған карбонат тоҡомдары яткылыҡтары тураһында һүҙ бара. "Шундай сығанаҡтар иҫәбендә Белореттан - 12, тимер юл станцияһынан 10 километр алыҫлыҡта ғына булған һәм эзбизташ сығанағы запасы тейешенсә баһаланылмаған Боғанаҡ участкаһы. Шулай уҡ сеймал сығанағы булып Пугачевск, Юлдаш, Төйәләҫ, Йәнгел яткылыҡтары ла атала. "Башҡортостан сода компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек альтернатив эзбизташ сығанаҡтары республиканың көнсығыш һәм көньяҡ-көнсығыш райондарында ла бар", - тигән һығымта яһай "Башнедра" КбП-А эксперттары.

БСК-ның йәмәғәтселек менән бәйләнештәр буйынса директоры Сергей Лобастов иһә компанияның 1992 йылдан алып сеймал сығанағы эҙләүен һәм барлыҡ мөмкин булған сығанаҡтарҙың күптән билдәле булыуын, уларҙың химик составы буйынса ла, запас күләме буйынса ла ентекләп тикшерелеүен белдерә. Компания вәкилдәре "Башнедра" КбП-А-ның һығымталарын "хата фекергә төшөрөү" тип атай һәм үҙ сираттарында "Приволжскнедра"-ның Ҡаран, Ғүмәр яткылыҡтары менән Ҡуштау, Йөрәктау, Торатауҙы сағыштырыу нигеҙендә, БСК-ға яҡын урынлашҡан, сода етештереүгә яраҡлы химик таҙа эзбизташ сығанағы майҙандарын табыу мөмкин булған берҙән-бер участка булып тора", - тигән хатына һылтана. Шул уҡ хатта 1957 йылда Торатауҙың шәкәр сәнәғәтендәге технологик ихтыяжды ҡәнәғәтләндереү өсөн 7,6 тонна эзбизташ запасы булыуы тураһындағы мәғлүмәт килтерелә. Бынан һуң бер ниндәй ҙә тикшеренеүҙәр үткәрелмәй. Ә БСК, әгәр тауҙа тейешле сеймал булған участкалар бар икән, тимәк, ул тулыһынса эшкәртеүгә яраҡлы, тигән ҡарашта һәм уның ҡеүәтен кәмендә 200 миллион тонна, тип баһалай. Был иһә заводҡа 50 йыл эшләүгә етә. Әммә Рәсих Хәмитов бындай иҫәпләүҙәр менән риза түгел: "Торатауҙың физик күләме ауырлығы 60 млн тонна самаһы, шуның 15-20 проценты сода етештереү өсөн яраҡһыҙ эзбизташ булараҡ бракка сығарылыуы мөмкин. Йылына 4 млн тонна сеймал сығарғанда ла, запас компанияға ни бары 12-13 йылға ғына етәсәк", - ти ул. Ә Торатауҙан башҡа сеймал сығанағы юҡ, тип раҫлаған БСК бары тик республика етәкселегенең һәм йәмәғәтселектең башын ғына бутай.

Был бәхәстең нисек тамамланырын әлегә берәү ҙә аныҡ ҡына белмәй ҙә, фаразламай ҙа. Шуға ҡарамаҫтан, үткән аҙнала "Вести FM" радиостанцияһының тура эфирында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Сода" компанияһы өсөн альтернатив сеймал сығанағы эҙләнеүе тураһында белдерҙе: "Беҙ уны табасаҡбыҙ. Ике-өс сығанаҡтың тейешенсә перспективалы булыуын аңлайбыҙ. Улар предприятиенан алыҫ та түгел, 30-35 километрҙа ғына. Беҙ был сығанаҡтарҙың сода етештереү өсөн химия сәнәғәтендә ҡулланыуға яраҡлы булыуын раҫлаясаҡбыҙ". Торатау буйынса үҙенең аныҡ ҡарашын Рөстәм Хәмитов 2013 йылдың апрелендә үк Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы тура эфирҙа: "Мин президент булып эшләгәндә Торатауҙы бер кем дә эшкәртмәйәсәк", - тип белдергәйне.

Йәмәғәтселек тә, депутаттар ҙа тәбиғәт һәйкәлдәрен файҙаланыу ҡарашына ҡырҡа ҡаршы һәм уртаҡ фекергә килергә саҡыра. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Руфина Шаһапова әйтеүенсә, бөгөн Торатауҙы эшкәртеү тураһында һүҙ алып барыу нигеҙһеҙ: тау төбәк кимәлендә тәбиғәт һәйкәле статусына эйә һәм ул тейелгеһеҙ. 2006-2007 йылдарҙа Росприроднадзор үткәргән Рәсәй Федерацияһының махсус һаҡланған тәбиғәт территорияларын (ООПТ) инвентаризациялау мәғлүмәттәре буйынса, дөйөм майҙаны 342 га булған тәбиғәт ҡомартҡылары Торатау менән Йөрәктау махсус һаҡланған тәбиғәт территорияһы булараҡ, дәүләт кадастрына төбәк әһәмиәтендәге ООПТ итеп индерелгән. Әлеге ваҡытта был статусты кире алыу өсөн бер ниндәй нигеҙ юҡ. Ләкин БСК вәкилдәре Торатауҙың "ботаник профиль" буйынса ООПТ булып тороуын һәм һирәк осраған үҫемлектәрҙе күсереп ултыртыуҙы ойошторасаҡтарын белдерә.

Шул уҡ ваҡытта БР тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыев та Торатауҙан махсус һаҡланған тәбиғәт территорияһы статусын алыу өсөн бер ниндәй ҙә хоҡуҡи нигеҙ булмауын белдерә. Шуға ла биологик, палеонтологик һәм тарихи әһәмиәткә эйә был тәбиғәт ҡомартҡыһында уға зыян килтергән, тәбиғи торошон үҙгәрткән эшмәкәрлек алып барыу тыйыла. Үҫемлектәр донъяһына килгәндә лә, Торатауҙа республикала булған дөйөм төрҙөң 23 проценты - 402 төр үҫемлек үҫә. Уларҙың 12-һе реликт (борондан ҡалған), 21-е -эндемик (урындағы) төр. Биологик үҙенсәлегенә ярашлы, ҡайһы берҙәрен күсереп ултыртыу мөмкин дә түгел.

БДУ-ның Иҡтисад, финанс һәм бизнес институты директоры Рөстәм Ахунов, Республика башлығының аныҡ билдәләнгән позицияһы - ул яҡын йылдарға Торатауҙы сәнәғәт эшкәртеүе мәсьәләһе ябыҡ, тигән һүҙ. Әммә шихандарға ҡыҙыҡһыныу һәм ымһыныу туҡтамаясаҡ. Ғәмәлдәге етәксенең вәкәләт мөҙҙәте сығыу менән был мәсьәлә яңынан күтәреләсәк. Ә әлегә бәхәстәр дауам итә...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Ноябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (4) дүшәмбе | 7:19 | 8:49 | 13:30 | 15:40 | 17:10 | 18:40 |
| 17 (5) шишәмбе | 7:21 | 8:51 | 13:30 | 15:39 | 17:09 | 18:39 |
| 18 (6) шаршамбы | 7:23 | 8:53 | 13:30 | 15:37 | 17:07 | 18:37 |
| 19 (7) кесе йома | 7:25 | 8:55 | 13:30 | 15:36 | 17:06 | 18:36 |
| 20 (8) йома | 7:27 | 8:57 | 13:30 | 15:34 | 17:04 | 18:34 |
| 21 (9) шәмбе | 7:29 | 8:59 | 13:30 | 15:33 | 17:03 | 18:33 |
| 22 (10) йәкшәмбе | 7:31 | 9:01 | 13:30 | 15:32 | 17:02 | 18:32 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 ноябрь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия

**15 ноябрь "Джут"** (О. Жанайдаров), драма

**18 ноябрь "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), моноспекталь

**19 ноябрь "Ҡаһым түрә"** (Б. Бикбай, Х. Ирғәлин), драма

**20 ноябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара юрға"** (Т. Ғарипов), мюзикл

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 ноябрь "Күңелле йәшәйбеҙ"** (Н. Ғәйетбай), комедия

**18 ноябрь "Башҡортостан - минең алтын бишегем"** Бейеү театры концерты

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**17 ноябрь "Ҡыҙыҡ менән мәҙәктәр"** эстрада театры тамашаһы

### Мостай Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театры

Ноябрь аҙағы Милли Йәштәр театры тамашасыһы өсөн яңы асыштарға бай буласаҡ. Ул **Мөҙәрис Багаевтың "Аҡса булһа бер муҡса"** музыкаль комедияһының премьераһы менән башлана. Ваҡиғалар XX быуат башында, Минзәлә ҡалаһында йәшәүсе башҡорт сауҙагәрҙәре ғаиләһендә бара. Режиссер Азат Йыһаншин сәхнәләштергән был халыҡ юморына бай, йыр-бейеүле, сағыу тамашаның үҙенсәлеге шунда - бар йырҙар ҙа, көйҙәр ҙә милли уйын ҡоралдары оркестры менән башҡарыла. Бар ғаилә менән рәхәтләнеп ял итә торған комедияға тамашасыны **19, 20 ноябрь** саҡырабыҙ.

Театрҙың башҡорт труппаһы шулай уҡ А. Вампиловтың ғаилә ҡиммәттәре, атайҙар һәм уландар проблемаһын күтәргән **"Өлкән улым"** комедияһына (**24 ноябрь**), аҡсаның да, һөйөүҙең дә ни тиклем ҙур көскә эйә булыуын дәлилләгән В. Красногоровтың **"Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** комедияһына (**25 ноябрь**), шулай уҡ кескәй тамашасыларҙы **27** һәм **29 ноябрь** С. Суринаның **"Алтын балта"** һәм **"Аладдин"** әкиәттәренә көтөп ҡала.

**26 ноябрь** театрҙа **Фәрзәнә Аҡбулатованың "Һомайғош юлы"** лирик-фәлсәфәүи ҡисса тип исемләнгән ижади кисә үтәсәк. Унда ла театр артистары әүҙем ҡатнашасаҡ, әҙибәнең шиғырҙарын, прозанан өҙөктәр һәм уның шиғырҙарына яҙылған йырҙарҙы ишеттерәсәк. Кисә киске 7-лә башлана, инеү ирекле.

**Кем алыҡ?**

**"Аҡса булһа бер муҡса" премьераһына килергә теләүселәргә ике һорау:**

**1.** Мөҙәрис Багаев - ҡайһы башҡорт ырыуы вәкиле?

**2.** Музыкаль комедияның композиторы кем?

Ике һорауға ла дөрөҫ яуап биреүсе тамашасыны ике саҡырыу ҡағыҙы көтә. **Шылтыратығыҙ! Театрҙың әҙәби бүлеге - 272-12-18.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# БАШҠОРТ ҠЫШ БАБАЙЫ ТИРМӘ ҠОРА

**Республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты ғинуар айындағы каникулда ғаилә менән ял итеүгә иҫәпләнгән "Һокланғыс Башҡортостан" социаль проекты менән таныштырҙы.**

Проект сиктәрендә Башҡорт Ҡыш бабайының иң яҡшы ҡунаҡ тирмәһенә конкурс үткәрелде. Конкурста бай саралар программаһы әҙерләгән Ишембай районы еңеп сыҡты. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, Яңы йыл байрамы көндәрендә республика халҡы ғына түгел, күрше төбәктәрҙә йәшәүселәр ҙә Ишембай районының Торатау янында урынлашасаҡ Башҡорт Ҡыш бабайы тирмәһенә сәфәр ҡыла аласаҡ. Урындағы туристик компаниялар "Ҡыш бабай тирмәһенә "бер көнлөк" автобус туры тәҡдим итә. Ҡыш бабай үзенең тирмәһендә ҡунаҡтарҙы ҡабул итәсәк һәм бәләкәстәрҙең хыялдарын бойомға ашырасаҡ. Ҡыш бабайға хатты ошо адреска яҙырға кәрәк: Башҡортостан, Ишембай районы, Урман-Бишҡаҙаҡ ауылы, Ҡыш бабайға.

# "КӨМӨШ АҠБУҘАТ"ТЫ КӨТӘБЕҘ




**9-12 декабрҙә Евразия гуманистик форумы сиктәрендә Өфөлә "Көмөш Аҡбуҙат" II Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале үтәсәге тураһында хәбәр иткәйнек инде. Унда ҡатнашыу өсөн 36 фильм һайлап алынған. Рәсәй, Тажикстан, Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Мысыр, Эстония, Бангладеш, Әрмәнстан, Иран, Һиндостан һәм Рәсәйҙең 11 төбәге үҙҙәренең эштәрен тәҡдим иткән.**

Халыҡ-ара жюриҙы кинорежиссер, сценарист һәм оператор Ходжакули Нарлиев (Төркмәнстан) етәкләй, шулай уҡ уның составына Дәүләтназар Худоназаров (Тажикстан), кино белгесе һәм кино тәнҡитсеһе Гөлбара Толомушева (Ҡырғыҙстан), режиссер һәм сценарист Виктор Лисакович, актер, кинорежиссер, кинодраматург, продюсер Владимир Грамматиков (Рәсәй) инә.

Фильмдарҙы Актерҙар йортонда һәм "Родина" кинотеатрында бушлай ҡарарға мөмкин. Фестивалде асыу һәм ябыу тантанаһы Конгресс-холда үтәсәк. Кинофестивалдең презентацияһынан һуң ҡунаҡтар "Родина" кинотеатрында шау-шыу тыуҙырған "Батальон" фильмын ҡараясаҡ. Шуға бәйле кинотаҫманың генераль продюсеры Игорь Угольниковтың һәм төп ролдә башҡарыусы Мария Кожевникованың килеүе көтөлә. Тантананы алып барыусыларҙың береһе - билдәле актер Александр Белый.

"Беҙҙә шундай сара уҙғарылыуы бик һәйбәт. Мин бик күп фестивалдәрҙә булдым. Ханты-Мансиҙа - экологик, Пермдә - хәрби, Ҡаҙанда мосолман киноһы. Хәҙер этник һәм милли кино Башҡортостанда төпләнде. Беҙҙә төп халыҡтың ғына түгел, республикабыҙҙа йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың да мәҙәниәтен һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен үҫтереүгә иғтибар бүленә", - тип иҫәпләй фестивалдең йәмғәтселек менән бәйләнеш хеҙмәте етәксеһе Гәүһәр Батталова.

Башҡортостандан фестиваль программаһы өсөн биш фильм һайлап алынған. Бына улар: Вилүрә Иҫәндәүләтованың "Тәүбә" документаль таҫмаһы һәм Айнур Аҫҡаровтың "Әсә", Руслан Юлтаевтың "Өс хат", Таңсулпан Бураҡаеваның "Ике күрше", Айсыуаҡ Йомағоловтың "Бибигөл һәм Сәйфелмөлөк" фильмдары.

# БЕР ЙЫР БӘЙГЕҺЕ



**Башҡортостанда тәүге тапҡыр "Сибай" халыҡ йырын башҡарыусылар конкурсы ойошторолдо. Ижади бәйге Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында үтте.**

Конкурс алтынсы кантон начальнигы, импровизатор, ошо йырҙың авторы, халыҡта Сибай кантон булараҡ билдәле Шаһиәхмәт Сибаевҡа арналған. Ул йәшәгән йорттоң стенаһына мемориаль таҡтаташ ҡуйылған. Сибай ҡалаһындағы, Иҫке Сибай ауылындағы урамдар сәсәндең исемен йөрөтә.

Бәйгене ойоштороуға Шаһиәхмәт Сибаевтың туғандары, урындағы ветерандар советы, ауыл советы хакимиәте тәҡдим иткән. Ярыш талантлы сәсәндең хәтерен мәңгеләштереү, оҙон көйҙө башҡарыу традицияларын пропагандалау маҡсатында уҙғарылды. Конкурсанттар "Сибай" халыҡ йырын музыкаль оҙатыуһыҙ башҡарҙы. Районың барлыҡ үҙешмәкәр йырсылары ла һәләттәрен күрһәтте. Һикһән йәшлек Үлмәсбикә Ғатауллина бер тауыштан еңеүсе тип танылды, икенсе урын Фәнил Хәсәновҡа бирелде. Өсөнсө урынды Мәслимә Илтинина менән Сабирйән Байназаров бүлеште. Иң йәш ҡатнашыусы Ирназар Хәсәнов Сибай кантон варисҭарының махсус бүләгенә лайыҡ булды. Тантана һуңында ойоштороусылар конкурсты өс йылға бер тапҡыр үткәрергә вәғәҙә бирҙе.

# ТӨРКИӘГӘ КЕМ БАРА?

**Өфөлә "Turkvision-2015" III Халыҡ-ара телевизион йыр конкурсында сығыш яһаясаҡ йырсылар һайланды. Өлкәндәр араһында финалдың төбәк этабында Зилиә Бәхтиева менән "Әс-Сәләм" төркөмө, балалар араһында Гәлсәр Байғусҡарова еңеү яуланы. Тап улар декабрҙә Истанбулға "Түрквижн" конкурсына барасаҡ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, бәйге сиктәрендә быйыл тәүгә "Bala Turkvision" балалар конкурсы ла ойошторола.**

"Башҡортостан" дәүләт концерт залында үткән һайлап алыуҙа һигеҙ өлкән башҡарыусы, һигеҙ бала һәм бер балалар ансамбле ҡатнашты. Улар араһында республикала танылыу яулап өлгөргән артистар Марсель Ҡотоев, Зөлхизә Илбәкова, Таһир Әсәҙуллин, Динар Халиҡов, "Тамыр" балалар студияһы ансамбле, шулай уҡ Нефтекама, Ағиҙел, Дүртөйлө ҡалаларынан килгән йәш һәләттәр бар ине.

Конкурстарҙың финалы Истанбулда уҙа. "Bala Turkvision" - 15 декабрҙә, "Turkvision-2015" 17-19 декабрҙә тәғәйенләнгән. Бәйге 25 төрки телле илдәрҙән һәм автономияларҙан йырсыларҙы, эстрада коллективтарын берләштерәсәк. "Turkvision" конкурсының маҡсаты - донъя кимләгендә төрки телле халыҡтарҙың мәҙәни үҙенсәлеген, рухи асылын һаҡлап ҡалыу. Уны үткәреү идеяһын ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы тәҡдим иткән. Конкурс 2013 йылда - Төркиәлә, былтыр Ҡаҙанда ойошторолдо. 2013 йылда халыҡ-ара аренала Башҡортостан исеменән Дияна Ишниязова, 2014 йылда "Zaman" этно-төркөмө сығыш яһаны.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИЗГЕЛЕК – ТУРАЛЫҠТА, күркәмлек - холоҡта

Илле итәктән алды,
Алтмыш аяҡтан алды,
Етмеш йүгән һалды,
Һикһән һикегә йыҡты,
Туҡһан туңҡайтып һалды,
Йөҙ өҙөп алды.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кемебеҙ яфаланыуҙарын ҙурламай ҙа үҙен алдамай?

**(Сенека).**

Дуҫ табыуҙың берҙән-бер юлы - үҙеңә дуҫ булыу

**(Ралф Уолдо Эмерсон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше йәйге эҫе көндә бер яңғыҙы ғына юлдан атлап килә. Яңғыҙы булғанға кинәнә ул, йәнәшендә кеше булһа, ҡурҡыр ине һымаҡ тоя үҙен. Әммә тора-бара эргәһендә кеше юҡлыҡтан ҡурҡа һәм йүгерә башлай. Үҙ аяҡтарының йүгергән тауышын ишетеп, тағы ла нығыраҡ ҡурҡа һәм тағы ла нығыраҡ йүгерә. Кемдер артынан ҡыуа төшкәндер, тип уйлап, күҙ ҡырыйы менән генә артҡа ҡарай һәм... артынан ҡалмай йүгергән оҙон шәүләне шәйләй. Ни тиклем шәберәк йүгерһә, шәүлә лә уның артынан ҡалмай йүгерә. Үҙенең аҡылдан яҙа барғанын да аңламай ул. Төн етә һәм кеше уның артынан ҡыуыусы юҡлығын шәйләп, туктала. Әммә таңдың тәүге нурҙары менән уның эргәһендә тағы бояғы шәүлә пәйҙә була, кеше тағы йүгереп китә. Артабанғы көндәрҙә кеше баяғы шәүләне ҡыуып еткермәйем, тип, төнөн дә туктамай йүгереүен дауам итә. Аҙаҡ килеп, был кеше үҙ шәүләһенән ҡурҡыуынан тамам аҡылдан яҙа. Ә уны күргән кешеләр, был ниндәйҙер спорт төрө менән шөғөлләнә, тип, артынан һоҡланып ҡарап ҡала. Кемдер артынан сәскә һибә, кемдер ашарға тоттора. Ә кеше йүгерә-йүгерә лә, бер көн килеп йөрәге шартлап йән бирә. Халыҡ уны хөрмәтләп ерләй һәм зыяратты биҙәүсе хеҙмәткәрҙән ҡәбер ташына ниндәй һүҙҙәр яҙырға кәрәклеген һорай. Хеҙмәткәр шулай тип яҙа: "Был ҡәберҙә ғүмер буйы үҙ күләгәнән ҡурҡып ҡасҡан һәм ғүмерен заяға уҙғарған кеше ерләнгән. Үлем - ул беҙҙең күләгә. Унан ҡасыуҙы дауам итеп, беҙ бер ваҡытта ла туктала һәм уның нимә икәнен белә алмаясаҡбыҙ. Әгәр ҙә был кеше туктаһа, артынан ҡыуыусының ни икәнен белер һәм мөғайын үҙ-үҙенән көлөр ине. Бер кем дә бер ҡасан да үҙ күләгәһенән ҡаса алмай. Бер кем дә күләгә менән көрәштә еңә лә алмай. Әммә был, күләгә көслөрәк һәм беҙгә еңеү яулау мөмкин түгел, тигәнде аңлатмай, был - күләгә юҡ икән, еңеү тураһындағы мәсьәлә лә юҡ, тигәнде аңлата. Булмағанды еңеү мөмкин түгел. Бына шуға ла кешеләрҙе үлем еңә: сөнки үлем - ул тормош күләгәһе".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 13 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары — **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 5168